ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 май (һәбанай) 2020

№20 (906)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм йәмәғәт! 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Алтын Йондоҙ" ҡайтты...



4

Ҡурсаланыу дауам итә: тик бер аҙ ташламалар бар





6

Халыҡтың... аңлылыҡ кимәле ниндәй?



9

Тотош ил... яу яланы булды



12

ТВ-программа 14

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йылдан-йыл климат үҙгәрә бара икәнен беләбеҙ, тоябыҙ. Был хәл кешелекте һиҫкәндерергә тейеш һымаҡ та, әммә әйләнә-тирә мөхиткә мөнәсәбәт үҙгәреүе күҙәтелмәй түгелме?

**Камил ЙӘҒӘФӘРОВ, блогер:** Ҡалыплашып ҡатып ҡалған бер системаны хәтерләтеүсе кешелек аңын үҙгәртеүе, ай-һай, еңелдән түгелдер ул. Кеше бит хәҙер уңай мөхиткә күнеккән: үҙенә нисек яҡшы - шулай эшләргә, нисек теләй, шулай йәшәргә тырыша, башҡаларҙа йә булмаһа, мәҫәлән, климаттың үҙгәреүенә сәбәпсе экология, тәбиғәт проблемаларында уның эше юҡ. Глобаль аң кимәлен бер аҙға ғына булһа ла тәбиғәт һәм экология файҙаһына бора алһа, ниндәйҙер бер ғәҙәттән тыш хәл, стихия йә башҡа берәй бәлә-ҡаза ғына бора алыр ине, моғайын, тип уйлайым. Ләкин бындай хәлдәрҙә лә ниндәйҙер һынылыш булыр тип ышана алмайым. Ә бит һуң ана шундай бәләләрҙең береһе ярты планетаны баҫып алыуына шаһитбыҙ, әммә тыя алдымы ҡайһы берәүҙәрҙе пандемия урамда йөрөмәҫкә, битлек кеймәйенсә сыҡмаҫҡа?

Бынан ары нисек булыр? Фәҡәт ҡулланыуға һәм нәфсе ҡандырыуға булған ихтыяжын еңә алырмы, юҡмы әҙәм балаһы? Климаттың көйһөҙләнеүенә бер бөгөн килеп кенә шаһит түгелбеҙ, ул хәҙер сирек быуатҡа яҡын сабырлығын теҙгендә тота-тота әкренләп яҡынлай бара. Бер тарафтан - һыу баҫа, икенсе яҡтан ут ялмай ғәзиз еребеҙҙе, өсөнсө яҡтан - сир ҡамай... Былар бит тап ана шул климат үҙгәрешен тиҙләтеүсе факторҙар. Ғәжәп! Ә кеше үҙгәрмәй. Климат буйынса БМО ҡарамағындағы Конвенция шарттары бөтә илдәр тарафынан да ҡабул ителмәй, уға ҡул ҡуйылмай. Парник эффектына сәбәпсе углерод диоксиды ($CO_2$) бүлеп сығарыусы етештереү ҡеүәттәрен кәметеү - был документтағы төп шарттарҙың береһе һанға һуғылмай. Йәғни ташкүмер һәм башҡа ҡаҙылма яғыулыҡтар файҙаланыуҙы туҡтатыу, техник ҡоралланыуҙы климат үҙгәрештәренә яраҡлаштырып ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу, энергия эшләп сығарыуҙың башҡа төрлө сығанаҡтарын (ҡояш батареялары, ел генераторҙары һ.б.) эҙләү, дөйөм фондҡа иғәнә аҡсаһы күсереү кеүек бик күп аныҡ саралар башҡарылырға тейеш булһа, улар ҡайһы бер ил башлыҡтары тарафынан һанға һуғылмай. Мәҫәлән, атмосфераны иң ныҡ бысратыусы илдәр иҫәбендә булған АҠШ президенты Дональд Трамп, документҡа ҡул ҡуймау ғына түгел, ә 2017 йылда ошо уҡ климат буйынса Парижда ҡабул ителгән Килешеүҙән сығыуы тураһында белдерҙе. Глобаль йылыныу менән бәйле көрәш талаптарын үтәү саралары, йәнәһе лә, миллиардлаған долларға төшәсәк һәм был йәнә лә миллионлаған эш урынын юғалтыуға килтерәсәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, донъя ғалимдары, климат белгестәре, экологтар глобаль йылыныу процесын кәметеү буйынса башҡа төрлө саралар эҙләүҙән туҡтамай. Мәҫәлән, әүҙем йәшелләндереү, кислород бүлеп сығарыусы, углекислый газды йотоусы үҫемлектәрҙең яңы сорттарын уйлап табыу буйынса эшләй.

Хәйер, беҙҙең дә үҙ көсөбөҙҙән килгәнде башҡарыу һәр кемебеҙҙең намыҫында. Йәшелләндереү, ағастар ултыртыу, мәҫәлән. Әйткәндәй, бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арнап, бәйләнештәге "Рәсәй экологияһы" төркөмө "Хәтер баҡсаһы" акцияһы иғлан иткәйне: яу ҡырында, тылда, фашист тотҡонлоғонда баштарын һалған 27 миллион һуғыш ҡорбаны иҫтәлегенә 27 миллион төп ағас ултыртырға. Был изге башланғыс илебеҙҙә генә түгел, Рәсәйҙән ситтә лә дәррәү күтәреп алынды. Был һәр кемебеҙҙең ҡулынан килерлек эш. Хеҙмәт коллективтары, уҡыу йорттары коллективтары был хәрәкәткә әүҙем ҡушылған, хатта пенсионерҙар ҙа үҙҙәре йәшәгән йорт алдарына ағастар ултыртып сыҡҡан. Үҙгәрергә теләһәк, бәлки, эште шунан башларға кәрәктер?

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ДИҠҠӘТ ИТ!

## ПОЧТАЛЬОНҒА - БҮЛӘККӘ!

**Бөгөн, бөтә донъяны тетрәткән коронавирус ваҡиғалары мәлендә, 2020 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһын үткәреү бик үк еңелдән түгел икәнен белеп-һиҙеп тораһығыҙҙыр, тип өндәшәбеҙ уҡыусыларыбыҙға. Почтальондар үҙ эшен эшләй, әлбиттә, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын, ҡарттарға пенсия аҡсаһын тарата. Шуға ла бар ышанысыбыҙ, өмөтөбөҙ - почта хеҙмәткәрҙәрендә һәм... уларҙы өйҙәрендә ҡабул итеп, гәзитебеҙгә яҙылыу ғәмәлен атҡарыусы аңлы милләттәштәребеҙҙә. Беҙ артабан да гәзитебеҙҙе һеҙҙең ихтыяжға тап килтереп, рухлы, йөкмәткеле итеп сығарырға вәғәҙә бирәбеҙ. Шуның өҫтәүенә, гәзитте әүҙем таратыусы почтальондарға матур бүләктәр әҙерләйбеҙ *(һүрәттә)*. Гәзит уҡыусыларыбыҙ ҙа даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, был йолабыҙ быйыл да дауам итәсәк. Бының өсөн һеҙҙән ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрергә генә кәрәк. Бергә булайыҡ!**



12+

**✓ Киләсәктә дизель, бензин яғыулығынан баш тартып, кешелек электромобилдәргә, велосипедҡа өҫтөнлөк бирер. Быға ышаныуы ҡыйын булһа ла, Азия илдәрендә велосипедтың төп транспорт сараһы булыуын күрәбеҙ.**



БЫНАҒАЙЫШ!

# АҠЫЛ - ТЕҘГЕН, ҠЫЛЫҠ - АТ...

**Шундай заман килде: һәр аҙымыңды үлсәп атларға, һәр һүҙеңде уйлап һөйләргә кәрәк, ниндәй осраҡтарҙа ла: асыулы, нәфрәтле тойғоға бирелгән мәлдә лә хатта тойғоңа хужа булыу фарыз, югиһә, һәр мөйөштән һүҙеңде - яҙҙырып, хәрәкәтеңде төшөрөп алыуҙары бик ихтимал.**

"Һәүәҫкәр оператор" шөғөлө әҙәм балаларының яратҡан хоббиһына әүерелде бөгөн. Айырыуса берәй "кырын" сюжетлы хәлвәҡиғаны ҡарап ҡына йөрөй үткер күҙҙәр: йәһәт кенә видеоға төшөрөп алалар ҙа минутында уҡ интернетҡа һалып та ҡуялар. Шунан китә даның донъя буйлап, хатта Үҙәк телевидениеһы тапшырыуҙарына ла барып эләгә ҡай саҡ. Был үҙен тейешенсә тота белмәгән, "кырын" тейәгән, тәртип боҙған, боларған йә урлашҡан кешеләргә ҡаршы бик яҡшы көрәш сараһы, әлбиттә. Бигерәк тә хоҡуҡ һаҡлау органдарына теге йәки был ваҡиға буйынса асыҡлыҡ индереү, ысын ғәйеплене фашлау кәрәк булғанда бик йәтеш сара. Әйткәндәй, әлеге "һәүәҫкәр операторҙар" бер кемде лә аяп тормай, хатта хоҡуҡ һаҡсыларының үҙҙәрен дә. Шулай булырға тейеш тә, сөнки дәүләт властары вәкилдәре булараҡ, закон исеменән үҙ бурысын үтәгәндә тәртип боҙоуға, тупаҫлыҡҡа, самаһыҙ ҡыланыуҙарға бер кеменең дә хаҡы юҡ. Ни тиһәң дә, халыҡсан ижад жанрына әүерелгән ошо видеолар үҙҙәрен донъя хакимдары итеп тойоусы ҡайһы бер ирекле холоҡло полиция хеҙмәткәрҙәренең ҡулдарын - ҡыҫҡарта, ҡыланыштарын йомшарта төшөр ине, моғайын.

Үкенескә, юҡ-юкта осрап тора барыбер тәртип хужаларының тәртип сиктәренә һыйышһыҙ ҡыланыштары. Ана бит, "һәүәҫкәр операторҙар" бишәүләп (!) бер ҡатынды ҡармап алып, этҡеләйтөрткөләй, йомарлап тиғәндәй патруль пункты - "стакан"ға индереп алып китеүҙәрен видеоға төшөрөп тә һалғандар. Уны ҡарау көлкөнән бигерәк асыуҙы килтерә: ҡатын-ҡыҙға ҡарата, ул нисек кенә ҡаршылашып маташмаһын, саҡ ҡына "ташламалы" мөнәсәбәт булырға тейештер бит. Эсеп, урлашып тотолмаған. Эйе, үҙизоляция режимының бер шартын боҙған шулай ҙа: битлекһеҙ сыҡҡан урамға. Ундайҙар, әйткәндәй, бик күп Өфө урамдарында. Ҡайһылары юрамал ҡаты тәртипкә үс иткәндәй ҙә ҡылана хатта. Йәнәһе, ҡарағыҙ, ниндәй геройҙар! Бының менән улар, асылда, үҙҙәренең тәрбиәһеҙлеген генә күрһәтә. Бындай асыҡтан-асыҡ тиҫкәре ҡыланыштар, әлбиттә, тәкәббер һәм үҙһүҙле граждандар менән ҡатыраҡ булыуҙы талап итә. Бигерәк тә, республикала мотлаҡ битлек менән йөрөү режимы иғлан ителгәндән һуң. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров патрулдә йөрөп тикшереүселәргә әҙәпле булырға, үҙҙә тыныс ҡына аңлатырға, иҫкәртергә ҡушты. Ә инде граждандарҙың кемдәре был иҫкәртеүгә ҡолаҡ һалырға ла теләмәй, ҡаршылаша, әрепләшә һәм тупаҫ ҡылана - шул осраҡта, билдәле, ундайҙарға мотлаҡ штраф һалырға тура киләсәк. Мин белмәйем, баяғы ҡатынҡайҙың битлек киймәй йөрөүенән тыш, тағы берәй тупаҫлығы булғанмы, юҡмылыр, әммә полиция менән булған конфликт уны тәртипкә әйҙәһен ине, тип теләге килә. Әйтеүемсә, ошондай ғәҙәттән тыш хәүефле көндәрҙә лә үҙ мәнфәғәттәре хаҡына иғлан ителгән дөйөм тәртипте һанға һуғырға теләмәгән Өфө граждандарының ҡылығы, әлбиттә, асыу һәм һәфрәт тыуҙыра. Үҙҙәренең хаҡһыҙ булыуын ундайҙар вирус йоҡтороп, сирләгәс тә аңлар ул, бәлки, ләкин һуң булыр.

Шундай осраҡта ла һүҙ уларға теләктәшлек белдереү хаҡында түгел, ә дәүләт, власть һәм закон исеменән эш иткән полиция хеҙмәткәрҙәре ҡылығы хаҡында. Ниндәй генә анра һәм хаяһыҙ әҙәмдәргә тап булған хәлдә лә улар кимәленә төшөүҙең етҡеселек абруйына килтереп һуғыуын, власть ҡарарҙарына кире ҡараш тыуҙырыу ихтималлығын аңлап эш итеү кәрәклеге хаҡында һүҙ. "Аҡыл - теҙген, ҡылыҡ - ат, теҙгенеңде белеп тарт" тигән халыҡ мәҡәлен иҫкә төшөрөү ҙә етәлер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йылдан-йыл климат үҙгәрә бара икәнен беләбеҙ, тоябыҙ. Был хәл кешелекте һиҫкәндерергә тейеш һымаҡ та, әммә әйләнә-тирә мөхиткә мөнәсәбәт үҙгәреүе күҙәтелмәй түгелме?



(Башы 1-се биттә).

*Мәликә АЛЛАҒОЛОВА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:* Эйе, кешелекте, уның аң кимәлен үҙгәртеү еңел эш түгел. Бының өсөн йә булмаһа бик күп йылдар кәрәк булыр ине, йә булмаһа, ысынлап та, ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәлдәргә дусар булыу шарттыр. Ә шулай ҙа иң яҡшыһы - кешенең аңына тейешле йүнәлештең бала саҡтан һалыныуы, минеңсә. Был йәһәттән белем биреүгә ҡарағанда тәрбиә эше мөһимерәк булып сыға. Бөгөнгө мәғариф системаһының бер аяғына аҡһауы бер кемгә лә сер түгел: белем биреү тәрбиә эшенән тамам айырымланды. Ярай ҙа тәүгеһенең сифат кимәле һүҙ тейгеһеҙ булһа...

Климат тураһында башланғыс белем нигеҙҙәре география дәресендә бирелә. Балаларҙың донъяға һәм әйләнә-тирәбеҙгә ҡарашын формалаштырыусы был предметҡа ошо йүнәлештәге башҡа фәндәргә ҡарағанда ниндәйҙер өҫтөнлөк тә бирелә хатта, сөнки ул уҡыусыларҙы тирә-яҡ мөхиткә яраҡлашып йәшәргә өйрәтә. Һәр хәлдә, уҡыусы бала тирә-яҡ мөхит торошоноң климат үҙгәрешенә килтереү ихтималлығын, кешенең тәбиғәткә ҡарата аңһыҙ ҡылығы һәм яуапһыҙлығының экологик фажиғә сәбәпсеһе булыу мөмкинлеген аңларға тейеш. Быларҙы балаларға теория менән ялҡытып түгел, әябай, тормошсан миҫалдар аша төшөндөрөү шарт. Мәҫәлән, электр энергияһын, һыу һәм йылылыҡ тотоноуға һаҡсыл мөнәсәбәтте коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ҡағыҙы - квитанциялағы һандар аша аңлатырға була. Йәки транспорт һәм уларҙың яғыулыҡ ҡалдыҡтары булған зарарлы газ һәм башҡа химик берләшмәләр хаҡында ла тормошсан миҫалдар менән һөйләргә кәрәк. Урамдарҙы, йорт алдарын автотранспорттың баҫып алыуы ла яҡшы күренеш түгеллекте аңлатыу фарыз. Бер яҡтан, автомобилле булыу, эйе, яҡшы, етеш тормош тураһында һөйләй, ләкин ысын ҡиммәттәрҙең имeнлек, һаулыҡ, кеше ғүмере булыуын да төшөндөрөү кәрәк. Автомобиль, тимер юл һәм авиация транспорт сараларының экология һәм климатҡа килтергән зыянын бер ниндәй матди байлыҡтар менән дә ҡаплап булмаясаҡ. Әйткәндәй, коронавирус сәбәпле иғлан ителгән карантин, үҙизоляция осоронда Ҡытайҙа, Европала, Рәсәйҙә атмосфераның ике окислы углерод газы, метан һәм башҡа төрлө ҡалдыҡтар менән бысраныуы 20-30 процентҡа кәмене тип иҫәпләй белгестәр, сөнки был осорҙа автомобиль, тимер юл, авиация транспорты хәрәкәте сикләнде. Ләкин был ҡыуанырға сәбәп була алмай әле, сөнки климатҡа туранан-тура тәьҫир итеүсе парник газдары тупланышы үҙгәрешһеҙ ҡала килә, сөнки ниндәйҙер сикләүҙәр булған хәлдә лә ҡайһы бер предприятиелар эшләүен дауам итте, йорттар йылылыҡ һәм электр энергияһы менән эҙләкһеҙ тәьмин ителде, транспорт та тулыһынса туҡтап ҡалманы. Бөтөн әйтелгәндәрҙән сығып, балаларҙы ата-әсәләре кеүек машина, әйбер ҡоло булып үҫеүҙән араларға тырышырға кәрәк, тип әйткем килә. Киләсәктә дизель, бензин яғыулығынан баш тартып, кешелек электромобилдәргә, велосипедҡа һәм, бәлки, йәйәү йөрөүгә өҫтөнлөк бирер. Быға ышаныуы ҡыйын булһа ла, Азия илдәрендә велосипедтың төп транспорт сараһы булыуын күрәбеҙ. Кем белә, киләсәк быуын, бәлки, күпкә аҡыллыраҡ булыр.

*Сәлимә САФУАНОВА, Хәйбулла районы:* Аҡъярға килен булып төшһәм дә, үҙем Баймаҡ районының урманлы-таулы гүзәл төбәге булған Ишбирҙе ауылында тыуып үҫтем. Шуға ла хәҙер "Ялан ғына ерҙең кәкүге юҡ..." тигәндәй, яйы сыҡҡан һайын тыуған яғыма ҡайтып урайым. Хәйбулла яҡтарында һауа торошоноң ҡырыҫлығы үҙен нығыраҡ һиҙҙерә, әлбиттә, ә тыуған яҡ һауаһынан тындар иркенәйеп, күҙҙәр асылып киткәндәй: һауаһы - сихәтле дауа. Дөрөҫ, Ишбирҙелә ҡасандыр булған ҡалын урмандар тунала торғас, тош-тош урында ялан-ғасланып ҡалды. Шундай ташландыҡ диләнкәләргә ағас ултыртып сыға торғайныҡ элек беҙ, мәктәп балалары. Хәҙер ундай эш менән булғандарын ишеткәнкүргән юҡ. Шулай ҙа мәңгелек урман йәне бирешергә теләмәй: ҡырҡылған ағас төпһәләренән яңы үҫентеләр шытып сығып, күкрәп үҫә башланы, тик улар ағас булып өлгәргәнсе күпме йылдар кәрәк!

Йәшеллек, тәбиғәт торошоноң һауа торошо - климатҡа тәьҫирен иҫбатлау кәрәкмәй. Ана шул ағастары ҡырҡылып, яланғасланып ҡалған диләнкәләр арҡаһында ҡасандыр тулы һыулы, алҡынып аҡҡан Йылайыр йылғаһы тауыҡ кисеп сығырҙай ғына булып ҡалды. Урман - бер ҡат юрған, тигәндәй, ҡыш ул ыжғыр бурандан, йәйге селләләрҙә ҡояштың көйҙөргөс эҫеһенән һаҡлай. Элегерәк, совет йылдарында, тирә-яҡтағы колхоз-совхоз малдарын беҙҙең урман яғына ҡыуып килтереп, йәйләп ятырҙар ине. Урындағы халыҡтың сабынлыҡтары, "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән һирәк үҫемлектәр менәрләгән мал тояҡтары аҫтында тапалып юҡҡа сыҡты. Бары тик һуңғы йылдарҙа ғына ҡайһы бер үҫемлектәрҙең яңынан терелеп, баш ҡалҡыта башлауы ҡыуандыра. Әле бына элек беҙҙең яҡтарҙа ғына үҫә торған күк умырзаяларҙы Хәйбулла районы Рафиҡ ауылы янында ла тәүгә осратып, ғәжәп иттем. Был күренеште мин үҙемсә яҡшыға, изгегә юрайым. Тимәк, тәбиғәт ана шулай үҙ-үҙен тергеҙергә һәләтле: ер хәтере барыбер үҙенекен итә. Тик уны яҡларға һәм һаҡларға, үҙебеҙгә лә үҙгәрергә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓15 майға оператив мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 1874 коронавирус инфекцияһы менән ауырыусы иҫәпләнә. Тәүлек эсендә улар 90-ға арттан. Республика дауаханаларында 609 сирле дауалана, уларҙың 33-ө ауыр хәлдә, 12-һе үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Барлығы 580 кеше һауыҡып сыҡҡан. 669 кеше амбулатор шарттарҙа дауалана. Үлем осрағы - 16 кеше.

✓Һуңғы тәүлектә Рәсәй төбәктәрендә бөтәһе 10 598 яңы коронавирус осрағы раҫланған, 113 үлем теркәлгән. Тәүлек эсендә илдә 4 696 кеше һауыҡҡан. Дөйөм алғанда, бөгөнгә Рәсәйҙә 262 843 кеше коронавирус йоҡторған, уларҙың 58 226-һы һауыҡҡан, 2418-е вафат булған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Юғары әҙерлек" режимының ғәмәлдә ҡалыуы, шулай уҡ изоляция режимының тулыһынса бөтөрөлмәүе тураһында хәбәр итте. "Беҙ юғары әҙерлек режимын ҡалдырабыҙ. Ул барлыҡ дәүләт, муниципаль органдар һәм учреждениелар, ойошмалар, предприятиелар өсөн мотлаҡ. Изоляция режимын тулыһынса бөтөрмәйбеҙ. Беҙҙә изоляцияға ҡағылышлы нормалар һәм ҡағиҙәләр байтаҡ, ә ҡайһылары уларҙы көсәйтәбеҙ", - тип белдерҙе республика етәксеһе.

✓Роспотребнадзор республикала ғы иң күп ауырыу осраҡтары күҙәтелгән район һәм ҡалаларҙы атаны. Беренсе урында - Өфө, бында 527 кеше коронавирус менән ауырый. Нефтекамала ауырыусылар һаны - 238 кеше. Өсөнсө урында 87 ауырыусы иҫәпләнгән Бәләбәй ҡалаһы. Стәрлетамаҡта - 55 ауырыу. Өфө районында 51 кешенең ауырыуы асыҡланған. Межгорье, Баймаҡ, Ҡыйғы, Дүртөйлө, Федоровка, Архангел, Бөрйән райондарында 2-шәр кеше ауырый.

✓Башҡортостанда үҙмәшғүлдәргә йәнә эшләргә рөхсәт ителә, тип хәбәр итте Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә. "Барлыҡ санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе һәм нормаларҙы үтәгән осраҡта, махсус һалым режимы булған үҙмәшғүл граждандарға эшләргә рөхсәт бирәбеҙ", - тип белдерҙе ул. Үҙ эшмәкәрлегендә ялланма хеҙмәт йәлеп итмәгән һәм "Һөнәри килемгә һалым" махсус һалым режимын ҡулланған физик берәмектәрҙе һәм шәхси эшҡыуарҙарҙы үҙмәшғүлдәр тип атайҙар.

**✓ Яҙыусы минән уның материалы баҫылдымы-юҡмы икәнде белеште. "Күптән баҫылды ул. Күрмәнегеҙме ни?" - тип һораным аптырап. "Гәзит алдырмайым шул... Яҙылам тием дә... онота ла ҡуям", - тип аҡланды ағай. Оят булды уға...**



ШАҢДАУ



# ҠАЛАЛА ЙӘШӘП...

## ...ауыл кешеһен ихтирам итәйек!



**Гәзитебеҙҙең һәр һанында тиерлек ауыл темаһы күтәрелеп тора. Матбуғат хеҙмәткәрҙәре (яҙыусы йә журналист булһынмы), башҡа авторҙар башлыса ауыл ерендә тыуып үҫкән, ауыл мәктәбендә уҡыған, булмышына ауыл тәбиғәте һеңгән, ауылдың тын алышын тойған кешеләр булғанғамылыр, ошо мәсьәләгә айырыуса ныҡ иғтибар бүленә. Шуныһы һөйөнөслө. Саф башҡортса һөйләшкән берәүҙе ҡалала осратыуың була, ул кеше мотлаҡ ауылда тыуып үҫкән булырға тейеш, тигән инаныуҙа булаһың. Таныша башлаһаң, иң башта уға "Ҡайһы районадан?" тигән һорау бирәһең...**

Ауыл, ауыл кешеһе хаҡында мин дә бер аҙ үҙемдең фекерҙәрем менән бүлешеп алырға булдым. "Киске Өфө"нөң 18-се һанында Бөрйән районы Байназар ауылы ағинәйе Фәнүзә Ишбаеваның мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, тыуған ауылым, ғөмүмән, ауыл тормошо ҡабат иҫемә төшөп китте. Төшөрлөк тә! "Аңыбыҙ асылһын ине" тип аталған ошо бәләкәй генә мәҡәләлә үҙебеҙҙең башҡорт еренең иҫ киткес ҙур тәбиғәт байлығы хаҡында, ана шул гүзәллектең ҡосағында (ауылда) йәшәүселәрҙең ни тиклем бәхетле булыуы тураһында яҙа ул. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың таш диуарлы йорттарында ғүмер иткән, бөгөнгө көндә (пандемия сәбәпле) өйҙәренән сыға алмай бикләнеп ултырған яҡташтарыбыҙҙы ла йәлләй ағинәйебеҙ. Ошо ҡатмарлы осорҙа һәр төрлө ауырлыҡтарға баш эймәй, "тау артындағы хыял-маҡсаттарҙы ауыҙлыҡлап", ситтәге зиннәткә ҡыҙыҡмай, ҡулыбыҙҙа булған ана шул байлыҡтың ҡәҙерен белеп, файҙаланып, "атты арытмаҫ, тунды туҙҙырмаҫ" (хәлебеҙҙән генә килерҙәй) ғәмәлдәр атҡарып йәшәргә саҡыра был аҡыллы гүзәл зат. Бәләкәй генә ошо яҙмаһында халҡыбыҙҙың бер килке дауалау ысулдарын да һанап киткән. Тағы бер нәмәгә иғтибар иттем: ағинәйебеҙ - торғаны менән үҙе бер "башҡорт теле энциклопедияһы" бит! Гәзитебеҙҙең бер мөйөшөнә генә һыйған ҡыҫҡа ғына мәҡәләлә халҡыбыҙҙың ун-ун бишләгән мәҡәл-әйтемдәрен, туған телебеҙгә генә хас булған, әммә (үкенескә) лөғәтебеҙҙә һирәк ҡулланылған шундай матур һүҙбәйләнештәр һананым! Күптәрен тәүге тапҡыр ишетеүем. Уларҙың һәр береһен һөйләмдең тейешле урынына йәтеш кенә итеп ҡуя белеү ҙә кәрәк бит әле! Бына тағы ниндәй хазиналар бар икән ауылдарыбыҙҙа! Туған тел байлығының һаҡланып ҡалыуында ауыл халҡының төп роль уйнауы хаҡында электән дә уйлана инем.

Әлеге көндә ҡалаларҙа ғүмер иткән бихисап күренекле шәхестәребеҙ ҙә республикабыҙҙың төрлө район ауылдарында тыуып үҫкән. Әллә ҡасан уҡ ауыл мөхитенән айырылыуына ҡарамаҫтан, күп кенә зыялыларыбыҙҙың ауылдарҙы һағыныуы, милләтебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәтен, телен һаҡлап алып ҡалыу өсөн борсолоуы - маҡтаулы. Әммә ауыл, милләт, телебеҙ хаҡында күпме генә уйланып, матур-матур шиғыр һәм проза әҫәрҙәре ижад итһәк тә, шағир Әнғәм Атнабай ҡасандыр әйтмешләй, аҡылыбыҙға, тәнебеҙгә, кейемебеҙгә, атлап йөрөшөбөҙгә, һөйләшебеҙгә, ғәҙәттәребеҙгә "ҡала сире" һеңгән кешеләр беҙ. Ҡаладағы милләттәштәребеҙ араһында үҙ балаларын башҡорт рухында тәрбиәләп, таптаҙа башҡорт телендә уҡый-яҙырға өйрәтә алыу бәхетенә ирешкәндәр ҙә күп түгел. Быныһы - үкенесле. Бәғзе ваҡыт, хистәргә бирелеп, ошо юҫыҡтараҡ һүҙ сығара башлаһаң, ҡайһы берәүҙәр еңел генә итеп: "Бәй, ауылға күсеп ҡайт һуң!.."- тип кәңәш итә. Әммә әйтеүе генә анһат. Йәш саҡта ҡала еренә килеп тамыр йәйеп, балаларың да ошонда тыуып үҫеп, ҡала мөхитендә ныҡынып алғас, беҙгә, әлеге Фәнүзә ханым әйтмешләй, "ҡаланың таш диуарлы йорттарында" ғүмеребеҙҙең ахырыһына ҡәҙәре йәшәргә яҙғандыр инде Аллаһ Тәғәлә. Ҡапыл да айырылып китеп тә булмай шул. Бәғзе берәүҙәр үҙҙәрен вафат булғас ҡына тыуған ауылына алып ҡайтып ерләргә васыят әйтеп ҡалдыра. Хатта бына ошо мәсьәлә лә әллә ни еңелдән түгел. Үлгәс тә үҙеңде әллә ҡайҙа ятҡан районыңа күсертеп, яҡындарыңа "бәләнде һалғың" да килмәй. Икенсенән: "Ярай, мине әле ауылдаштарым белә. Ҡаҙырҙар, ерләрҙәр. Ә минең ҡалала тыуып үҫкән балаларым барыбер ҡасандыр бында ятып ҡаласаҡ..." - тип уйлай башлайһың (бер аҙ күңелһеҙерәк темаға төшөп киттем).

Гәзиттең ошо уҡ һанында сыҡҡан Бәҙри Әхмәтовтың "Алға, Башҡортостан, ауылға!" тип аталған бик шәп мәҡәләһенә лә иғтибар иттем. Унда ла ауыл тормошона ҡарата оптимистик фекер һалынған. Уның мәҡәләһен уҡып ултырған мәлдә хатта "иртәгә үк ҡаланы ташлап" ауылға ҡайтып китерҙәй булаһың. Тик Бәҙри ағайҙың ифрат аҡыллы һүҙҙәрен ҡапылда тормошҡа ашыра алмауыбыҙ үкенесле. Юғарыла әйткәндәй, ҡала еренә тәрән тамыр ебәреп өлгөргәнбеҙ шул. Күптәребеҙ өсөн ауыл - алыҫ йондоҙ һымаҡ, ғүмерҙә лә үрелеп етә алмаҫ хыял ғына булып ҡалғандыр. Бала-сағалары ла инде һәүетемсә олоғайып бөткән ғаиләләрҙә һәр мәсьәләне күмәкләшеп хәл итмәй ҙә булмай. Хәләл ефетең бер яҡҡа, балаларың икенсе яҡҡа тарта башлаһа, әлеге Крыловтың баснәһындағы аҡҡош, суртан, ҡыҫала һымаҡ, бер ҡайҙа ла ҡымшанып булмайҙыр инде ул. Әлеге мәшһүр шағирыбыҙ Әнғәм Атнабайҙың "Ышанмағыҙ" тип аталған бер шиғыры тап ошо хаҡта:

*...Тыуған ауылыбыҙҙы һағынып,*
*Ауыҙ һыуыбыҙҙы ағыҙып,*
*Күҙ йәштәрен хатта тамыҙып,*
*"Ҡайтам" тиеп йырҙар яҙабыҙ,*
*Гонорарын һалып алабыҙ ҙа,*
*Ҡалабыҙҙа тороп ҡалабыҙ…*
*"Бөтөнләйгә инде ҡайтам", тиһәк,*
*Ышанмағыҙ беҙгә, ауылдар:*
*Улдарығыҙ терелмәҫлек булып,*
*Ҡала сире менән ауырыған...*

Ниһайәт, ниндәйҙер аныҡ функция үтәп йәшәгән күп кенә милләттәштәребеҙ, ысынлап та, бында - ҡала ерендә кәрәгерәктер ҙә, сөнки күптәрҙең һөнәре, шөғөлө фәҡәт ҡала еренә генә яраҡлы...

Бына шул ҡалаларынан айырылып китә алмаған яҡташтарыма мөрәжәғәтем. Ғүмер буйы ауыл эше менән мәшғүл булып, аҙыҡ-түлек етештереп, барса ҡалаларыбыҙҙа йәшәгән миллионлаған халыҡты туйҙырып торған ауылдаштарыбыҙҙың ҡәҙерен белеп, уларҙы тәрән ихтирам итеп кенә йәшәйек инде. Туған телебеҙҙе нисек һаҡлап ҡалыуҙы ла уларҙан - ауыл кешеләренән өйрәнәйек. Ауыл еренән сығып, хөкүмәт органдарынаса үрләп етешкән яҡташтарыбыҙҙы, ғалимдарыбыҙҙы, сәйәсмән һәм иҡтисадсыларыбыҙҙы (улар ҙа байтаҡ ҡына бит!) илебеҙҙең бына ошо иң гүзәл өлкәһен - ауылдарыбыҙҙы нығыраҡ "ҡарарға" саҡырып ҡына торайыҡ.

Әйткәндәй, "ауылға ҡайтып булмай", тигән "пессимистик" ҡараш, бәлки, минең һымаҡ оло йәштәге кешеләргә генә хастыр. Ҡыуанысҡа, журналист Бәҙри Әхмәтовтың "Алға, Башҡортостан, ауылға!" тигән әлеге саҡырыуын тормошҡа ашыра алырҙай эшлекле йәштәребеҙ ҙә күбәйҙе. Тейешле шарттар булдырғанда көстәре ташып торған йәштәребеҙ ауылдарға ҡайтып, ҙур ғына эштәр атҡара алыуы бик мөмкин. Ауыл ерендә уртаса ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә бай булып йәшәгәндәр хаҡында миҫалдар бар. Донъя малы менән булышып, шул уҡ ваҡытта башҡа рухи ҡиммәттәрҙе, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың һәр төрлө гүзәл йолаларын онотмай, телен, мәҙәниәтен дә һаҡларлыҡ балалар тәрбиәләп, ғүмер итеп килгән йәш кешеләребеҙ юҡ түгел. Гөлдәр Ишҡыуатованың "Бай" тип аталған телетапшырыуҙарын ҡарап, ана шундай йәштәребеҙ өсөн һөйөнөп бөтә алмайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИШАРА



# НИҢӘ ГӘЗИТ УҠЫМАЙҺЫҢ?

**Башҡорт матбуғат баҫмаларының маҡсаты нимәлә? Мәҫәлән, "Киске Өфө"нөң? Уңышлы, эшлекле, һөнәрле, оҫта, ғилемле милләттәштәрҙе күрһәтеүҙә-күтәреүҙә. Рухи ҡиммәттәребеҙҙе пропагандалауҙа һәм һаҡлауҙа. Йәштәрҙе милли төшөнсәләр нигеҙендә тәрбиәләүҙә…**

"Киске Өфө" биттәрендә сығыш яһаған автор, мәҫәлән, мотлаҡ башҡорт донъяһына файҙалы булған һәм йөрәгендә милли рух йөрөткән кеше. Һәр хәлдә беҙ, гәзит редакцияһы хеҙмәткәрҙәре, шулай иҫәпләйбеҙ. Әммә күңелде ҡырған бер нәмә бар. Гәзиттә материалдарын баҫтырған зыялыларыбыҙ беҙгә йыш ҡына ниндәйҙер бер һанды эҙләп килә. Баҡтиһәң, улар гәзит алдырмай һәм үҙҙәренең мәҡәләһе сыҡҡанмы-юҡмы икәнде лә белмәй ҡала икән...

Китапханала үткән бер сара ваҡытында билдәле яҙыусы минән уның материалы баҫылдымы-юҡмы икәнде белеште. "Күптән баҫылды ул. Күрмәнегеҙме ни?" - тип һораным аптырап. "Гәзит алдырмайым шул... Яҙылам тием дә... онота ла ҡуям", - тип күҙен йәшереп кенә аҡланды ағай. Оят булды уға...

Шуның кеүек миҫалдарҙы күп килтерергә була. Баҫмабыҙ зыялыларыбыҙға хөрмәт белдереп, яҙғандарын халыҡҡа күрһәтеп, ҙурлап тора, ә улар уны алдырмай ҙа, уҡымай ҙа, имеш. Яҙыусы һынлы яҙыусы ла гәзиткә яҙылмағас, редакцияға килеп уның бер һанын биреүебеҙҙе һорап йөрөгәс, башҡаларға ни һан!

Шулай ҙа гәзиткә яҙылыусыларыбыҙ ҙа, "Шул һанда шуны уҡыным да, фекеремде белдерергә булдым", тип шылтыратҡан йәки яҙған уҡыусыларыбыҙ ҙа аҙ түгел. Баҫманы беренсе һанынан даими алдырып, һәр номерҙы көтөп торғандар ҙа байтаҡ. Йәки туған-тыумасаһына "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанция бүләк итеүселәр барлығын да беләбеҙ. Бына ошондайҙар йәшәтә, байыта, ҡыҙыҡлыраҡ, фәһемлерәк итә лә инде баҫмаларҙы. Ә билдәле шәхестәрҙең башҡорт баҫмаларын һанға һуҡмауы уларҙың кимәлен билдәләй, тиһәк... хаталанмаҫбыҙ, моғайын.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йыл һайын 15 майҙа донъяның бөтә илдәрендә Халыҡ-ара ғаилә көнө билдәләнә торғайны. Башҡортостанда йолаға әүерелгән Ғаилә аҙналығы июлгә күсерелә, тип хәбәр иттеләр республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Барлыҡ тематик сараларҙы 6-12 июлдә уҙғарыу планлаштырыла.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында йәмәғәт транспортының эш ваҡыты үҙгәрҙе. Өфө хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, шаршамбынан маршрут автобустары, троллейбустар һәм трамвайҙар ғәҙәти теҙмә буйынса - таңғы 6-нан төнгө 12-гә тиклем эшләй. Бынан алда изоляция режимына бәйле баш ҡала властары йәмәғәт транспортының эш ваҡытын ҡыҫҡартыу тураһында ҡарар ҡабул иткәйне.

✓Башҡортостанда йәшәгән 65 меңдән ашыу Бөйөк Ватан һуғышы ветеранына һәм тыл эшсәненә Рәсәй Президенты Владимир Путиндан шәхси ҡотлау менән өс мөйөшлө хаттар таратыла. Был хаттар йыл аҙағына тиклем илдең бөтә нөктәләренә лә ебәреләсәк.

✓Дөйөм белем биреү ойошмалары һәм дәүләт һөнәри белем биреү ойошмаларының иң яҡшы башҡорт һәм рус теле уҡытыусылары араһында аҡсалата премияға дәғүәселәрҙең республика конкурсы дистанциялы уҙғарыла. Конкурс йомғаҡтары буйынса иң яҡшы 50 башҡорт һәм рус теле уҡытыусыһына 50-шәр мең һум күләмендә премия тапшырыласаҡ. Республика конкурсында ҡатнашыу өсөн документтарҙы 2020 йылдың 25 майына тиклем БР Мәғарифты үҫтереү институтының электрон адрестары буйынса ебәрергә кәрәк.

✓Өфөлә Еңеүҙең 75 йыллығына Черниковка биҫтәһендә урынлашҡан Шайморатов урамын комплекслы төҙөкләндерәләр. "Баш ҡаланың төньяҡ өлөшөндә Геройыбыҙ - генерал Шайморатов исемен йөрөткән урам бар. Бәлки, уны бөтәһе лә белеп бөтмәйҙер. 1949 йылдың ноябрендә, ул саҡта Черниковка ҡала башҡарма комитеты, урамға ошо исемде биргән", - тип билдәләне Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин.

✓Майҙа һәм июндә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе йәнә оҙайлы ялдар көтә, тип белдерҙеләр республика Хеҙмәт министрлығында. 2020 йылдың 24 майы - Ураҙа байрамы - республикала ял көнө тип иғлан ителгән. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында Башҡортостанда 2020 йылдың 23, 24, 25 майы һәм 12, 13, 14 июне ял көндәре тип иҫәпләнә. Кесаҙна, 11 июндә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

ҠЫҪҠАСА

# БИТЛЕКҺЕҘ СЫҠМА!

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай битлек режимын боҙған өсөн штрафтар билдәләне: граждандарға - 1-3 мең һум, ҡабаттан боҙған осраҡта - 3-5 мең һум.** Юғары әҙерлек режимын боҙған өсөн вазифалы кешеләргә 5-15 мең һум штраф һалына (ҡабаттан - 15-30 мең һум), юридик берәмектәргә 50-100 мең һум штраф тәғәйенләнә (ҡабаттан - 100-200 мең һум). Граждандарға иҫкәртеү яһалырға мөмкин. "Ил һәм республика яйлап изоляция режимынан сыға, йәмәғәт урындарында, эш коллективтарында кешеләр күбәйә. Хәҙер һис ҡасан булмағанса иҫкәртеү сараларын үтәү мөһим. Ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, уларҙы бөтәһе лә үтәмәй. Бындай сараларҙы һәйбәт тормоштан индермәйбеҙ. Республикала йәшәүселәрҙең һаулығына һәм ғүмеренә хәүеф янай", - тине Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев.

✓ **Башҡортостандың бөтә белем биреү ойошмалары элеккесә дистанциялы режимда эшләй.** Был хаҡта республика хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров белдерҙе. "Уҡыу йылы, алдан әйтелгәнсә, 1-4-се кластар өсөн - 22 майҙа, 5-11-се класс уҡыусылары өсөн 29 майҙа тамамлана", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр республика Мәғариф министрлығында. Урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыу, ҡағыҙҙа булараҡ, 1 июлгә тиклем тамамлана. Ләкин ҡайһы бер белем биреү учреждениеларында уҡыу планына бәйле датаның күсерелеүе ихтимал. Студенттар имтихандарҙы дистанциялы форматта тапшыра. "12 майҙан ата-әсәләре эшкә сыға башлаған бөтә балаларға балалар баҡсаһындағы дежур төркөмдәрҙә урын бирелә. Дежур балалар баҡсалары, төркөмдәр һанын муниципалитет билдәләй", - тип белдерҙеләр министрлыҡта. Дежур төркөмгә индереү өсөн ата-әсәләргә мәғариф бүлегенә йәки балалар баҡсаһы етәксеһенә ирекле формала ғариза яҙырға, баланың һаулығы тураһында белешмә тапшырырға кәрәк.

✓ **Башҡортостанда социаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәре коронавирус шарттарында эшләгән өсөн федераль һәм республика бюджетынан түләү алырға тейеш, тип хәбәр итте республика Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы.** Карантин осоронда йорт-интернаттарҙа йәшәүселәр менән ҡалған социаль хеҙмәткәрҙәргә федераль бюджеттан сменаһына - 25-әр мең һум, республика ҡаҙнаһынан 15-әр мең һум түләнә. Әгәр социаль учреждениела яңы коронавирус инфекцияһы йоҡтороуҙың расланған осраҡтары булһа, хеҙмәткәрҙәргә федераль бюджеттан - 35-әр мең һум, республика ҡаҙнаһынан 25-әр мең һум бирелә. Түләү осоро - 2020 йылдың 15 апреленән 15 июленә тиклем. Хеҙмәткәрҙәргә аҡса июнь айында күсә башлай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "АЛТЫН ЙОНДОҘ" ҠАЙТТЫ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Миңлеғәли Шайморатовтың "Алтын Йондоҙ" миҙалын БР Милли музейына мәңгелеккә һаҡлау өсөн тапшырҙы. Награда Мәскәүҙән алып киленде һәм хәрбиләштерелгән колонна оҙатыуында Өфөнөң үҙәк урамдары буйлап үткәс, Совет майҙанында тантаналы рәүештә музейға бирелде.**

- Һуғыш илебеҙҙәге һәр ғаиләгә ҡағылған. Был беҙҙең өсөн иң әһәмиәтле бөтә халыҡ байрамы. Еңеү көнөн үткәрергә яҡшы итеп әҙерләнгәйнек, әммә эпидемия тыуҙырған юғары хәүеф арҡаһында Рәсәй Президенты Владимир Путин Ҡыҙыл майҙандағы юбилей парадын икенсе ваҡытҡа күсерҙе. Ул мотлаҡ үткәреләсәк, шул иҫәптән беҙҙең республикала ла. Өйҙә ҡалып, беҙ үҙебеҙҙән яугирҙар рухына лайыҡлы хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ. Башҡортостан һәр ваҡыт батырҙары менән дан тотҡан. Бөгөн мин һеҙгә Өфөнөң Совет майҙанынан мөрәжәғәт итәм: 1942 йылдың март айында тап ошо урында Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәли Шайморатов республика етәкселегенә фронтҡа оҙатылырға әҙерлек тураһында хәбәр иткән. Беҙҙең атлылар ҡыйыу алышҡан һәм дошман уларҙан ҡурҡып торған. Шайморатов генерал һуңғы походында үҙенең батырлығы менән Ватан өсөн алышып үлеүҙән дә юғарыраҡ нәмә булмауын дәлилләгән...

Был ваҡиғаны республиканың бер нисә быуын халҡы оҙаҡ хыялланып көттө. Башҡортостан халҡы тарихи ғәҙеллекте ҡайтарған өсөн Владимир Путинға сикһеҙ рәхмәтле. Бөйөк шәхестәр иҫтәлегенә лайыҡлы булырға, улар кеүек үк ауырлыҡтар һәм һынауҙар алдында артҡа сигенмәскә тырышырбыҙ, - тине республика Башлығы Радий Хәбиров.

Тантаналы сарала Миңлеғәли Шайморатовтың туған тейеш кешеләре - подполковник Марат Ғәзелшин һәм Рөстәм Манашев та ҡатнашты. Улар ҙа, ниһайәт, генералдың бөйөк ҡаһарманлығы тейешле баһаланыуына оло ҡыуаныс кисереүҙәрен белдерҙе. Ватан өсөн йән биргәндәрҙе минутлыҡ тынлыҡ менән хөрмәтләп иҫкә алдылар. Шунан һуң Радий Хәбиров награданы Милли музейға тапшырҙы. Республика халҡына генерал йондоҙон ошо музейҙа ҡарау мөмкинлеге биреләсәк.

# ЯУГИРҘАР БАРЛАНДЫ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы легендар 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары хаҡында уникаль мәғлүмәттәр базаһын әҙерләне. Унда дивизия яугирҙары тураһында төп биографик мәғлүмәттәр тупланған.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылдың авгусында "Шайморатов варистәре" халыҡ проекты старт алғайны. Проект сиктәрендә библиографик мәғлүмәттәрҙе тергеҙеү буйынса күп көс талап иткән архив эше ойошторолдо. Эш бер нисә йүнәлеш буйынса алып барылды: халыҡтан, хәрби комиссариаттарҙан, архивтарҙан мәғлүмәттәр йыйылды. Проектты ойоштороусылар күләмле эш башҡарып сыҡты - һуғыш осоро яугирҙарының шәхси мәғлүмәттәре тупланған мендәрсә документты өйрәнде, 500-ҙән ашыу фотодокументты сканерланы, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың варистарынан йөҙәрләгән анкеталы тикшерҙе. Башҡортостан Республикаһының Хәрби комиссариаты мендән ашыу кеше иҫәпләнгән исемлек тапшырҙы. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы Милли архивының бүлек етәксеһе Азат Ярмуллин һәм аппарат белгесе Эльдар Яхин Мәскәү өлкәһе Подольск ҡалаһындағы Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының Үҙәк архивында эшләне. Әлеге ваҡытта материалдар системаға һалынған. Башҡорт кавалерия дивизияһының беренсе составының исемлеге менән 8 майҙан 22 июнгә тиклем Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының "Бәйләнештә", "Фейсбук" социаль селтәрендәге төркөмдәрендә танышырға мөмкин. Йыйылған материалдар буйынса "Шайморатовсылар - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" тигән биографик белешмә әҙерләп нәшер итеү планлаштырыла.

# КЕМДӘРГӘЛЕР - ЭШ УРЫНЫ

**Республика Башлығы Радий Хәбиров эш сәфәре барышында Әбйәлил районының Тирмән ауылында тәбиғи ташты эшкәртеү заводын ҡарап сыҡты.**

"Спецстрой" компанияһы иҫке бинаны һәм ҡорамалдарҙы ҡуртымға алған, ләкин ауырлыҡтарға тап булған: завод майҙан алып октябргә тиклем генә эшләй ала. Сөнки бина йылытылмай, газ торбаһы киҫеп алынған, ҡыйыҡҡа ремонт эшләргә кәрәк. Завод ташты һыу ярҙамында ҡырҡа, шуға һыуҙың даими әйләнеше талап ителә. "Һыу ике көн элек кенә туңыуҙан туҡтаны, беҙ эште башланыҡ", - тип һөйләнеләр плита, шаҡмаҡлап ваҡланған таш, юл һәм тротуар бордюрҙары, мәрмәрҙән һәм граниттан изделиелар сығарылған заводта. Биналар (административ корпус, ашхана, ятаҡ, ҡаҙанлыҡ бүлмәһе, медпункт, тәбиғи ташты эшкәртеү цехы, компрессор станцияһы һәм башҡалар) дәүләт милкендә. Станоктар "Уралгеотехсервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттеке. Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, быйыл март айында заводты тергеҙеү буйынса проект офисы булдырылған. Инвестиция проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә майҙың икенсе яртыһында заводтың тәбиғи ташты (мәрмәр, гранит, долерит) эшкәртеү буйынса беренсе линияһы эш башлай. Тулы ҡеүәткә сыҡҡас, заводта 51 кеше эшләй ала (хәҙер - 12). "Бында бик яҡшы сәнәғәт майҙансығы булырға мөмкин. Ресурстар бар. Хәҙер беҙ биналарҙы ремонтларға тейешбеҙ, инвесторҙар ҙа ҡыбырлай башланы. Продукцияға ихтыяж булыр - парктар, йәмәғәт киңлектәре өсөн граниттан, мәрмәрҙән материалдар һатып алырға тырышабыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

# ҠАРЛЫМАН ҺӨТӨ

**Башҡортостандың Ҡарлыман һөт-консерва комбинаты етештереү даирәһен киңәйтергә йыйына. Башҡортостан Хөкүмәтендәге "Инвестиция сәғәте"ндә республикала ҡуйыртылған һөт етештергән берҙән-бер предприятиеның үҫеш концепцияһы ҡаралды.**

Производствоны бер нисә йүнәлеш буйынса киңәйтеү күҙ уңында тотола. Стериллэү һыҙаты була, ҡалай банкалар етештереү асыла, шулай уҡ 1 200 һыйырға һөт фермаһы ойоштórола. Инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу сеймал эшкәртеү күләмен тәүлегенә 150 тоннаға тиклем арттырырға, сығарылған продукцияның ассортиментын киңәйтергә мөмкинлек бирә. Инвестицияларҙың дөйөм суммаһы 953 миллион һум тәшкил итә. Шәкәрһеҙ ҡуйыртылған һөт етештереүҙе үҙләштереү Азия һәм ғәрәп илдәре баҙарҙарына сығырға мөмкинлек бирергә тейеш, тип билдәләне комбинат директоры Александр Кулимбетов. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә бер генә завод ошондай продукция әҙерләү менән шөғөлләнә. Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов иғтибарын Ҡарлыман брендын юридик яҡлау мәсьәләләренә йүнәлтте. Республика Башлығы Радий Хәбиров ошондай мәсьәләләр менән шөғөлләнә алған айырым структура булдырырға тәҡдим итте.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Шәхси эшҡыуарҙар эшмәкәрлектәрен һалым инспекцияларына бармайынса туктата ала. Федераль һалым хеҙмәте "Юридик берәмектәрҙе һәм шәхси предприятиеларҙы дәүләт теркәүе" сервисын эшләп бөттө. Унда электрон ҡултамғаһыҙ Рәсәй Һалым хеҙмәтенең республика буйынса 39-сы район-ара инспекцияһына ғариза ебәрергә мөмкин. Документтар биш эш көнөндә ҡарала, һуңынан яуап ғариза бирелгән саҡта күрһәтелгән электрон почта йүнәлтелә.

✓Интернетта "Өс таған" яңы нәфис фильмының русса трейлеры сыҡты. Совет әҙәбиәте классигы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Өс таған" повесын режиссер Айнур Асҡаров экранлаштырҙы. Уны 2020 йылдың 27 августында экранға сығарыу күҙаллана.

✓2020 йылда Башҡортостанда күренекле башҡорт йырсыһы, композитор һәм башҡорт профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған юбилей саралары уҙғарыла. 2020 йылдың 29 апрелендә республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте.

✓"Йомарт ҡуян" башҡорт халыҡ әкиәте Төркиәлә донъя халыҡтары әкиәттәре серияһында донъя күрҙе. Ул 12 китаптан торған "Төрки телле халыҡтарҙың әкиәттәре" серияһына ингән. Унда әзербайжан, алтай, башҡорт, татар, төрөк, төркмән, хакас, сыуаш әкиәттәре лә бар. Китаптар серияһы Төркиәнең Мәҙәниәт һәм туризм министрлығы булышлығында сығарылған.

✓Халыҡ мәшғүллеге үҙәктәре 50 йәшлек һәм унан өлкән граждандарҙы һөнәри уҡытыуға субсидиялар алыу өсөн предприятиеларҙан һәм ойошмаларҙан ғаризалар ҡабул итә башланы, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хеҙмәт министрлығынан. Эш биреүселәргә субсидия Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса әҙерләнгән "Демография" милли проекты сиктәрендә тапшырыла. Дәүләт (муниципаль) учреждениеларҙан тыш, шәхси эшҡыуарҙар һәм юридик берәмектәр бюджет субсидияларына иҫәп тота ала.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Коронавирус афәте тормоштоң бар өлкәләрендә лә үҙенең эҙен ҡалдырҙы, тамғаһын һалды: иҡтисад тармағы көрсөк кисерҙе, бәләкәй эшҡыуарлыҡтың ҡайһы бер тармаҡтары йә "үлде", йә саҡ тын ала. Онлайн башҡарып була торған барлыҡ эшмәкәрлек интернетҡа күсте. Әммә, нисек кенә булмаһын, тормош шығырлай-ыңғыраша булһа ла дауам итә. Ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәләрҙә лә мөһим мәсьәләләр тикшерелә һәм улар буйынса аныҡ бурыстар ҡуйыла.**

# ЭШҺЕҘҘӘР АРТА...

Үткән кәңәшмәлә көн үҙәгенә башҡа һорауҙар менән бер рәттән йылдың 4 айында ҡала бюджетының үтәлеше мәсьәләһе сығарылды. Хакимиәттең Финанс идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева белдереүенсә, 1 майға ҡарата бюджетҡа 8 миллиард 633 миллион һум күләмендә килем ингән, был йыллыҡ тәғәйенләүҙәрҙең 29 процентын тәшкил итә. Һалым һәм һалым булмаған килем 4 миллиард 207 миллион һум, йәғни йыллыҡ пландың 31 процентын алып тора. Әлеге осорға нормативтан 323,5 миллион һумға ҡалышыу күҙәтелә. Сығыш яғыуы белдереүенсә, яңы коронавирус инфекцияһы таралыуына бәйле Башҡортостан Башлығы ҡарарына ярашлы, иҡтисадтың зыян күрергә мөмкин булған тармаҡтарында эшмәкәрлек алып барыусы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына ярҙам күрһәтеү буйынса саралар ҡабул ителгән. Барлыҡ социаль йөкләмәләр тулы күләмдә үтәлә. Бөгөн ҡала территорияһында биш милли проект сиктәрендә 9 төбәк проекты тормошҡа ашырыла. Улар барлыҡ сығанаҡтар иҫәбенә 4 миллиард һумдан ашыу суммала финанслана. Илдәге иҡтисади хәл-тороштоң ҡатмарлашыуы һөҙөмтәһендә раҫланған ҡала бюджеты ла бер ни тиклем үҙгәрештәр кисерә, ҡайһы бер саралар өсөн күҙалланған аҡсалар икенсе йүнәлешкә бүленә. Шуға күрә Гөлнара Вәлиева бюджет средстволарын ҡулланыусыларҙы ҡайһы бер сығымдарҙы һөҙөмтәһеҙ файҙаланыуҙан тотҡарланып торорға, айырым сығымдарҙы һуңғараҡҡа күсереү мөмкинлеген ҡарарға саҡырҙы.

**Оператив кәңәшмәлә күтәрелгән икенсе төп мәсьәләләрҙең береһе - ҡала күләмендәге эшһеҙлек темаһы булды.** Был хаҡта Өфө халҡының мәшғүллек үҙәге директоры Ридан Ахъямов бәйән итте. Бөгөнгә ойошмаға 14207 кешенән ғариза килгән. Йыл башынан эшһеҙҙәр һаны 6281 кешегә артҡан. Шул уҡ ваҡытта ойошма базаһында йыл башына 19544 вакансия булһа, 7 майға ҡарата уларҙың һаны кәмеп, 17391 ҡалған.

Йыл башына теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 0,84 процент булһа, 7 майға 1,88 процент тәшкил иткән (республика буйынса был һан 2,20 процент). Рәсми рәүештә эшһеҙ тип танылған граждандарҙың барыһына ла пособие билдәләнә. Шул уҡ ваҡытта, әгәр гражданин 1 марттан эштән ебәрелеп, эшһеҙ тип танылһа, уға эшһеҙлек буйынса пособие максималь күләмдә - 13949,5 һум - түләнә. Шулай уҡ рәсми рәүештә эшһеҙ тип танылған ата-әсәләрҙең береһенә, ғаиләләге балиғ булмаған балаларҙың һәр береһе өсөн 3 мең һум бирелә. Әлеге ваҡытта 569 өфөлө шундай пособие ала.

Әгәр гражданин 1 мартҡа тиклем эштән ебәрелгән булһа, уға һуңғы эш урынындағы эш хаҡы буйынса, әммә эшһеҙлек буйынса максималь пособиенан (13 949,5 һум) артыҡ йәки минималь күләмдән кәм (1 725 һум) булмаған сумма түләнә. Минималь пособие кеше оҙаҡ ваҡыт эшләмәгән, беренсе тапҡыр эш эҙләгән, хеҙмәт дисциплинаһын боҙған йәки башҡа гәйепле ғәмәлдәре өсөн эштән бушатылғанда, эшһеҙ ҡалғанға тиклем 12 ай дауамында 26 аҙна эшләгән осраҡта ғына тәғәйенләнә. Максималь күләм шәхси эшҡыуарҙарға һәм үҙмәшғүлдәргә ҡағылмай. Хатта уларҙың эшҡыуарлығы ябылған саҡта ла эшһеҙлек буйынса пособие минималь күләмдә түләнә һәм балиғ булмаған балалар өсөн өҫтәмә түләүҙәр бирелмәй.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТЫНЛЫҠ СӘҒӘТЕ



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары май айындағы пленар ултырышта "Башҡортостан Республикаһының айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡарарға ниәтләй.**

Әгәр закон ҡабул ителһә, республикала көндөҙгө 1-ҙән 3-кә тиклем тынлыҡ сәғәте була. Атап әйткәндә, күрһәтелгән ваҡытта күп фатирлы йорттарҙа һәм ятаҡтарҙа шау-шыулы ремонт эштәрен башҡарған өсөн штраф һалырға тәҡдим ителә. "Закон проекты халыҡтың тынысլығын һаҡлауға йүнәлтелгән. Беҙ уны һайлаусыларҙың бик күп мөрәжәғәттәре нигеҙендә әҙерләнек, - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Төп маҡсат - был ваҡытта, ҡағыҙҙа булараҡ, көндөҙ йоҡлап алған өлкән йәштәгеләрҙең һәм балаларҙың мәнфәғәттәрен яҡлау. Балалар түйғансы йоҡларға тейеш". Парламент спикеры шулай уҡ тейешле законды ҡабул итеүҙең коронавирус пандемияһы шарттарында бик мөһим булыуын билдәләне. "Тынлыҡ сәғәте" осоронда тынлыҡты боҙған өсөн штраф күләме граждандарға - мең һумдан алып ике мең һумғаса, вазифалы кешеләргә - өс меңдән биш мең һумғаса, юридик берәмектәргә - ун меңдән ун биш мең һумғаса. Сикләүҙәр аварияларҙы, стихия афәттәрен бөтөрөү осраҡтарына, башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәргә, граждандарҙың шәхси һәм йәмәғәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә бәйле кисектергеһеҙ эштәргә, шулай уҡ файҙаланыуға тапшырылғандан һуң йыл ярым дауамында яңы йорттарға ҡағылмай.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЙӘЙ ЭҪЕ БУЛА

✓ **2020 йылдың иң эҫе биш йыл иҫәбенә инеүе мөмкин. Был хаҡта Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд хәбәр итте.** Биш йыллыҡ һайын температура күтәрелә, был глобаль йылыныу өсөн хас, тип билдәләне ул. "Бәлки, йыл рекордлы йылы булмаҫ, ләкин температуралар дәрәжәһендә икенсе йәки өсөнсө. Температура, һис шикһеҙ, юғары булыр. Уның иң эҫе биш йыл иҫәбенә инеү ихтималлығы 99 процент", - тип Роман Вильфандтың һүҙҙәрен килтерә РИА Новости агентлығы. Бынан алда Американың Океанды һәм атмосфераны тикшереү буйынса милли идаралығы ғалимдары 2020 йыл 75 процент ихтималлыҡ менән тарихта иң эҫеһе булыр, ә 99,9 процент ихтималлыҡ менән йылы буйынса рекордлы биш йыл иҫәбенә инер тип хәбәр иткәйне.

✓ **Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин хөкүмәткә әсәлек капиталын файҙаланып, балалы ғаиләләр өсөн торлаҡҡа кредит буйынса беренсе взносты кәметеү тураһында тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.** "Рәсәй Федерацияһы хөкүмәтенә балалы ғаиләләргә әсәлек капиталы аҡсаһын файҙаланып, торлаҡ һатып алыу (төҙөү) өсөн кредит биргәндә беренсе иғанә күләмен 15 процентҡа тиклем кәметеү тураһында тәҡдимдәр әҙерләргә",- тиелә Кремль сайтында баҫылған йөкләмәлә. 6 мартта президенттың Иваново өлкәһе йәмәғәтселеге вәкилдәре менән аралашыуы барышында ҡатнашыусыларҙың береһе балалы ғаиләләргә ипотека буйынса льготалы шарттарға ҡарамаҫтан, банк билдәләгән беренсе взнос күләме арҡаһында бөтәһенен дә бындай саранан файҙалана алмауы хаҡында әйтте. Ул саҡта дәүләт башлығы хөкүмәткә тейешле йөкләмә биргәйне.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин Хөкүмәткә йылына 6,5 процент менән льготалы ипотека программаһын раҫларға ҡушты.** Ошо программа сиктәрендә 2020 йылдың 1 ноябренә тиклем төбәктәрҙә 3 миллион һумға тиклем беренсел торлаҡ һатып алыу өсөн льготалы ставка буйынса ипотека кредиттары бирелә. Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, шулай уҡ Мәскәү һәм Ленинград өлкәләрендә ипотека кредитының суммаһы 8 миллион һумға тиклем арттырылды. Бынан тыш, Владимир Путин 20 майға хәтлем тәҙәлөштә коронавирустан айырыуса ныҡ зыян күргән тармаҡтар исемлегенә индереү тураһында мәсьәләне өйрәнергә, 1 майға тиклем төҙөүселәргә стандарт торлаҡ һатып алыу өсөн 50 миллиард һум күләмендә "Дом.РФ" йәмғиәтенә дәүләт гарантияларе тапшырырға ҡушты.

✓ **Рәсәйҙә студенттарға рәсми рәүештә мәктәптәрҙә уҡытырға рөхсәт итеүҙәре ихтимал. Дәүләт Думаһы ошо закон проекты буйынса эште көсәйтә.** Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин шундай йөкләмә бирҙе. Парламентарийҙар студенттарға мәктәптәрҙә уҡытырға рөхсәт иткән закон проектын икенсе уҡыуҙа ҡарауға әҙерләргә тейеш. Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, бынан алда Рәсәй Федерацияһы Президенты февралдә Череповец ҡалаһында йәмәғәтселек вәкилдәре менән осрашыу йомғаҡтары буйынса йөкләмәләр исемлеген раҫланы. Йөкләмә пункттарының береһе - Дәүләт Думаһына "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль закондың "студенттарға белем биреү эшмәкәрлеген ғәмәлгә ашырыуға рөхсәт биреү" өлөшөнә ҡағылышлы 46-сы һәм 108-се статьяларына үҙгәрештәр индереүҙе тиҙләтеү тәҡдиме.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк фибрилляцияһы

❖ Йәки урыҫса тағы ла "мерцательная аритмия" тип йөрөтөлгән йөрәк сире киң таралған. Унан алма һәм һуған ярҙам итә. Бер баш һуған һәм алманы ваҡ ҡырғыстан үткәрергә. Ҡушымтаны аш араһында көнөнә 2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

### Үпкә шешеүе

❖ 10-ар грамм кәкүк баш (медуница) үләне һәм этҡолаҡ тамыры (окопник лекарственный), 5-әр грамм ҡыяҡ юл япрағы (подорожник ланцетный), үгәй инә үләне сәскәһе, айыу ҡолағы сәскәһе (коровяк), ҡара мәрүәр сәскәһе, йүкә сәскәһе, ялан ҡара бойҙайы сәскәһе, 3 грамм кәкүк емеше (первоцвет весенний) үләне, ҡыр мәгенең 7 грамм таҙарын ваҡлап ҡушырға. Кистән 4 ҡалаҡ йыйылмаға 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдыралар. Иртәнсәк марля аша һөҙөп, төнөтмәне йылытып көн дауамында йотомлап эсеп бөтөргә. Был шифалы сәйҙеге мәк кодеин кеүек тәьҫир итеп, йүтәлләүҙе баҫа, ә ҡалған үләндәр ҡаҡырыҡты сығырға ярҙам итә. Этҡолаҡ ағыулы үсемлек, уны ҡулланғанда иғтибарлы булырға кәрәк.

❖ Һаҙанаҡ үләне (багульник болотный), үгәй инә үләне япрағы, шифалы шалфей япрағы, татлы тамыр (солодка голая) һәм андыҙ тамырҙары, Исланд мүге, һары мәтрүшкә үләне, һалбыр ҡайын (береза бородавчатая) япрағын 10-ар грамдан үлсәп һалырға. Ваҡланған йыйылманың бер ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15-20 минут төнәтергә, һыуытып һөҙөргә. Бер стакан дауаны дүрткә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөрөргә. Һаҙанаҡ үләнен ҡулланғанда иғтибарлы булырға кәрәк.

### Арҡа һөйәге һыҙлаһа

❖ Арҡа һөйәге һыҙлағанда хәлде еңеләйтеү өсөн аҡтамыр тамырын ҡайнатып эсергә кәрәк, ул организмдағы тоҙҙарҙы сығарырға ярҙам итә. 30 грамм киптерелгән аҡтамыр тамырына 1 литр һыуыҡ һыу ҡойоп, шунын яртыһы ҡалғансы ҡайнатырға. Һыуытырға, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Дауаланыу осоро бер айҙан да кәм булмаҫҡа тейеш, шул осраҡта ғына файҙаһы тойола.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ҡурсаланыу режимы мотлаҡ рәүештә коронавирус һәм ҡайһы бер хроник сирлеләр, икенсе төбәктәрҙән килеүселәр, шул иҫәптән Мәскәүҙән, һәм ҡайһы бер хроник сирлеләр менән бәйләнештә булыусылар өсөн мотлаҡ һаҡлана.*



### ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Силәбе өлкәһендә, Ҡурған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарында йәшәгән (Ырымбур губернаһының элекке Троицк һәм Силәбе өйәҙҙәре) көнсығыш Урал аръяғы башҡорттарының йорт эсен биҙәү әйберҙәрендә һәм бигерәк тә кейемдәрендә, семәрле туҡыусылыҡ булыуға ҡарамаҫтан, ҡайыу мөһим урын алып торған. XX быуаттың 60-сы йылдарында Көнсығыш Урал аръяғы башҡорттарының йорт производствоһына ҡылыҡһырлама биргәндә Н.В. Бикбулатов "техник алымдар һәм уларға бәйле орнамент өлгөләре төрлөлөгө"н һыҙыҡ өҫтөнә ала. XIX быуатта һәм XX быуаттың тәүге ун йыллығында көнсығыш төркөм башҡорттарында һырыу ҙа (свободные тамбурные вышивки), геометрик орнаментлы хисаплы ҡайыу - нағыш та киң таралған. Элмә (ябай тамбур) ҡуш элмә менән аралашып килгән, йәки төп техника булараҡ ҡулланылған. Ҡабартма ҡайыуҙа (тамбурная вышивка) үҫемлек мотивтары өҫтөнлөк алған. Ҡурған өлкәһе орнаменты үҙенсәлекле булыуы менән айырылып торған. XIX быуатта бында киндер йәки асыҡ төҫтәге (һары, асыҡ йәшел, һорғолт күк) кизе-мамыҡ туҡымаларға контурлы элмәне йыш ҡулланғандар. Төҫтәр гаммаһы сағыу түгел: бер төрлө, ҡайһы саҡта ерлеккә ярашып килгән ҡайылған һыҙатта биҙәктең айырым өлөштәре, ҡаймаһы төҫлө итеп сигелгән. Һыҙатлы һүрәт өҫтөнлөк иткән. Итәк һәм ең остары, иҙеү ҡапҡасы, ҡушъяулыҡ ситтәре нағышланған. Билбауҙарҙа һәм таҫтамалдарҙа орнамент күп һыҙатлы була, һауыт-һаба майлыҡтары һәм ашъяулаҡтарҙа ул рам формаһын алған. Күлдәк итәгенең ҙур өлөшөнә нағыш һалынған, биҙәк камзулдан саҡ ҡына аҫтараҡ башланып, рәт-рәт булып төшкән. Орнаменттың киң үҙәк һыҙаты өҫтән дә, аҫтан да тар ғына ҡайма менән уратылған, уға аҫҡа һалынып төшөп торған суҡтар формаһындағы биҙәктәр ҡушылып киткән.



*Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге итәгендәге ҡайыу (Ҡурған өлкәһе). МАЭ. Т.К. Сурина фотоһы.*

1912 йылда С.И. Руденко тарафынан Урыҫ музейының этнография бүлеге өсөн Силәбе өйәҙе Ҡатай башҡорт ихатаһының Күйбәк ауылынан һатып алынған асыҡ-һары күлдәк (РЭМ, кол. 2881-435) боронғо ҡайылған кейем үрнәге булып тора. Унның ең остарында һыҙат итеп берләштерелгән спираль һымаҡ биҙәк һырылған. Үҙәк һыҙаттың түңәрәк формалағы биҙәге тулҡын рәүешендәге һыҙаттар араһында урынлаша. Тулҡынлы һыҙаттар үҙ сиратында эстән япраҡ һәм емешле боролмалы ботаҡтар менән ҡабаттан йөрөтөп эшләнгән. Эске үремдәр ҡушылып йә айырымланып китеп, йә ярым түңәрәккә берләшеп ҡусҡарҙар барлыҡҡа килтерә, уларҙан елпеүес һымаҡ ғәжәйеп емештәр "үҫеп сыға". Был биҙәктәр горизонталь буйынса урынлаштырылған. Һалынып торған суҡтарҙан һәм сәскәләрҙән торған тулҡынлы һыҙат күлдәк итәгенең осонан үтә.





*Ҡайылған күлдәк. Орнамент киҫәге (Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы, Күйбәк ауылы). РЭМ. XX б. башы.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

### ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

**11 майҙа ил Президенты Владимир Путиндың ял көндәре режимының бөтөүе һәм балалы ғаиләләргә яңы ярҙам саралары тураһындағы мөрәжәғәтен күптәр илдең яйлап ҡына ғәҙәти тормошҡа ҡайта башлауы тип ҡабул итте. Күптәр Башҡортостандағы хәл-торошто баһалап, урында ҡарар сығарған республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡурсаланыу талаптарын бер аҙ йомшартыуын иһә уны бөтөнләй бөтөрөлдө тип аңлап хаталанды. Шундай аңлашылмаусылыҡтар булмаһын өсөн гәзит уҡыусылар өсөн төп яңылыҡтарға аңлатма биреүҙе урынлы тип таптыҡ.**

# ҠУРСАЛАНЫУ ДАУАМ ИТӘ:

## тик бер аҙ ташламалар бар




### Кемдәр эшкә сығасаҡ?

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте төҙөгән исемлеккә быға тиклем эшләүселәр һәм аҙыҡ-түлек булмаған магазиндар инә. Әммә улар айырым талаптарҙы мотлаҡ үтәргә тейеш: айырым инеү урыны, майҙаны 50 квадрат метрға тиклем бинала кешеләр һаны - 5, 100 квадрат метрҙан ашыу бинала - 10 кеше һәм шулай дауам итә. Үҙмәшғүлдәргә лә сикләүҙәр алынды.

- Барлыҡ эшләүсе предприятиелар санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе үтәргә - дистанция һаҡларға, дезинфекция үткәрергә, кешеләр менән эшләгәндә битлектәр кейергә тейеш. Министрлыҡтар, ведомстволар эшләүсе предприятиеларҙың хеҙмәткәрҙәре өсөн өҫтәмә ҡағиҙәләр билдәләйәсәк.
- Төнгө клубтарға, кинотеатрҙарға, театрҙарға, музейҙарға, балалар уйын бүлмәләренә һәм күңел асыу-ял итеү үҙәктәренә, спорт залдарына, фитнес-үҙәктәргә, аквапарктарға, бассейндарға, мунсаларға, сауналарға, сауҙа-күңел асыу үҙәктәренә (уларҙа урынлашҡан дарыуханаларҙан, МФЦ, аҙыҡ-түлек, көндәлек тауарҙар, төҙөлөш һәм хужалыҡ тауарҙары менән сауҙа иткән магазиндарҙан, зоомагазиндарҙан тыш) эшләү тыйыла.

### Урамда йөрөргә мөмкин, тик битлек кейеү мотлаҡ!

- Өйҙә генә бикләнеп ултырмаҫҡа ла була. Барлыҡ элекке сикләүҙәр юҡҡа сығарыла. Йәғни эшкә барыу өсөн эш биреүсенең пропускыһы кәрәкмәй, машинала сикләүһеҙ йөрөргә мөмкин, йорттан 150 метр алыҫлыҡта йөрөргә була. Дорога02 сайты ябыла. Парктар, скверҙар асыла, әммә унда йөрөгәндә лә битлек кейергә һәм дистанция һаҡларға кәрәклеген онотмағыҙ. Парктарҙағы тәртип ҡағиҙәләрен ҡала һәм район хакимиәттәре билдәләй.
- Ҡурсаланыу режимы мотлаҡ рәүештә коронавирус һәм ҡайһы бер хроник сирлеләр, икенсе төбәктәрҙән килеүселәр, шул иҫәптән Мәскәүҙән, һәм ҡайһы бер хроник сирлеләр менән бәйләнештә булыусылар өсөн мотлаҡ һаҡлана.
- 65 йәштән өлкәндәр, хроник сирлеләр (киске 6-нан иртәнге 6-ға тиклем) һәм уҡыусылар өсөн (киске 8-ҙән көндөҙгө 2-гә тиклем) "комендант сәғәте" һаҡлана. Был ваҡытта урамға сығырға ярамай.
- Йәмәғәт транспортында, магазиндарҙа, банктарҙа, МФЦ-ларҙа, башҡа йәмәғәт урындарында һәм урамда битлек режимын һаҡлауҙы тикшереү Өфөлә генә түгел, райондарҙа ла көсәйтелә. Бигерәк тә был талап эш урындарында, йәмәғәт транспортында мөһим әһәмиәткә эйә.

### Яңы льготалар, түләүҙәр һәм пособиелар

- 3 йәштән 15 йәшкә тиклем балалар тәрбиәләүсе ғаиләләр һәр балаға 10-ар мең һум аласаҡ. Берҙән-бер шарт - 1 июлгә тиклем балаға 16 йәш тулмаҫҡа тейеш. Бер ниндәй ҙә справка йыйырға кәрәкмәй, ғаризаны "Госуслуги" хеҙмәте аша бирергә мөмкин. Аҡса 1 июндән һуң киләсәк.
- 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге бала тәрбиәләгән ғаилә килеме йән башына бер йәшәү минимумынан түбән булһа (бер кешегә 10 186 һум тирәһе), улар пособиены июлдән түгел, ә июндән ала башлаясаҡ һәм түләүҙәр йыл башынан алып иҫәпләнәсәк. Йәғни ғаилә алты ай өсөн 30 мең һум самаһы аҡса аласаҡ.
- Бала тәрбиәләү буйынса пособиеның минималь күләме 3375,77 һумдан 7764,27 һумғаса артасаҡ (Урал коэффициентын иҫәпкә алып).
- Өс йәшкә тиклем балалары булған ғаиләләр һәр балаға апрель-июнь өсөн 5 мең һум алырға хоҡуҡлы (элек был хоҡуҡҡа бары тик әсәлек капиталы булғандар ғына эйә ине).
- Социаль учреждение хеҙмәткәрҙәре өс айға, 15 апрелдән - 15 июлгә тиклем, эш хаҡына өҫтәмә аласаҡ.
- Социаль учреждениелар табиптары ике аҙналыҡ эш сменаһы өсөн - 40 мең, коронавирус менән зарарланған сирлеләргә ярҙам күрһәтеүселәр 60 мең һум аласаҡ.
- Социаль һәм педагогик хеҙмәткәрҙәр, урта медицина һәм административ персонал - 25/35 мең һум.
- Кесе медицина персоналы - 15/20 мең һум.
- Техник персонал - 10/15 мең һум.

### Бизнес өсөн льготалар һәм льготалы кредиттар

Зыян күргән тармаҡтарҙа шәхси эшҡыуарҙар, бәләкәй предприятиелар, социаль йүнәлешле НКО-лар:

- Айына бер хеҙмәткәргә 14 мең һум (МРОТ) иҫәбенән (ярты йылға 84-әр мең) йылына 2 процент менән льготалы кредит аласаҡ. Уны 2021 йылдың 1 апреленә тиклем түләргә кәрәк. Әгәр предприятие коллективтың 90 процентын һаҡлап ҡалһа - түләмәй, барыһын да дәүләт компенсациялай. Әгәр коллективтың 80 проценты һаҡланып ҡалынһа - кредиттың ярыһын һәм процентларын һыҙасаҡтар. Аҡсаны эшселәргә эш хаҡы түләүгә йәки элек алынған процентһыҙ, эш хаҡы кредитын рефинанслауға тотонорға мөмкин.
- Икенсе квартал өсөн һалымдарҙан, НДС-тан башҡа, азат ителәләр.
- Шәхси эшҡыуарҙар өҫтәмә рәүештә страховка иғәнәһен түләү өсөн бер МРОТ күләмендә (14 мең самаһы) һалым ташламаһы ала.
- Үҙмәшғүлдәргә 2019 йылда түләнгән һалымдары тулыһынса кире ҡайтарыласаҡ. 2020 йыл өсөн уларға бер МРОТ күләмендә "һалым капиталы" биреләсәк. Был күләмгә дәүләт һеҙҙең өсөн үҙе һалым түләйәсәк, ә инде артҡан күләмде үҙегеҙгә түләргә тура киләсәк.

**Станислав ШАХОВ.**
**"Башинформ".**

*✓ Фидан Мәрүәров "Иҫке Күктау ауылы тарихы" исемле китабында ырыуға нигеҙ һалыусы сифатында Ҡорҡот ата түгел, ә тарихи шәхес - Ҡандар бей тип күрһәтә. Тап ошо зат легендар "Дәфтәр-и Сынғыҙнамә" әҫәренә лә индерелгән.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ҠЫРҒЫҘ, ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТ



Ғәрәп сәйәхәтселәре яҙмаларында ҡырғыҙҙарҙың ер эшкәртеп, төрлө ашлыҡ культураларын үҫтереүе хаҡында мәғлүмәттәр бар. Уларҙың ҡайһылары ҡырғыҙҙарҙың төп ризыҡтары иҫәбенә икмәкте лә индерә. Ә был уларҙың ултыраҡ тормош алып барыуы хаҡында ла һөйләй. Тимәк, улар малсылыҡ һәм ер эшкәртеү менән бер рәттән, хәрби походтар ойоштора алыуы яугир халыҡ булған.

X быуатта Ҡырғыҙ илен килеп күргән ғәрәп шағиры һәм сәйәхәтсеһе Әбү Дулаф ошо халыҡтың юғары кимәлдәге мәҙәниәтле ҡәүемдәрҙән булыуы хаҡында яҙа. Был автор ҡырғыҙҙарҙың яҙыу өсөн ҡамыш ҡәләм ҡулланыуҙарын билдәләй. Бында яҙма документтәр өсөн ҡағыҙ ҙа ҡулланылған. Әбү Дулаф урындағы халыҡтың утҡа, Сатурн һәм Венера (Сулпан йондоҙ) планеталарына ҡарата билдәле мистик мөнәсәбәттә булып, дини йолаларын башҡара торған ҡорамдары булыуына иғтибар иткән. Икенсе бер ғәрәп авторы Гардизи иһә ҡырғыҙҙарҙың медиумдары һәм күрәҙәселәренең музыка тәьҫирендә транска инеп, киләсәктә ни булырын алдан иҫкәртеүҙәре хаҡында яҙған. Күрәһең, ҡырғыҙҙарҙа шаманлыҡ культы көслө булған. Гардизи яҙыуынса, был халыҡта тотемизм, йәғни төрлө ҡоштарға, йәнлектәргә һәм тәбиғи стихияларға табыныу ҙа киң таралған була. Ғәрәп ғалимы ҡырғыҙҙарҙың мәйет яндырыу йолаһына ла иғтибар итә: "Ҡырғыҙҙар, индустар кеүек үк, үлгәндәрҙе яндыралар, һәм әйтәләр: "Ут - иң таҙа әйбер; утҡа эләккән бар нәмә таҙара; ут мәйетте бысраҡтан һәм гонаһтан таҙарта". Әйтергә кәрәк, мәйет яндырыу йолаһы шулай уҡ күк төрөктәргә, славяндарға һәм башҡа ҡайһы бер халыҡтарға хас булған.

Урта быуаттарҙа Ҡырғыҙ державаһы көсһеҙләнә һәм тарҡала башлай, бер үк ваҡытта мәҙәни регрессия ла башлана. Улар XI-XII быуаттарҙа боронғо яҙмаларын юғалта, ҡәберҙәргә һалына торған керамик һауыт-һаба аҙая бара, уларҙы күскенселәргә хас күндән яһалған һәм металдан ҡойолғандары алмаштыра.

Тарихсы-белгестәр фаразлауынса, ҡырғыҙҙар Көньяҡ Уралға уларҙың дәүләтселеге көслө булған осорҙа - X быуаттан алдараҡ килеп етә. Уларҙың үҙҙәренең тыуған тарихи ерҙәренән бөтөнләйгә айырылып киткән ҙур ғына бер төркөмө бында йәшәгән башҡорттар менән тығыҙ мөнәсәбәткә инеп, артабан башҡорт этник номенклатураһы составына инеп китә.

Тыуған яҡты өйрәнеүсе Фидан Мәрүәров "Иҫке Күктау ауылы тарихы" исемле китабында Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһенең бер вариантын килтерә. Был шәжәрәгә ярашлы, ырыуға нигеҙ һалыусы сифатында Ҡорҡот ата түгел, ә тарихи шәхес - Ҡандар (Ҡалдар) бей күрһәтелә. Тап ошо зат легендар "Дәфтәр-и Сынғыҙнамә" әҫәренә лә индерелгән: "Андин суң Джингизхан әйтде: "Әй, Ҡалдарбий, синең ағачың сандал үә ҡошоң күгәрчен үә ораның "Арнау!" үә тамғаң чумеч булсын...". Уның атаһы Ялан бей (ҡайһы бер версияларҙа Балин йә иһә Бален бей), ҡартатаһы Манғытай исемле булған.

XVI быуаттың икенсе яртыһында, башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, тарихи Башҡортостандың Ҡаҙан даруғаһында (юлында) Ҡырғыҙ олоҫо барлыҡҡа килә. 1913 йылда "Шура" журналында Бөгөлмә мөғәллиме А. Хәлимов баҫтырған шәжәрәлә ҡырғыҙ башҡорттарының башлығы Ҡылчан Күккүҙ бей улының һәм уның бер туғаны Танычтың (йә иһә Тынычтың) батша Алексей Михайловичтан үҙ ырыуҙарының аҫаба ерҙәрен биләү буйынса (владенная) грамота алыуы хаҡында мәғлүмәт бирелгән: "...через Белую на устье р. Манашты и вверх от той речки до устья Кичу, через р. Кичу по лугам Базыво, вверх р. Маты, р. Лязиды, Четкурга, Писаман, М. Маты, р. Балчиклы, р. Телгазы, Имчак, Сухов дол, р. Зюня, Сарсаз, Сагын, Узень дол, р. Ик, через р. Ик до р. Кривой Туб, до устья р. Ютазы, до устья Демской, до вершины р. Клану, от вершины Бавлы до устья р. Нижней Усоярлык, до вершины р. Демской, до вершины р. Заю, по р. Заю до р. Зарелы, до вершины р. Ютазы, до истоку Кугуст, через р. Лесной Зай до устья р. Имашу, от него до Кантюбы через р. Ик до Кайслы, до вершины р. Чукай, до вершины р. Соковой, через р. Зай до киргизского Булыку, от него до Дищуй, до соснового суходолу, вниз до р. Ушази и до устья Ишази через Сюнь реку, до устья р. Большой Маты и вверх по Мате до вершины р. Илды, а с вершины до р. Ташлы, до устья через р. Сунь, до р. Мезиллы до Карык Кулану, от него до р. Бизяды, до Сарсаз от вершины Сарсазу, до вершины р. Актаныш до оз. Иргинеш, от него до вершины р. Кутелга, от нее до горы Иградуш, через р. Белую до р. Кунь, от нее до р. Илдаяку, от нее до вершины р. Калтию и до [деревни] Старых Киргиз..."

Әммә ысынбарлыҡта был грамота 1632 йылда, Михаил Федорович батшалыҡ иткән саҡта бирелгән. Ошо батша исеменән бирелгән грамотала һәм индереү (ввозная) грамотаһы тип аталғанында Ҡылчан Күккүзев һәм уның иптәштәренә аҫаба ерҙәре өсөн яһаҡ түләүҙең 1604-1605 йылдарҙа батша Борис Годунов тарафынан билдәләнеүе әйтеп үтелә. Тимәк, тап ошо саҡта ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарын да Рус дәүләте ҡулы аҫтына инеүен раҫлап була.

Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары батша хөкүмәте чиновниктары һәм рус заводчиктарының баш-баштаҡлығына, үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын тупаҫ боҙоуға ҡаршы башланған барса халыҡ күтәрелештәрендә әүҙем ҡатнаша. Башҡа ихтилалдар менән сағыштырғанда, рус историографияһында Алдар-Күсем бунты тип аталып йөрөтөлгән халыҡ күтәрелеше (1704-1711 йылдар) батша властарын үтә нык һиҫкәндереп, башҡорттарға ҡарата барған ҡыҫымды күпкә йомшартырға мәжбүр итә. Ихтилал башында дан ҡаҙанған батырҙар Алдар тархан Иҫәкәев, Күсем Түләкәев һәм Ураҙай исемле башҡорт бейе тора. Һуңғыһы, ҡайһы бер фараздарға ярашлы, Ҡырғыҙ олоҫоноң ырыу башы булған (билдәле документтарҙа уның ҡайһы ырыуҙан икәнлеге күрһәтелмәгән). Әммә 1735 йылға ҡараған бер сығанаҡта Ҡырғыҙ олоҫо Күктау ауылынан Баислан Уразаев исемле "арҙаҡлы башҡорт" иҫкә алына. Уның Ураҙай батыр улы булыуына шик юҡ.

1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы аяуһыҙ рәүештә ҡанға батырылғандан һуң халҡыбыҙ иҫ китмәле юғалтыуҙарға дусар ителеп, барлыҡ олоҫтарҙа ла халыҡ һаны ҡырҡа кәмей. Мәҫәлән, Ҡырғыҙ олоҫо башҡорттарын иҫәпкә алыу документтарында был аяныслы хәл асыҡ сағылыш тапҡан. 1725 йылда Көнгәр бургомистры Юхнев тарафынан төҙөлгән документта ошо олоҫта 1000 хужалыҡ иҫәпкә алынып, бында хәрби хеҙмәткә яраҡлы 3 меңгә яҡын ир-ат теркәлә. Ә XVIII быуат урталарында Петр Рычков списоктарында Ҡырғыҙ олоҫонда ни барыһы 113 хужалыҡ булыуы күрһәтелә. Тимәк, бер тиҫтә йыл арауығында ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары 9 тапҡырға тиерлек кәмегән.

Шулай итеп, ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының 2 мең йылдан ашыу боронғо тарихы барлығына инанып була. Әлбиттә, был осраҡта Ҡытай хроникаларында иҫкә алынған ҡырғыҙҙарҙың үҙ заманында боронғо башҡорттарҙан айырым бер ҡәүем булып йәшәп, башҡа халыҡтарға билдәле булған дәүләтселеге булыуын иҫтән сығарырға ярамай. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарға килеп ҡушылған боронғо Енисей ҡырғыҙҙарының бер өлөшө һәм Ҡырғыҙ этнонимы исемендәге башҡорт ырыуы араһындағы этногенетик һәм тарихи бәйләнештең ысынбарлыҡҡа тап килеүен тарихсы ғалимдар бер нисек тә инҡар итмәй. Һәр хәлдә лә, башҡорт этник номенклатураһындағы ҡырғыҙ бүлемен үтә боронғо тарихи реликт, тип атап була. Быны башҡорттарға ғына хас эксклюзив тарихи күренеш итеп ҡарау ҙа дөрөҫтөр: башҡа төрки халыҡтар составында ҡырғыҙ атамаһын йөрөткән субэтник таксон юҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 15, 18-19-сы һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар китте һуғышҡа

Фашист командованиеһы ошо йәйге һөжүмен Воронеж ҡалаһын алыуға йүнәлтелгән, "Күк" тип аталған хәрби операция менән башлап ебәрә. 1942 йылдың июль башында 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры урынбаҫары итеп тәғәйенләнгән Григорий Андреевич Белов үҙенең "Путь мужества и славы" тигән китабында ошо хаҡта былай тип яҙа: "1942 йылдың 28 июнендә "Вейхс" армия төркөмө 16 пехота дивизияһы һәм бер танк корпусы составында 13-сө һәм 40-сы армиялар арауығында фронтты өҙә алды һәм Касторное - Иҫке Оскол тимер юлына сыҡты. Көньяҡ-Көнбайыш һәм Брянск фронттары араһында өҙөклөк барлыҡҡа килде. Фашист ғәскәрҙәренең Елецҡа табан һөжүмен дауам итеүен, шулай уҡ Воронежды төньяҡ-көнсығыштан урап үтеүен булдырмау маҡсатында ошо өҙөклөккә 8-се кавалерия корпусы индерелде, уға Олым йылғаһының көнсығыш ярында (Елецтан көньяҡ-көнбайышҡа табан 40 саҡрымда) оборона тотоу бурысы ҡуйылды. Июлдең тәүге числоларында корпус дошман менән осрашты һәм, ҡапма-ҡаршы барып йә иһә оборонаға күсеп, һуғыша башланы".

1942 йылдың 21 июнендә 112-се дивизияға корпус штабынан яңы билдәләнгән дислокация урынына күсеү хаҡында приказ тапшырыла: дошман һөжүм итеп килгән тарафта алдан уҡ оборона позицияларын биләү бурысы ҡуйыла. 21 июндән 25 июнгә тиклем маршта 200 саҡрым самаһы юл үтеп, дивизия частары ул ваҡыттағы Курск өлкәһенең Белая Гора - Покровское - Давыдово - Борки - Тербуны станцияһы һыҙығында оборонаға әҙерләнә башлай. 2 июлгә дивизия дошман ғәскәрҙәре етеп килгән ауылдар янына күсерелә: 275-се кавполк Опухтино, Малые Борки, Петропавловка ауылдарында, 294-се кавполк - Алешки, Малые Борки, Синий Камень янында, 313-сө кавполк - Николаевка, Лобановка, Васильевка, Березовка хуторында урынлаша.

Ошо хаҡта 112-се атлы дивизия ветераны, политбүлек начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадиров былай тип яҙа: "Дивизияға Алешки - Малые Борки - Святоша ауылдарын тоташтырыусы рубежды һаҡларға, фашистарҙы үткәрмәҫкә хәрби бурыс йөкмәтелде. Ун ике километрға (ә был атлы дивизия мөмкинлектәренән икеләтә артыҡ ине) һуҙылған оборона фронтының уң ҡанатын 275-се, һулын 294-се полк биләне, ә 313-сө полк икенсе эшелонда торҙо. Полковник (комдив М.М. Шайморатов. - **ред. иҫк.**) ошонда дошман менән тәүге тапҡыр йөҙгә-йөҙ киләсәк алыштың һөҙөмтәһенә алдан уҡ ифрат ҙур иғтибар бирҙе, сөнки атлылар араһында дары еҫен бер ҙә еҫкәмәгән һуғышсылар байтаҡ ине. "Тәүге сирҡаныс алыу - ифрат яуаплы мәл, унда ҡаҙанған кескәй генә уңыштар ҙа алдағы һуғыштар өсөн өлгө буласаҡ", - тине. Үҙе һаман ат өҫтөндә: әле бер полкка, әле икенсеһенә елеп йөрөп кенә торҙо. Бәрелеш алдынан һәр эскадронды, артиллерия биләгән позицияларҙы үҙ күҙе менән тикшерҙе, өҫтәмә күрһәтмәләр бирҙе. Оборона һыҙығының үтә оҙонға һуҙылыуы, уны ҡаплап торорлоҡ көстәрҙең етешмәүе дивизияға көтөлмәгән ҡатмарлыҡтар тыуҙырҙы, командирҙан ҙур оҫталыҡ, оперативлыҡ талап итте. Хәрби хәлде энәһенән ебенә тикшереп, М.М. Шайморатов уң флангыны көсәйтергә ҡарар ҡылды. Һулдараҡ, Урицкое-Солдатское ауылдары йүнәлешендә, 21-се кавалерия дивизияһы тора, уның менән ике арала дүрт километрҙан ашыуыраҡ өҙөклөк - фронт асыҡ ҡалған. Шайморатов шул асыҡлыҡты ҡаплатыу яйын да тапты: алғы һыҙыҡтан 106-сы һәм 107-се уҡсы бригадаларҙың тәртипһеҙ сигенеп барыусы айырым подразделениеларын туҡтатып, ваҡытлыса үҙ ҡулы аҫтына алды, шулар менән баяғы йыртыҡты "яманы".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ Юҡҡа ғына заманында Жәлил Кейекбаев, ситтән тороп уҡыу - уҡыуҙан ситтә тороу, тимәгән инде. Ошо онлайн уҡытыу осоронда минең тәнем тотҡонлоҡ, мейем торғонлоҡ кисерә - шундай тойғолар солғанышында йәшәйем.



УЙЛЫҒА - УЙ



# МИНЕҢ ӨСӨН...

## рухи аҙыҡ ҡиммәтерәк

**Был урамдан йә хат һалырға почтаға, йә һаҡлыҡ кассаһына, йә китапханаға үтәм. Почта ҡаршыһында һәр саҡ төрлө кейем һатып тороусы бер ҡатынды күрәм.**

Бик күптән күреп йөрөгәс, һаулыҡ һорашып үтә башланым. Бер туҡтап һөйләшкәндә уның исеме Клара икәнен дә белдем. Ҡайһы саҡ ул һатҡан кейемдәрҙең хаҡтарын да һорашҡан булам. Йөҙ һумлыҡ кофтаны йөҙ илле һумға, егерме һумлыҡ кейемде илле һумға һата икән ул. Бер асылып китеп, фатирына кеше яллап, "евроремонт" яһатыуы менән маҡтанып алды. Әле улына берәй һәйбәт кенә машина һатып алырға аҡса йыйыуын һөйләне. Зыянлы сәнәғәт өлкәһендә эшләп, 45 йәшенән үк пенсияға сыҡһа ла, бәләкәй генә пенсияһын осон-осҡа ялғап, ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙырғанда ла, ҡышҡы сатнама һыуыҡтарҙа ла һатыу итергә сығып баҫа ул урамға. Йәлләйем мин уны.

Ә мин "Бөгөн - дүшәмбе, тиҙҙән "Хазина" тапшырыуы башлана", йә "Бөгөн - йома, тиҙҙән мин яратҡан "Йома" тапшырыуы башлана", "Тиҙҙән ейәнем мәктәптән ҡайта", йә "Ҡыҙыма күлдәк тегеп бөтөрөргә кәрәк", "Китапхана ябылғансы, өлгөрөргә кәрәк" тип, саҡ ҡына һөйләшеп торам да, һаубуллашып, үҙ юлыма ашығам. Ә Клара торған урынында баҫып ҡала. Бер генә эше бар уның - аҡса һанау.

Бер көн тағы ла уның янына туҡталып, йылмайып, һаулыҡ һораштым. Ул көтмәгәндә: "Мин һеҙгә һоҡланам, хатта әҙерәк көнләшәм дә. Кәйефегеҙ һәр саҡ күтәренке, һәр саҡ ҡайҙалыр ашығаһығыҙ. Шундай бәхетле кеше, тип уйлайым һеҙҙең хаҡта", - тине. Клараға рәхмәт әйтеп, өйөмә табан атланым. "Эйе, мин бәхетлемен. Тағы ла... баймын", - тип яуап бирергә ҡыйманым. Яҙыусы Виктория Токареваның шундай һүҙҙәре иҫемә төштө: "Богатый человек - это не тот, у кого много, а тот, кому мало надо". Бөтә илебеҙ менән әйбер ҡолона әйләнеп, мещанлыҡҡа юл табыҙмы хәҙер? Әллә текә тауҙан тәгәрәп төшөп барғандай, һис тә туҡтатып булмай торған ҡолаумы был?

Эйе, милләтемдең ҡаһарман тарихы, мең-мең йылдар буйы тупланған боронғо йырҙары, риүәйәттәрем сикһеҙ байлығым бит. Эйе, бәхетле лә, бай ҙа беҙ. Көнләшерлек шул. Аҡса-тауар-аҡса әйләнешенә инеп киткәндәргә Хоҙай һаулыҡ, түҙемлек бирһен. Ә минең өсөн рухи, мәҙәни байлыҡ мөһимерәк.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТӘГҮР!

# АҠЫЛЛЫ ОТА,

## аҡылһыҙ отола торған мәл

**Һорау: "Бер ай ҡурсаланыуҙа ултырыу тормоштоң төрлө мәлдәре буйынса ниндәй һығымталар яһатты?"**

***Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА, Иглин районы Аҡбирҙе ауылы:*** Биш йылдан ашыу декретта ултырған әсә булараҡ, ҡурсаланыуға күнегеп йонсоманым ул. Эшкә сыҡҡаныма ике ай ҙа тулып өлгөрмәне, ҡабат шул режимға күстем. Ҡурсаланыуҙы мин "Ғаилә отпускыһы" тип атар инем. Сөнки күптәр, йылына бер отпуск алып, уны ла ситтә уҙғарып ҡуя. Ә ситтә үткән ял ул - әүҙем ял. Унда өй йылыһы, өй ҡото юҡ. Унда бер-береңде тыныс ҡына шарттарҙа тыңлап, ишетеп булмай, гел яңы күренештәр, йүгереү-сабыу, донъя күрергә (бәлки, ҡыуырға) өлгөрөп ҡалыу. Шуға күрә, бергәләшеп йыйылып, яҡындар менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп ултыра алмағандар өсөн был осор килешеп ҡалды. Һис юғы, балаларының нисек уҡыуын күрҙеләр, хәлдәрен белделәр, күңелен ишеттеләр.

Кемдәрҙең ғаилә мөнәсәбәттәре яҡшы, аңлашып йәшәй, ләкин яҡындары өсөн ваҡыт таба алмаған - шуларға ҡурсаланыу бәхетле бер миҙгел булды. Ә кемдәрҙең мөнәсәбәттәре киҫкен, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында бер-береһен түҙеп йәшәй (мәҫәлән, балалар хаҡына, финанс бәйлелек һ.б) - улар был осорҙо бик ауыр үткәргәндер, хатта айырылышыуға еткән хәлдәр ҙә барҙыр. Ҡытай карантинды бихисап айырылыуҙар менән сыҡҡан, тиҙәр. Беҙҙә был мәлдә ғаризалар ҡабул ителмәне, ЗАГС һәм судтар ҡәҙимгесә эшләмәне. Һөҙөмтәләр һуңғараҡ күренеүе ихтимал. Шунан сығып ҡарағанда, ҡурсаланыу - рухи таҙарыныу, тормоштоң ысын ҡиммәттәрен аңлау дәүере лә булғандыр. Сөнки донъя артынан ҡыуып, йыш ҡына мәңгелек ҡиммәттәрҙе күрмәйбеҙ. Ураҙа ваҡытының тап ошо мәлгә тура килеүе лә әһәмиәтле күренеш. Өйҙә ятып ураҙа тотоу еңелерәк. Эшкә йөрөгәндәр, айырыуса физик эштәгеләр, асыға, һыуһай, арый.

Күптәр ҡурсаланыу ваҡытында шәхси ҡыҙыҡһыныуҙарын тормошҡа ашырғандыр: ҡул эштәрен атҡарғандыр, яҙаһы эштәрен яҙғандыр, ҡул етмәгән шөғөлдәренә тотонғандыр. Был да күңел эше. Кешенең тәбиғи асылын аса торған, үҙләгән һаҡлаған, шәхесен үҫтергән мөһим фактор!

Был осорҙа күптәр эшен юғалтты, аҡсаһыҙ ҡалды. Вахтовиктар ҡайтарылды, Хөкүмәт уларҙың проблемаһы менән яҡынданыраҡ осрашты. Тимәк, карантиндан һуң ниндәйҙер сәйәси үҙгәрештәр ҙә булыуы ихтимал. Ситтән ир-егеттәребеҙҙе ҡайтарырға, үҙ ресурстарыбыҙ менән эшләргә кәрәклеген төшөндөргән бер боролош булһын ине. Донъя иҡтисадына нефть һәм газдан тыш та файҙа килтереү мөмкинлеген, үҙебеҙ етештергәндән табыш алыу зарурлығын аңлар мәл еткәндер. Ауыл хужалығына, тәбиғи ризыҡҡа ихтыяж артыр тип уйланыла. "Өйҙә ятып" донъя складттары бушаны, күп йыллыҡ аҙыҡтар кәмене, әйләнешкә инер өсөн һәр ил, тәүсиратта, үҙе етештергән продукция менән аяҡҡа баҫасаҡ. Ошо йәһәттән ауыл хужалығы тармағына иғтибар артып, отошло ысулдарҙы эләктереп алыу, дөрөҫ файҙаланыу шарт. Ҡыҫҡаһы, аҡыллы ота, аҡылһыҙ отола торған һынау көтөлә.

***Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА, Өфө ҡалаһы:*** Ҡурсаланыу тиһәк тә, беҙҙең Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы эш туҡтаманы, ситтән тороп эшләнек. Эфирға ике "Портрет" тапшырыуын һәм Еңеү көнөнә 9 ролик әҙерләнек. Шунан инстаграмда көн һайын "Тамыр" тапшырыуҙарының тура эфирҙары бара: шаршамбы көнө "ӘЮЯ ҡаласығы" тапшырыуын һәм шәмбе "Портрет" тапшырыуын эшләйем. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡурсаланыу мәлендә эшем тағы ла күбәйҙе.



Ә инде һығымталарға килгәндә, минеңсә, кешене, тәүсиратта, ҡурҡыу тойғоһо бөтөрә... Мин әле ҡайһы бер осраҡта файҙаға ғына булған, ниндәйҙер кәрәкмәгән аҙым эшләүҙән тыйған зыянһыҙ ҡурҡыу тураһында әйтмәйем. Ә әҙәм балаһының ихтыяр көсөн һындырып, башын аҫҡа эйҙереп, иҙәнгә теҙләндереп, хатта кешелек сифатын юғалттырыу көсөнә эйә ҡурҡыу тойғоһо тураһында һүҙем.

Ныҡ алама нәмә ул - ҡурҡыу тойғоһо. Уның ҡыпһыуырҙай бармаҡтары шул тиклем көслө, алҡымыңдан тотоп ала ла, һис ебәрмәй. Ебәрмәй генәме әле, бөтөрә, баҫа, иҙә, юҡҡа сығара яҙа. Ни өсөн беҙҙең берәй мөһим эш эшләр алдынан, йәки ныҡ ҡурҡыныс янауын тойғанда теҙ быуындарыбыҙ ҡалтырай, телебеҙ көрмәлә, шыбыр тиргә батабыҙ, хәлебеҙ бөтә, аяҡтар тотмаҫ хәлгә килә? Ана шул ҡурҡыу тойғоһона беҙҙең күңел торошо менән тулыһынса идара итеүенә үҙебеҙ үк юл ҡуйғандан. Ошо ғифрит - дәү бер нәмә һеҙҙең булмышығыҙҙы үҙенә буйһондорған икән тип күҙ алдына килтерәйек. Ә ни өсөн буйһондорҙо һуң, сөнки һеҙ уға үҙегеҙ рөхсәт бирҙегеҙ, ҡурҡыу тойғоһоноң һеҙҙең менән идара итә башлауының тәүге секундында уҡ. Һиҙмәнегеҙ түгел, һиҙҙегеҙ өҫтөгөҙгә ябырылып килгән ҡара тулҡындан ҡурҡып ҡапыл ситкә бер секундҡа ғына тайпылғанығыҙҙы. Ә ҡурҡыу тойғоһона һеҙҙе үҙенә буйһондорор өсөн ошо бер секунд та етте. Бына шулай...

Был алама тойғоға тулыһынса ирек бирһәң, ул һине ер менән тигеҙләйәсәк. Шуға ла, ниндәй генә хәлдәр килеп тыуһа ла, ни тиклем ҡурҡыныс янағанда ла, кеше эсендәге һалҡын аҡылдың бер осмотон ғына булһа ла һаҡлап алып ҡалырға тейеш. Сөнки, һәр ваҡыт нимәнәндер, кемдәндер ҡурҡып йәшәү кешене ныҡ бөтөрә, йәшәү көсөн һура. Нисек кенә теләһәк тә, уны үҙгәртә алмаған хәл-тороштар була. Бары тик шул хәлде тыныс ҡына ҡабул итергә һәм ҡулдан килгәнсе үҙебеҙҙе һәм яҡындарыбыҙҙы яҡларға һәм һаҡларға кәрәк.

Бына ошо әлегәсә билдәле булмаған яңы коронавирус та күңелебеҙгә ҡурҡыу тойғоһо һеңдереүе ихтимал, сөнки, ысынлап та, ул күҙгә күренгән дошман түгел, ә аҫтыртын һөжүм итә, ышанысыбыҙҙың саҡ ҡына, бер секундҡа ғына ситкә тайпылғанын көтә, һағалай. Белеүебеҙсә, сирҙең бер яғында кеше үҙе, икенсе яғында табип тора. Беҙ кемдең яғын һайлайбыҙ - шул яҡ еңәсәк. Ә ҡурҡыу - ул еңелеүгә табан бер аҙым. Шуға күрә, бирешмәйек, күңел тыныслығыбыҙҙы һаҡлайыҡ. Ниндәй генә ауыр мәлдәр булмаһын, беҙ балаларыбыҙға, яҡындарыбыҙға, туғандарыбыҙға, бер-беребеҙгә барыбер ҙә кәрәкбеҙ, тигән һығымталар яһаным мин үҙем өсөн.

***Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА, Ишембай районы:*** Ҡурсаланыу тиһәк тә, эш туҡтамай ул. Беҙ һаман да балаларға белем бирергә тырышабыҙ - ситтән тороп уҡытыуҙы дауам итәбеҙ. Уҡыусылар менән күҙгә-күҙ ҡарашып аралашып, уларҙың күңел торошон, дәресте аңлау-аңламауҙарын күҙҙәренән, тын алыштарынан аңлап өйрәнгән уҡытыусы өсөн был хәл-торош - яңы һынау, икеләтә яуаплылыҡ, сөнки онлайн дәрес тормоштағы кисерештәрҙе һәм бәйләнеште бар тулылығында асып бирмәй. Шәхсән миңә уҡыусыларҙың күҙҙәре, улар менән йәнле аралашыу етмәй. Дистанцион уҡытыу - күҙ буяу ғына, бигерәк тә күҙгә күҙ ҡарап һөйләшеп-аралашып өйрәнгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы өсөн ауыр алым. Юҡҡа ғына заманында билдәле ғалим Жәлил Кейекбаев, ситтән тороп уҡыу - уҡыуҙан ситтә тороу, тимәгән инде. Ошо онлайн уҡытыу осоронда минең тәнем - тотҡонлоҡ, мейем торғонлоҡ кисерә - шундай тойғолар солғанышында йәшәйем. Барлыҡ уҡытыусылар ҙа минең кеүектер тип уйлайым. Әммә тотош илдә ҡурсаланыу иғлан ителгәс, ҡалайтаһың - оффлайн аралашыуҙы һағынып йәшәргә тура килә.

***Зөлфиә ИЛҺАМОВА, Өфө ҡалаһы:*** Ярай әле Жуковола шәхси йортобоҙ бар, ҡурсаланыу башланғас та ҡаланан шунда килдек. Баҡса ултыртып, ауыл һауаһын һулап, мәж киләбеҙ. Туғандар менән генә осрашып, аралашҡан юҡ. Шул ваҡыттар һағындыра. Яңыраҡ туғандарымдың береһе шылтыратып: "Апай, бына ҡурсаланыу ғына бөтһөн әле, бер-беребеҙгә сәйгә йөрөшөрбөҙ, йәме. Юҡһа, уныһы юҡ, быныһы юҡ, тегеһе етмәй, быныһы етмәй, тип, гел ҙур ҡунаҡты ғына ҡунаҡҡа һанай инек. Борон бит бер ҙә юҡ тип ҡарап тормағандар, ҡоро сәйгә булһа ла йыйылғандар", - тине. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта халыҡ рухиәтте, кешелеклелекте онотоп, мин-мингә әйләнә башлағайны. Аралашыуҙар, ҡунаҡҡа йөрөшөүҙәр кейемгә, чинға, биләгән вазифаға ҡарап һайлана ине. Ҡурсаланыу кешеләрҙе уйланырға мәжбүр итте. Күптәр был һынауҙан үҙҙәренә етди һығымталар эшләп, ҡиммәттәрен үҙгәртеп сығыр, тип уйлайым. Юҡ икән, тимәк, алда тағы ла һынауҙар булыуы ихтимал.

***✓ Шулай ҙа, тиҙҙән коллектив иммунитет барлыҡҡа килер, тип өмөтләнәбеҙ. Оҙайлы ваҡыт үткән һайын, теләйбеҙме, юҡмы, күберәк кеше вирус менән бәйләнештә була. Иммунитет шулай барлыҡҡа килә лә инде.***



*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

**Иғтибар итһәгеҙ, социаль селтәрҙәрҙә Рәсәйҙә коронавирус таралыуы һәм уның ҡасан иң юғары нөктәһенә етеп, ҡасан кәмеүгә табан барырын Сингапур ғалимдары фаразлауы тураһында мәғлүмәт таралды. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең Башҡортостан ғалимдары ла тотош Рәсәй һәм уның субъекттары өсөн математик анализға ҡоролған фараз проектын эшләне һәм сайт булдырҙы. Был эш менән шөғөлләнеүсе ғалимдарҙың береһе, медицина фәндәре докторы Нәүфәл ЗАҺИҘУЛЛИН менән бөгөн ошо һәм коронавирусҡа ҡағылышлы башҡа мәсьәләләр хаҡында һөйләшәбеҙ.**



# ХАЛЫҠТЫҢ...

## аңлылыҡ кимәле ниндәй?

**▸ Медик булараҡ, бөгөнгө хәлторошто нисек баһалайһығыҙ: халыҡ коронавирустың етдилеген һәм хәүефен тулыһынса аңлаймы, әллә һаман да "миңә теймәй ул" тип уйлаймы?**

- Һәр ваҡыттағыса инде: ниндәйҙер өлөшө аңлай, ҡалған өлөшө һаман да битарафлыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, социаль селтәрҙәрҙә булһынмы, мәҡәләләрҙәме, ҡайһы бер комментарийҙарҙа: "Был бары тик заговор ғына", "Ә бына был академик икенсе төрлө уйлай" һәм башҡа ошоға оҡшаш фекерҙәр бик күп. Үкенескә күрә, аңлау һуңлап килә. Мәҫәлән, барыбыҙҙа ла билдәле Лев Лещенко. Ул да, вирус миңә ҡағылмай, тип тапшырыуҙарҙа ҡатнаша, ҡунаҡҡа йөрөй ине. Үҙе пневмония менән дауаханаға эләккәнсе пандемияны инҡар итте. Шуның кеүек, кеше үҙенең башына төшмәйенсә аңламай шикелле.

**▸ Һеҙ Өфө дәүләт авиация техник университеты ғалимдары менән берлектә вирустың таралыуына математик анализ эшләп, пандемияның Башҡортостанда иң юғары нөктәһе ҡасан буласағын иҫәпләйһегеҙ...**

- Ысынлап та, Өфө дәүләт авиация техник университеты (профессор С. В. Новиков) һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты (профессор В. Н. Новиков) ректорҙары араһында ошо хаҡтағы меморандумға ҡул ҡуйылды һәм төбәктә яңы коронавирус инфекцияһы таралыуҙы фаразлау һәм математик моделләү буйынса проект офисы булдырылды. Авиация университетынан проектҡа доцент, техник фәндәр кандидаты Ирина Лакман етәксселек итә, медицина университеты яғынан - мин. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: математик моделләү - һәр ваҡыт үҙгәреп торған процесс, һәр көн яңы мәғлүмәттәр индерелә, моделдәр үҙгәртелә. Һәм, әйтергә кәрәк, был коммерция проекты түгел, ә һәр кем үҙ теләге менән, ирекмән сифатында эшләй. Беҙҙең бурыс эпидемия пигын билдәләп, сирҙең платоға сығыуын, йәғни сирләүселәрҙең һаны артмай ҙа, кәмемәй ҙә туҡтап торған мәлде билдәләү. Бындай моделдәрҙе беҙ Башҡортостан өсөн генә түгел, Рәсәй, илдең башҡа субъекттары өсөн дә эшләйбеҙ. Иң юғары нөктәне һәр субъект үҙенсә үтәсәк. Пикты беҙ 11-12 майҙа булыр тип фаразлағайныҡ, әле шул кимәлгә еттек. Һуңғы фаразыбыҙ буйынса был ваҡытта сирле пациенттар һаны көнөнә 80-90 (+-10) кеше булырға тейеш ине. Әлеге мәлдә шуны күҙәтәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта, дауаланып, һауығып сығыусылар һаны ла арта бара, тимәк, беҙ ыңғай трендта. Әммә шуныһы бар - плато 1-2 аҙна дауам итәсәк әле. Беҙҙең фараздар менән covid-forecast.ru сайтында танышырға мөмкин, унда һөҙөмтәләр яҙылып бара. Һәм әлегә фараздар 98 (+-) процентҡа тап килә, тайпылыш 2 (+-) процент тәшкил итә.

**▸ Интернетта Сингапур ғалимдарының Рәсәй буйынса үткәргән коронавирустың таралыу фаразын йыш күрергә тура килә. Тәүҙә улар ауырыу пигын бер ваҡытта күрһәтә ине, хәҙер июнгә күсерҙе, хатта һуңғы мәғлүмәттәрендә август тип тә билдәләнәләр. Был фейкмы, әллә улар ҙа үҙ тикшереүен алып барамы?**

- Коронавирустың таралыуы һәм уның менән сирләүселәр буйынса математик модель эшләүе ауыр түгел. Әммә дөрөҫ һәм ысынбарлыҡҡа тап килгәнен эшләү, киреһенсә, еңел түгел. Ул бик күп факторҙарға бәйле, шуға күрә уға аҙна һайын төҙәтеүҙәр индерелә. Мәҫәлән, карантинды ҡәтғиләштерһәләр - күрһәткестәр үҙгәрә, теҙгенде саҡ ҡына бушатһалар - тағы ла үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Шуға күрә, бер тапҡыр өс айға фараз эшләнен дә, сир шуға ярашлы ғына үтәсәк, тип әйтеп булмай.

**▸ Белеүебеҙсә, республикала тап дауалау учреждениелары инфекция сығанағы булып торҙо. Быны алдан күреп, сирҙең Башҡортостан буйынса таралыуын иҫкәртеү мөмкин инеме?**

- Коронавирус бик яуыз һәм үҙен башҡа вирустар кеүек түгел, ә бик агрессив тота. Ул быға тиклем булған концепцияларға тап килмәй тиерлек. Эш шунда - ниндәй генә медицина учреждениеһы булмаһын - ул кешеләр, сирлеләр, бик йыш ковид сире буйынса хәүеф төркөмөнә ингән оло йәштәгеләрҙең күпләп йөрөгән урыны. Моғайын, хаталар ҙа булғандыр, әммә хәл-торош тиҙ үҙгәрҙе һәм уны ул ваҡытта булған инструкциялар сигендә тотоп булмағандыр, күрәһең. Бынан тыш, тестар менән тотҡарлыҡтар булыуы ла үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалмағандыр.

**▸ Күптәр ҡурсаланыуҙа ултырып ялҡты. Байрамдарҙа ла урамда халыҡ күп йөрөнө, күптәре битлекһеҙ булды. Хатта ауылға - ата-әсәләре янына ла ҡайттылар. Аныҡ билдәләре күҙәтелмәгәс, күптәр үҙен яҡшы тойоуға ҡарамаҫтан, вирус йөрөтөүсе булыуы һәм был хаҡта белмәүе лә ихтимал. Бер ни тиклем ваҡыттан сирҙең икенсе тулҡыны күтәрелмәҫме, әллә йәмғиәттә коллектив иммунитет барлыҡҡа килеп өлгөрҙөмө икән?**

- Икенсе тулҡын көтөлмәй, әммә был сирләүселәр ҙә булмаясаҡ тигәнде аңлатмай. Әлбиттә, урындарҙа яңы усаҡтар тоҡанып торасаҡ, бигерәк тә быға тиклем күҙәтелмәгән урындарҙа, мәҫәлән, дауаханаларҙа, хәрби учреждениеларҙа, төрмәләрҙә һ.б. Әммә улар глобаль характерға эйә булмаясаҡ. Вирустың мәкерен һәм унан нимәләр көтөргә икәнен әле тулыһынса берәү ҙә белмәй, шуға күрә уның тап һине урап үтеренә лә ныҡлы ышаныс юҡ.

Шулай ҙа, тиҙҙән коллектив иммунитет барлыҡҡа килер, тип өмөтләнәбеҙ. Оҙайлы ваҡыт үткән һайын, теләйбеҙме, юҡмы, күберәк кеше вирус менән бәйләнештә була. Иммунитет шулай барлыҡҡа килә лә инде. Әгәр популяцияла 30 проценттың теләнә ниндәй ауырыуға иммунитеты булһа, был сир үҙенән-үҙе туҡтай. Әлбиттә, бер тапҡыр ауырыусылар араһында ул ҡабат-ҡабат ҡабатланырға мөмкин, әммә киң күләмдә һәм күпселек араһында түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**12 майҙан илдә һәм Башҡортостанда граждандарға ирекле хәрәкәт итеүгә рөхсәт бирелде. Әммә был, халыҡ әйтмешләй, үҙеңде бәйҙән ысҡынғандай тоторға кәрәк тигәнде аңлатмай. Битлек һәм һаҡланыу режимы һаман да дауам итәсәк әле һәм уның ҡасан тулыһынса ябылыуын берәү ҙә белмәй. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тигән хәҡиҡәтте һәр кем иҫендә тотһон ине. Халыҡтың аңлылығы кимәлен асыҡлауға һынау артабан дауам итә.**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Тикшерелгән фараз тарихи ысынбарлыҡҡа тап килмәй. XIX быуат уртаһында 16 өйәҙҙә типтәрҙәр ҡарамағындағы 916 475 дисәтинә ерҙең 615 696 дисәтинәһе (64,4 %) аҫаба башҡорттарҙыҡы булып, улар менән килешеү нигеҙендә файҙаланылған. 224 902 дисәтинә ҡаҙна ере булһа ла, типтәрҙәрҙең ошо ер менән файҙаланыу тураһында айырым килешеүҙәре булмаған. Ҡалған ерҙәренең бер өлөшөн типтәрҙәр һатып алған, күпмеһелер уларға ҡасандыр урыҫ батшалары тарафынан бирелгән. Был осраҡта уларға кем менән булһа ла килешеү төҙөп, "дәфтәр"гә яҙылыуҙың бер кәрәге лә булмаған, ә улар барыбер типтәр исемен йөрөткән. Тимәк, башҡорт аҫаба биләмәләрендә, ҡаҙна һәм үҙ ерендә йәшәгән припущенниктарҙың ҙур өлөшө бер ниндәй айырмаһыҙ "типтәр" атамаһы менән нарыҡлана башлаған. Күрәһең, хужалыҡ эшмәкәрлегенән етерлек килем алмаған припущенниктарҙың башҡорт сословиеһы мотлаҡ үтәргә тейеш булған бурысҡа көсө етмәгән. И. И. Кирилов типтәр сословиеһы барлыҡҡа килгәнгә тиклем фекер припущенниктар тураһында "в казну ясаку ничего не плачивали", тип яҙа. Тәүге осорҙа типтәрҙәргә еңелерәк түләүҙәр һалынған. XVIII быуаттың 40-сы йылдарына тиклем типтәрҙәр араһында башҡорттарҙың сағыштырмаса күп булыуы фәжәп түгел. Типтәрҙәр үтәргә тейешле бурыс-гәмәлдәр тотороҡланa барып, ауырлаша төшкәс, башҡорт припущенниктары типтәр сословиеһына күсмәй башлай, тип әйтергә була. Шул уҡ ваҡытта типтәрҙәр составында үҙ общинаһынан сығып, элекке сословиелары менән бәйләнеше өҙөлгән татар, мари, удмурт, сыуаш күскенселәре ҡырҡа күбәйә.

Аныҡ статистика мәғлүмәттәре булмауы сәбәпле, башҡорт типтәрҙәренең дөйөм һанын билдәләп булмай. Фәҡирлеккә төшкән элекке башҡорт аҫабалары үҙ общинаһынан һәм сословиеһынан сығып, типтәргә әйләнгән. Уларҙың ҡайһылары, яһаҡ күләме артыҡ ҙур булмағанлыҡтан, бобылдәр рәтенә күскән. Мәҫәлән, документтарҙан XVII быуат аҙағында Ноғай юлы Юрматы ауылы башҡорттары Митросов һәм Йылымовтың бобыль яһағы түләүе билдәле. 1686 йылда Ноғай юлы башҡорто Ҡасаҡов үҙенең ни сәбәптән припущенниктарҙың бобыль төркөмөндә булыуын былай тип аңлатҡан: "Быға тиклем ата-бабаларыбыҙ һәм үҙебеҙ Ҡыпсаҡ олоҫонда булдыҡ. Ә хәҙер фәҡирлек һәм ярлылыҡ арҡаһында бобыль яһағына яҙылғанбыҙ". Ноғай юлы Мең олоҫо башҡорто Атасыҡ Илекәйевтең ата-бабалары күп йылдар буйына бобыль яһағын һыуһар менән түләп килеп, 1688 йылда аҡсалата түләнә торған типтәр яһағына күсә. Был миҫалдар Башҡортостанға ситтән ингән бобыль сословиеһында ерһеҙ башҡорттарҙың да булыуын һәм уларҙың артабан типтәрлеккә күсеүен раҫлай. VIII ревизияға (1834 йыл) бобылдәр этник яҡтан ҡатнаш булған 21 ауылда ғына тороп ҡала: Стәрлетамаҡ өйәҙендә - 693 йән, Өфө өйәҙендә - 122 йән, Уса өйәҙендә 9 йән (ир-ат иҫәбе) теркәлгән.

Типтәрҙәр араһында башҡорттар байтаҡ була. Ҡаҙан юлы Елдәт (йәлдәк) олоҫо башҡорттары Алтыбаев һәм Иленбаев 1679 йылда типтәр яһағы түләгән. Йәлдәк аҫабаларының салйоғоттарҙы килмешәк итеп алыуы билдәле. Шул уҡ олоҫтоң Бирүш ауылында XIX быуат башында 20-нән ашыу башҡорт сығышлы типтәр йәшәгән. Башҡорт типтәрҙәре Бөрө өйәҙенең Гәрәй олоҫонда ла, Троицк өйәҙенең Ҡарағужа ауылында ла теркәлгән. Бөгөлмә өйәҙенең Һары Бикҡол ауылы тотошлайы менән типтәр-башҡорттарҙан торған. Башҡорттарҙың яһаҡ түләүсе татар припущенниктары араһында ла осрап булған. 1795 йылда Ҡотосәс (Имән), Һарысәс Тәкирмән, Һаҡлы Сураш, Иҫке Дөрөш, Мерәҫ, Сәйет, Шыршылы (Шандытамаҡ) һәм Иҫке Һаҡлы ауылдары кешеләре "башҡорттар" иҫәбенән сыға һәм яһаҡты аҡсалата түләүгә яҙыла, йәғни яһаҡлы татарҙар сословиеһына күсә.

**(Дауамы бар).**

***✓ Ауыл осона сығыуға, ҡаршы ел бермә-бер көсәйҙе. Бая килгәндә тап-таҡыр булып ятҡан юлды, урыны-урыны менән һырынты һалып, ҡар ҡаплай ҙа башлаған. Күп тә бармай, юл бөтөнләй юғалды: әйтерһең, ул бөтөнләй булмаған.***

*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ӘСӘ ҠУЙЫНЫНДАҒЫ БАЛА

*(Булған хәл).*



Иртән торғандан Сөйөмбикәнең килке-килке йөрәге сығып аптыратасы. Әллә көн боҙоғо шулай баҫа, әллә күңеле бер-бер хәл һиҙә. "Көн яманы үтә лә китә, бына әҙәм яманы үҙәккә үткәрә", - тине ҡәйнәһе Нәҡиә бер көн. Өҙөп кенә әйтмәһә лә, Сөйөмбикә уның тел төбөн һиҙҙе: бер нисә йыл элек гүр эйәһе булған ҡайныһы, күрәһең, алтын затынан булмаған. Юғиһә, егерме йылдан ашыу бергә ғүмер кисергән ирен шул тиклем рәнйеп иҫкә алмаҫ ине.

Алма ағасынан алыҫ төшмәй, Сөйөмбикәнең матур киләсәккә өмөтләнеп, хыялланып сыҡҡан Сәмиғулланы ла үлтереп маҡтар зат түгел. Шул уҡ ваҡытта уны яман әҙәм, тип тә әйтеп булмай. Аңламаҫһың: көйө килгәндә, ҡәҙимге кеше, еңмеш яғы әйләнеп, бер тиҫкәреләндеме...

- Килен! Өйҙәһеңме, килен? - Көтмәгәндә ишетелгән тауыш урындыҡ ситендә ултырған Сөйөмбикәнең ауыр уйҙарын бүлде. Ул хатта һиҫкәнеп, тертләп китте. Әллә йөрәге лә боҙолоп бара инде?

- Әйҙә, үт, ҡәйнәм, үт, - ҡәйнәһенең тауышын танып, килене уға ҡаршы атланы, - һыуға сығырға тора инем.

- Йомошом ҙур түгел, килен, - тине Сөйөмбикәнең һүҙҙәрен үҙенсә аңлаған ҡәйнә. - Күп ваҡытыңды алмам. Хатип ҡайнағаң киске ашҡа әйткәйне, шул сәләмде еткерергә тип ингәйнем.

Тумалаҡ кәүҙәле, һәләк сос, хәрәкәтсән Нәҡиә апай хәбәрҙе ярып һалып торһа ла, бәғзе бер иләк ауыҙҙар ише, алағайымға ләстит һатып, ғәйбәт һөйләп йөрөмәҫ. Айырыуса килененә ҡарата кешелекле, кеселекле ул. Туғанлашыуҙың тәүге көндәренән уны үҙ балаһы һымаҡ күрҙе, алдында һауаланып йөрөмәне. Киреһенсә, Сөйөмбикәнең итәғәтлегенә ҡыуанып бөтә алмай. Баҫҡан ерендә ут сығара тип, тап Нәҡиә һымаҡтар хаҡында әйтелгәндер ул. Өҫтәүенә, ҡулынан килмәгән кәсеп юҡ. Килен ҡәйнә буҫағаһынан: Сөйөмбикә лә, ҡәйнәһенә оҡшап, мәшәҡәттәрҙән һис ҡурҡып тормай. Уның, эшем юҡ, тип ҡул ҡаушырып ултырғаны булмаҫ. Бөткәнме ни ауыл ерендә эш! Намыҫы юҡтарҙың, тере ялҡауҙарҙың ғына эше юҡ. Уларҙың донъяһы һәр саҡ теүәл. Донъялары емерелеп ятһа ла.

Өс бала әсәһе булыуға ҡарамаҫтан, сибәрлеген ташламаған, киреһенсә, сабыйҙарын яҡты донъяға килтергән һайын һылыулана, ымһындырғысыраҡ була барған аҡ йөҙлө, асыҡ-зәңгәр күҙле, ҡыйғас ҡара ҡашлы илгәҙәк Сөйөмбикә ҡәйнәһенең өҙөлөп тороу сәбәбен ҡайсаҡ үҙенсә гөман итә: тимәк, ҡәйнә кеше улының бәйелһеҙ холҡонан уңайһыҙланып, килененә еңеллек теләй, уның алдында өнһөҙ генә ғәфү үтенә. Тик был турала Нәҡиә бер ваҡытта ла ауыҙынан сығарып һүҙ әйткәне юҡ. Сөйөмбикә лә үҙ сиратында ҡәйнәһен, балаларының яратҡан өләсәһен, бар хәленсә хөрмәт итергә, уға ҡарата ижтиһад ҡылырға, һәр иple килен шикелле, ҡәйнәһенә ярарға тырыша. Шөкөр, күпме бергә йәшәп тә, әле бер тапҡыр ҙа һүҙгә килешкәндәре, бер-береһен яманлап йөрөгәндәре юҡ, иншалла.

Шулай ҙа ҡайнағаһы ни уйлап бынауы сасҡау һыуыҡта, өҫтәүенә, буран сығырға торғанда ҡунаҡ йыйырға булып китте икән? Күрәһең, башҡа уңай мәлен тапмағандыр. Ул да бит, баш инженер булараҡ, эш тип көнө-төнө саба. Бараһы ер алыҫ түгел түгеллеген, урта хәл атҡа бер сәғәтлек юл. Шулай ҙа ялан ерҙең бураны шөбһәләндерә. Бер тапҡыр булһа ла юлда ҡалып, үҙ елкәһендә татып ҡарағандар ғына белә уны.

- Үҙебеҙ нисек тә итер инек, ҡәйнәм, балалар бар бит әле. Улар менән ҡышҡы юлға сығыуы. - Сөйөмбикә баҙнатһыҙ ғына баш тартмаҡсы итте. -Танаҡайҙың да көнө еткән.

- Ер аяғы ер башына китеп бармайбыҙ әле, килен. Йылыраҡ итеп кейенербеҙ, толоп алырбыҙ. Ә сабыйың өсөн борсолма, - Нәҡиә сәңгелдәктә ятҡан балаға эйәк атты. - Бирешмәҫ. Әсә ҡуйынында бала үлмәй ул. Бармаһаҡ, ҡайнағаңдың хәтере ҡалыр.

- Әллә инде...

"Әллә инде, ҡәйнәм, Сәмиғулланың ауыҙына хәмер эләкһә, холҡон үҙең беләһең", тип әйтмәксе ине Сөйөмбикә. Әйтә алманы, эскерһеҙ ҡәйнәһенең күңелен уйланы.

Эшкә егәрле, дәү кәүҙәле бөтмөр Сәмиғулла былай насар кеше түгел. Насар кеше тип әйтергә тел әйләнмәй. Айныҡ сағында унан да йыуаш, унан да күндәм ир юҡ. Уның һымаҡтар хаҡында, ғәҙәттә, "быҙау" тиҙәр. Ана шул быҙау аҙ ғына араҡы ҡабып, ҡаны ҡыҙып алдымы, күҙ алдында ер сапсып, ажғырып торған бүгәй үгеҙгә әйләнә лә ҡуя. Аптыраһың, бер-ике йотом шыйыҡса шул тиклем дә үҙгәртә алыр икән әҙәмде. Бер туйҙа ҡоҙасалары йығылып ятып үпкәләй-үпкәләй ҡыҫтағастары, уларҙың һүҙен йыҡмайым тип, иблескә әүерелдерер аҫтыртын эсемлекте Сөйөмбикә лә үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр татып ҡараны. Эсте лә, ут ише көмөшкә шунда уҡ тын юлын бөрөп, тамағын ҡурып алыуҙан сәсәп үлә яҙҙы. Шунан һуң уны эсеү түгел, тотоп та ҡарамай. Ныҡ биҙҙе. Бер уртлам һаҫыҡ көмөшкә хаҡына йәнен бирергә риза ир заттарына ҡарап хайран ҡалып аптырай: ни йәмен, ни тәмен табаларҙыр шул шайтан һыуының? Ә балалар өлөшөнә инеп, шул сәрхүштәрҙең һуңғы тиненә ҡәҙәр һыпырып алып ултырған "кәпәстәр" ни уйлайҙыр? Нисек намыҫтары етеп, кеше күҙенә ҡарайҙарҙыр?

...Хужа менән хужабикә ҡунаҡтарын яҡты сырай, йылы һүҙ менән ҡаршы алды, аяғөҫтө тороп һыйланы. Уйын-көлкөһө лә, һый-хөрмәте лә мул ине. Бер аҙға ғына булһа ла ығы-зығылы донъя мәшәҡәттәренән арынып, күңел асып ултырҙылар. Сөйөмбикәнең борсолоп икеләнеүҙәре юш килде: ауыҙына араҡы тейгән Сәмиғулланың теле көрмәлеп, һөйләгәндәре торған һайын мәғәнәһеҙерәк була барҙы. Эт тә ашамаҫлыҡ һүҙҙәр йышыраҡ ишетелде. Ире өсөн йөҙө ҡыҙарып ултырған Сөйөмбикә түҙмәне:

- Ҡәйнәм, Сәмиғҡа әйт әле, ныҡлап иҫереп китмәҫ элек ҡайтайыҡ инде, - тип ялбарғандай итте.

Шыбырлап тигәндәй әйтелгән һүҙҙәрҙе ҡолаҡ сите менән ишетеп ҡалған Сәмиғулла янъял ҡуптарҙы.

- Көт, хәҙер алып ҡайтырмын! - Ул ултырған еренән һауыт-һаба шалтыратып, өҫтәлгә һуҡты. - Ҡәк мин ағайыма килһәм, тиҙерәк апҡайтыу яғын ҡайыраһың! Үҙеңә етмәгән, әсәйҙе ҡотортоп ултыраһың.

- Һуң, Сәмиғ, Алаҡай беренсегә быҙауларға ҡалды, буран да көсәйергә...

- Бар, үҙең ҡайт, инәңде... - Сәмиғулла енләнеп китте. - Минең туғандар һинең өсөн кеше түгел, үҙ туғаның ғына туған! Ғүмерең буйы минең ағай-энене яратманың!

- Ҡуй, улым, юҡты һөйләмә, - Нәҡиә сикһеҙ ярһып киткән улын тынысландырырға маташып ҡараны. - Килен, шөкөр, һәйбәт. Уға һүҙ тейҙерәһе булма.

Ә ағаһы менән ҡәйенеңгәһе әйткәнде Сәмиғулла ишетергә лә теләмәне.

- Һәйбәт булғас, ана бара юлы! - Ул сәбәләнеп, ҡулын һелтәне. - Уйнашы көтәлер, шәт! - тип, нахаҡ ғәйеп тағып, бар асыуына ҡысҡырына башланы.

- Сәмиғ, ни һөйләйһең, яҙыҡтан ҡурҡ! - Быңдайҙы көтмәгән Сөйөмбикә, асырғанып, ике усы менән битен ҡапланы ла, ситке өйгә йүгереп сығып китте.

Мәжлестең йәме ҡасты.

- Эй, Хоҙайым, бер ҡунаҡта кеше һымаҡ ултырырға насип булырмы икән? - тип һыҡтаны Сөйөмбикә. - Ҡайнаға, егеп бир атты. Малайҙар ҡалыр, ҡыҙым менән мин ҡайтайыҡ. Үпкәләмә, риза булып ҡал. Хөрмәтең өсөн рәхмәт.

- Бар, бар! Суҡынып кит, минә тиһә. Һин тиҫкәрене берәү ҙә еңә алмаҫ. Артыңды бирһәң, биререһең, һүҙеңде бирмәҫһең, - тамам тилергән "бүгәй" торған һайын оятһыҙлана барҙы.

Инде шөйлә көсәйергә өлгөргән ел сымдарҙы бәүелдереп, бағана баштарында геүләй, кәртә-ҡура араһында нимәнелер шаҡылдатып уйнай, мөрйә эсенә инеп олоп сығырға ла ваҡытын таба. Күптән түгел генә салт аяҙ торған күк йөҙөндә, бер-береһен уҙырға тырышып, хәтәр дауыл хәбәрселәре - шыйыҡ, ялбыр болоттар ҡайҙалыр ашыға. Уларына ҡаршы,төнгө донъяны үҙ ҡарамағына алыуҙан ҡәнәғәт ҡалған, тулы ай йөҙә. "Төн ҡараңғы түгел, нисек тә ҡайтып етермен әле. - Һалҡындан тынысланырға өлгөргән Сөйөмбикәнең, ер юлдашына ҡарап, эсенә йылы йүгерҙе, атты ҡабаландыра төштө. - Эт урынына талаңып ултырғансы. Иртәнгегә элекке хәленә ҡайта торған әле..."

Ауыл осона сығыуға, ҡаршы ел бермә-бер көсәйҙе. Бая килгәндә тап-таҡыр булып ятҡан юлды, урыны-урыны менән һырынты һалып, ҡар ҡаплай ҙа башлаған. Күп тә бармай, юл бөтөнләй юғалды: әйтерһең, ул бөтөнләй булмаған, ҡар менән һыланып тигеҙләнеп бөткән. Туры ат ҡаты ерҙе тояҡтары менән генә тойоп бара. Хәлһеҙләнеп, арып ҡуймаһа, һиҙгер хайуан юлдан яҙлыҡмаҫ та ул, ел ыңғайына башы һуҡҡан яҡҡа сығып китмәҫ. Ошоно яҡшы белгән Сөйөмбикә тынысҡына йоҡомһорап килә. Толобоноң яғаһын ҡайыра, ынтыла биреп алға ҡарамаҡсы итә, сикәләрен кинәт өтөп алған әсе елдән, күҙҙәренә һибелгән ҡарлы боҙ бөртөксәләренән ҡасып, толоп эсенә йәһәт кенә кире боҫорға мәжбүр була. Шулай ыжғыр бит ул ялан еле.

Сөйөмбикә атты үҙ яйына ҡуйҙы. "Ялҡау ат та ҡайтыу яғына етеҙ була", тип, иҙерәп, йәнһеҙ йоҡлаған балаһын ҡуйынына ҡыҫа биреп, сана төбөнә ятты. Тәүге тапҡыр түгел бит, элек тә ошолай ҡайтҡаны бар. Ана, юл күрһәтеп торған һалдаттар кеүек, электр бағаналары теҙелеп киткән. Шуларҙан күҙ яҙлыҡтырмағанда.

Күп тә үтмәне, буран күҙ асҡыһыҙ дауылға әйләнде. Киҫкен һауа тулҡындары ажарланып, ҡарҙы саң-туҙан урынына уйнатып, һауаға сойорғотто, соҡор, уйпат урындарға илтеп тултырҙы, сананы әйләндереп ташларҙай булып ҡыланды. Бына ул ысын ялан бураны! "Йә, Раббым! Үҙеңдән - ярҙам! Балаҡайҙарым хаҡына имен-аман ғына ҡайтып етергә яҙһын", - тип ялбарҙы Сөйөмбикә. Ҡуйынындағы йылы йомғаҡты күкрәгенә нығыраҡ ҡыҫты. Бер аҙ барғас, толопто ҡалҡыта биреп, юл ситендәге бағаналарҙы эҙләне. Әммә улар күренмәй ине: аҡ ғәрәсәт йоттомо ни, сымдары геүләй, үҙҙәре юҡ. Юлһыҙ ерҙән барған ат аҙымдарын һиҙелерлек аҡрынайтты. Бер-ике тапҡыр туҡталып, башын сайҡай-сайҡай ушылдап, тын алып торҙо. Башта Сөйөмбикә Турыны ҡыуып ашыҡтырманы. Ә инде уныһы өсөнсөгә туҡтап, был юлы оҙаҡ ҡына ҡуҙғалмағас, түҙмәне:

- На, Турыҡай! Әйҙә, малҡай, әйҙә, йәнем, - тип инәлә биреп, дилбегә ҡаҡты. - Тиҙерәк алып ҡайтып еткерә күр, аҡыллым.

Ҡарт алаша, сбруй ҡайыштарын шығырлатып, йылдам ғына ҡуҙғалып китеүгә ҡарамаҫтан, оҙаҡ бара алманы, йәнә туҡталып ҡалды. Ҡорһағына етеп ятҡан тығыҙ ҡарҙы йырып йөҙөп барыуы еңел түгел уға. Ат тигәс тә.

Сөйөмбикәнең йөрәген өшөтөп, күңеленә беренсе шом йүгерҙе: Турыҡай арып ҡуймағайы. Ошо ҡурҡыныс уйҙан ул һикереп тора һалды. Тәүҙә атына инәлеп-ялбарып өндәште, аҙаҡ, бар асыуына дилбегә осо менән һуҡҡыслап ҡараны, әммә хәлдән тайған мал ҡуҙғалырға теләмәне лә. Артына боролоп, кисер, хужабикәм, атлар әмәл ҡалманы тигәндәй, тик торҙо ла ҡуйҙы. Юғалып ҡалып, төшөңкөлөккә бирелә башлаған ҡатын күҙ йәштәренә ирек бирҙе - сеңләп илап ебәрҙе. Ошо мәл, уның аяныслы хәлен аңлағандай, Туры кинәт ырғылып, алға һикерҙе. Унан тағы, тағы. Абайламай ултырған Сөйөмбикә сананан саҡ осоп ҡалманы, ярай әле, терәккә тотоноп өлгөрҙө. Шулай ҙа, ҡар менән яртылаш күмелгән ауыр сананы һөйрәп, ат ыратып китә алманы, тағы шып туҡтаны. Сөйөмбикәнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте: үҙе, ярай, нисек тә итер, быңа сабыйы.

Ҡатын, ҡулы менән битен ышыҡлап, алға ҡараны. Һырынтыға сумған атының һырты ғына күренә. Ул, ахыры, абайламай, яҙғыһын йылға үҙәненән сығып йыуған йырынға килеп тарыған. Яҙмышына буйһонғандай, ул хәҙер тыпырсынмай ҙа, алға ынтылырға ла тырышмай. Әле өмөтөн өҙмәгән Сөйөмбикә, бар ихтыяр көсөн туплап, сананан төштө, бата-сума ҡар кисеп барып, теҙгенгә йәбеште, атының муйынынан ҡосаҡлап һыҡтаны, уны

*✓ Юлһыҙ ерҙән тәрән ҡар йырып, ныҡ ҡабаланып килеп манма тиргә батҡан Сәмиғулла ихатаһында моңһоҙ ғына бесән кертелдәтеп торған Турыһын күрергә өмөтләнеп, ҡапҡаны асты... Әммә ат юҡ ине.*



алға әйҙәп ҡараны. Турыҡай ҡаҡшаған ҡеүәтен йыйып, алға ырғылмаҡсы итте лә, хәле мөшкөлләнеүҙән ҡабырғаһына ауа башланы. Ауған ыңғайға ҡамыт ҡапталы муйынын бөрөп алыуҙан һығылып, хырылдарға тотондо. Бындай осраҡта ни эшләргә белгән Сөйөмбикә, һөрмәнеп, тамаҡбауҙың осон эҙләп тапты, уны сисеп ебәрҙе. Хәлһеҙләнгән ат иркенләп тын алды. Ҡото алынған ҡатын, быуындары бушап, сана тере-генә ултырҙы. Атын ҡотҡарҙы ла ул.

- Әйҙә инде, Турыҡайым, аҡыллым, һәләк итә күрмә беҙҙе. Бар өмөт һиндә генә! - тип сенләне ҡото алынған ҡатын. Күҙ йәштәренә быуыла-быуыла тамаҡ бауҙы яңынан тартып бәйләп ҡуйҙы. - Әйҙә, күп тә ҡалмағандыр инде ҡайтып етеүгә.

Ат урынынан ҡуҙғалманы. Ниндәй хәлгә тарыуын әле килеп асыҡ аңлаған Сөйөмбикәнең йөрәге ярыла яҙҙы. Шулай уҡ бөтәһе лә бөттөмө икән уның өсөн? Ошо ҡәһәрле йырын эсенә килеп үлер өсөн йәшәнеме ул? Балаҡайҙарынғәзиздәрен йәшәй ҙә башламаҫ элек етем итер өсөн таптымы? Ниндәй гонаһтарым өсөн ебәрҙең был язаңды, уф, Аллам!

Сөйөмбикә ҡулдарын ауызына ҡуйып ҡысҡырып ҡараны, әммә тәнде генә түгел, йәнде өшөткөс үкереү уның мөсһөҙ тауышын шунда уҡ йотоп та ҡуйҙы. Үҙ тауышы үҙенә өҙөкйыртыҡ ишетелеп ҡалған һымаҡ булды. Алышыныр сиккә еткән ҡатын күпме генә ҡолаҡ һалып ултырһа ла, дауыл гөүләүенән башҡа ауаз ишетә алманы. Ахыры, өмөтһеҙлектән тамам ҡаушап сикһеҙлеккә бирелеүҙән, сабырлыҙланып шыңшый башлаған сабыйы янына йомарланды.

- Ни булды, бәпкәм? Өшөйһөңмө әллә? - Әсә балаһын тыны менән һурып алырҙай булып өҙгөләнде. - Бирешмә, ҡыҙым. Ҡыҙҙың йәне ҡырҡ, хәҙер ҡайтып еткәс, мейес тоҡандырып ебәрербеҙ, танаҡайҙы тәрбиәләрбеҙ.

Сөйөмбикә балаһын да, үҙен дә йыуатҡандай, шулай һөйләнде лә һөйләнде, ә күҙ йәштәре субырлап аҡты. Зирәк ҡатын һиҙә: тештәрен ырҙайтып, әжәл яҡынлаша. Ана, инде уның һалҡын һулышы ла һиҙелә. Ғазапламай ғына алһаң ине йәнемде.

- Хәҙер, бәпесем, хәҙер, аҙға ғына түҙһәң. - Сөйөмбикә ярһып иларға тотонған ҡыҙының арҡаһынан ҡағып тынысландырырға тырыша. Шунан, һуңғы иҫен туплап, өҫтөндәге пальтоһын систе, сабыйын шуға төрҙө лә, үҙе ҡулдәксән килеш толопҡа бөркәнеп, балаға һыйынды, ҡалтыранған ҡулдары менән уның ауыҙына имсәк ҡаптырҙы.

- Бына, матурым, һинә инде йылы, ә мин нисек тә түҙермен. Әсә ҡуйынында бала үлмәй, ти бит өләсәйең, оло кеше белмәй әйтмәҫ, - Сөйөмбикә буҫлығыуҙан тыйыла алмай, ҡыҙын ҡосаҡланы. - Исмаһам, һин йәшәһәң ине, балаҡайғынам.

...Күпмелер ваҡыттан Сөйөмбикә күҙҙәрен асты. Һи-и, буран тынған бит! Бар ғәләмде шомло тынлыҡ баҫып алған. Ҡатып ҡалған зәп-зәңгәр һауала ҡояш ялтлап тора. Тик ул нишләптер һис йылытмайсы. Сөйөмбикә әкрен генә ҡалҡынды, ҡарҙы шығырлата баҫып, ҡайҙалыр, билдәһеҙлеккә атланы. Уға ҡаршы ҡыҙы йүгерә. Ни арала шулай үҫеп, буй еткергән тиһең! Йүгәктә ятыуына әле генә һымаҡ, ә инде еткән ҡыҙ булған. Ҡыҙы артынан тағы кемдәрҙер эйәргән. Бәй, әсәһе, ҡәйнәһе, Сәмиғ. Эй, Сәмиғулла әсмәгән сағында һәләк матур кешеһең дә һуң.

Ана, ҡарлы тауҙар артындағы офоҡ ситенән ҙур аҡ йондоҙ ҡутәрелде. Көпә-көндөҙ яҡтырып торған ниндәй йондоҙҙор ул? Күтәрелде лә, әкрен генә уларға яҡынлаша башланы. Яҡынлашҡан һайын сағылалана, нығыраҡ ҡыҙҙыра. Сәйер, йондоҙ ҡояштың үҙен ҡаплай бара. Уның янында ҡояш һүнә, тоноҡлана. Бына бер мәл йондоҙҙоң ҡайнар һулышы сикәләрҙе өтөп алды, аяҡ-ҡулдарға ҡағылып үтте. Сөйөмбикәгә рәхәт. Ул инде йылынды, бар донъяһын онотоп, иҙерәп йоҡлап бара.

* * *

Буран таңға кинәт тынды. Әйтерһең дә, ул бөтөнләй булмаған: бүре булып олоп, йорт-ҡаралтыны теткеселәп ҡоторонмаған, ҡарҙы борхолатып, асыҡ урындарҙан ышыҡҡа күсереп һалмаған. Ә, һалған икән. Ана, ҡойма тиңлек көрттәр, урамда урыны-урыны менән әҙәм бейеклеге булып ятҡан һырынтылар был тирәнән күптән түгел дауыллы ғәрәсәт үтеүе хаҡында һөйләй. Әле килеп шылт иткән дә тауыш юҡ.

Ошо шомло тынлыҡты тынлап ята торғас, Нәкиә апайҙың күңелен аңлайышһыҙ һағыш баҫып алды, тиктомалға яман эсе бошоп китте. Бошоноу сәбәбен ул шундуҡ аңланы: айвайҙарына ҡарамай, сабыйын алып, килене төнгә ҡаршы ҡайтып киткәйне. Нисек кенә барып еттеләр икән? Етә алдылармы?.. Ҡурҡыныс уйҙан Нәкиәнең тәне буйлап һалҡын ағым үтеп китте, фажиғә һиҙеп, йөрәге сәнсеп ҡуйҙы.

- Сәмиғулла, балам, тора һал.

- Нәкиә, асырғаныпт, бер ни белмәй иҙәндә йоҡлап ятҡан улын уятты. - Килен бит юлға сыҡҡайны. Ҡайтып еттеме? Нисек ҡайтып етте икән?

Сәмиғулла шешенгән күҙҙәрен ыуа-ыуа тороп ултырҙы, мәғәнәһеҙ ҡарашын әсәһенә төбәне.

- Нишләп ҡайтарҙығыҙ һуң? - тип, ғәйепте башҡаларҙан эҙләмәксе итте.

- Ah, ah, үҙең ҡайтып кит, тинең бит. Эттән алып, этҡә һалып һүктең, - әсәһе үпкә белдереп иламһыраны. - Эсеп алһаң, холҡоң бармы...

Сәмиғулла инде үкереп торған бүгәй түгел. Бөгөн ул аяҡланырға ла өлгөрмәгән быҙау. Уға хәҙер ни әйтһәң дә бата. Барыһын да күтәрәсәк. Ир өндәшмәне, иҙерәшеп йоҡлап ятҡан малайҙарына ҡарап, иҫәңгерәп торҙо.

Иҫерек баш менән ниндәй ахмаҡлыҡ ҡылғанын әле килеп аңлаған Сәмиғулла, үкенесенән алйыр сиккә етеп, йәйәүләп, йүгерә-атлай ҡайтырға сыҡты. Юлда ул тирә-яҡты ҡарашы менән ентекләп байҡай барҙы. Ауылға етәрәк һаҙ буйында ҡарайып күренгән сәйер нөктәгә теклəп торғандан һуң, ул-был һиҙелмәгәс, тыныслана төштө. Шулай ҙа йөрәк түренә инеп ояларға өлгөргән шом тулыһынса таралып бөтмәне, килке-килке һулҡылдап, бәгерен өйкәп тик торҙо.

Юлһыҙ ерҙән тәрән ҡар йырып, ныҡ ҡабаланып килеп манма тиргә батҡан Сәмиғулла ихатаһында моңһоҙ ғына бесән кертелдәтеп торған Турыһын күрергә өмөтләнеп, ҡапҡаны асты... Әммә ат юҡ ине. Ихата эсендәге келән ҡар өҫтөнән хатта сысҡан да юрғалап уҙырға өлгөрмәгән. Ҡураһы әллә ҡасандан кеше йәшәмәгән ташландыҡ донъяға оҡшап тора. Сәмиғулланың йөрәге жыу итеп ҡалды. Йүгереп тигәндәй, мал ояһына барып инде. Үлем ғазабынан күҙҙәре шар булып асылып, теле һәленеп төшкән йәнһеҙ тананы күреп, уның ҡото осто. Ир бәлтерәп төштө.

Бөтөнләй ебеп-ҡаушап ҡалһа ла, күршеләргә барып, хәлде һөйләп бирерлек көс таба алды Сәмиғулла. Бригадир шунда уҡ кешеләрҙе күтәрҙе, милицияға хәбәр итте. Күп тә үтмәҫтән, ҙур булмаған ауыл умарта ише ҡайнарға тотондо.

Яҫы саңғылар таҡҡан өс һунарсы өҫтәренә барып сыҡҡанда ҡорһағына ятҡан туры алашаның һырынты аҫтынан башы ғына күренеп тора ине. Ауылға етергә ярты саҡрым ер ҡалған булған! Ә сана ҡайҙа? Сөйөмбикә егеүле атта сығып киткән тигәйнеләр бит. Ни уйларға, эште ниҙән башларға белмәй, аптырашып торғанда, һунарсылар ҡолағына, ер аҫтынан ишетелгәндәй, бала илаған тауыш салынып ҡалды. Ирҙәр, һиҫкәнеп, бер-береһенә ҡараштылар, барыһын да һүҙһеҙ аңлап, ҡайһыһы саңғы осо, ҡайһыһы ҡулы менән һылашып ҡатҡан ҡарҙы аҡтарырға тотондо. Күп тә үтмәҫтән, ирҙәрҙең береһе быуылып илаған сабыйҙы ҡулына алды. Сабыйға бер ни ҙә булмаған. Ҡар ҡатламы аҫтында ул һыуыҡҡа бирешмәгән. Ә әсәһе. Сөйөмбикәнең аяҡ-ҡулы боҙ булып ҡатҡан, ә ҡуйыны әле йылы килеш. Ғәжәп! Әсә тәненең бар йылыны, сабый ғүмерен ҡурсалап ҡалыр өсөн, бер урынға - уның ҡуйынына йыйылғанмы әллә? Әсәй үҙе өшөп һәләк булһа ла, уның йөрәге, аңы аҡтыҡ һулышына ҡәҙәр бала ғүмере өсөн көрәшкән. Көрәшкән һәм еңеп сыҡҡан: ун айлыҡ ҡыҙ мөғжизә менән тере ҡалған.

Сөйөмбикәнең шаҡырайып туңған кәүҙәһен һунарсылар артынса ауылдан килеп еткән трактор санаһына һалып алып ҡайттылар. Атай ҡулын һиҙеп, тынысланырға өлгөргән ҡыҙын ҡосаҡлаған Сәмиғулла, аңҡытинҡе булып, алышыныр хәлгә ҡалып, кабинала ултыра. Соҡорло урында ҡапыл һелкенеүҙән уның көпәсе осоп төштө. Тракторсы аптырауҙан ауыҙын асып, Сәмиғуллаға текәлде. Ирҙең кисә генә дегет ише йылҡылдап торған ҡара сәстәре әле килеп ап-аҡ ине. Сөйөмбикәнең ғүмерен ҡыйған ҡырау Сәмиғулланың башына ғына ҡағылып уҙҙы.

## ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

### Нәфсе

**38.** Дәрт һәм Иблис. Иблисте Аллаһы Тәғәләнең асыуы тип тә атайҙар. Иблис гонаһ ҡылырға теләгән кешенең күңелендә барлыҡҡа килә. Иблис дәрт барлыҡҡа килеү менән уға йәбешә һәм уны үҙенсә биҙәп, йөрәккә күрһәтә. Бындай дәртте ымһыныу тип тә атайҙар.

**39.** Дәрткә ҡаршы тороу. Суфыйҙар дәртте ике төргә бүлеп йөрөтә: нәфсе дәрте һәм Илаһи мөхәббәт. Илаһи мөхәббәткә эйә кешеләрҙең дәрте самаһыҙ була. Дәрткә баш булмау кешене уның ҡоло итә. Аллаһы Тәғәләгә яҡын булырға теләгән кеше үҙенең теләк-дәртенә ҡаршы барырға тейеш. Тауҙы бармаҡ менән аҡтарып, ер менән тигеҙләү үҙ теләк-дәртендә һүндереүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк.

**40.** Көслө теләк. Енси теләк. Шәһүәт. Көслө теләккә енси теләк, хакимлыҡ статусын күтәреүгә, байлыҡты арттырыуға ынтылыш инә. Руми көслө теләккә ҡаршы интеллект тора, тигән. Көслө теләккә күреү, ишетеү, тойоу ағзалары булышлыҡ итә. Тик Аллаһы Тәғәләгә тулыһынса буйһонған кеше генә көслө теләген еңә ала.

**41.** Нәфсе өҫтөнән контроль. "Кешеләрҙе еңгән көслө түгел, үҙ нәфсеһен еңгән көслө", тип әйтелә бер хәҙистә. "Нәфсеһенә баш була алмаған - уға, нәфсеһен еңә алған кешеләргә хеҙмәт итә", тиелә икенсе бер хәҙистә.

**42.** Нәфсенең юҡҡа сығыуы. Илаһилыҡ булмышында йәшәгән генә нәфсенең мәғәнәһеҙлеген аңлай.

**43.** Нәфсегә ҡаршы тороу. Нәфсене тәрбиәләүҙең бер ысулы - уның теләктәрен ҡаршы тороу. Әгәр ҙә беҙ ҡаршы тороу ысулын һайлайбыҙ икән, нәфсегә башҡа нәмәне ҡаршы ҡуйырға ярамай, сөнки ул башҡа нәмә үҙе лә нәфсе булып, кире үҙенә әйләнеп ҡайтасаҡ. "Әгәр ҙә һин һәр осраҡта, һәр ваҡиғала хатта һинең өсөн рөхсәт ителгән нәфсеңде тыймаһаң, уны тәнҡитләмәһәң, ул һине һәр саҡ алдатып йөрөтәсәк. Әгәр ҙә һин нәфсеңә риза булһаң, һәләк буласаҡһың", - тигән Әбү Хафс Хаддад.

**44.** Нәфсе менән һуғыш. Суфыйҙар лөғәтендә "мөжәһит" һүҙе "нәфсе менән һуғыш" тигәнде аңлата. Суфыйсылыҡ юлына баҫыусы кеше үҙ нәфсеһе менән һуғыш юлын үтергә бурыслы. "Нәфсегә ҡаршы һуғышыусы яугир Аллаһы Тәғәлә өсөн һуғышыусы, иң бөйөк һуғыш - нәфсегә ҡаршы һуғыш", - ти Мөхәммәт бәйғәмбәр. Ер йөҙөндәге кешеләр үҙ нәфселәренә ҡаршы һуғыш асып, уны еңеп сыҡһа, һуғыштар бөтөнләй юҡҡа сығыр ине, тиҙәр суфыйҙар. Сахл ибн Әбдиллах Тостари нәфсе менән һуғышты рухи һуғышҡа тиңләй: "Рухи һуғыш - Аллаһы Тәғәлә танытмаһын алыу", - ти. Ибраһим Әҙһәм "Кеше алты ҡағиҙәне теүәл үтәһә генә изгелек баҫҡысына етә" ти:

- муллыҡтан ҡәнәғәтлек эҙләмә, ә үҙ-үҙенә талапсан бул;
- үҙең хаҡында яҡшы уйлама, ә үҙеңде башҡаларҙан түбән ҡуй;
- үҙеңде бер ниндәй ихтыяжһыҙ йәшәйем, тип уйлама, һәр саҡ мохтажлыҡ той;
- туйып кикермә, ас йөрө;
- йоҡлама, һәр саҡ уяу бул;
- мәңге йәшәйем, тип өмөтләнмә, үлемеңә әҙерлән.

Рухи һуғыш нәфсе өсөн ҡулай булған ҡылыҡтарҙан баш тартыуҙы аңлата. Дәрт атың сығынлаһа, тыйыу теҙгенеңде ҡаты тот.

**45.** Нәфсене үлтереү. Нәфсене үлтереү өсөн уның холҡон таҙартыу талап ителә. Ә инде холҡон таҙартыу өсөн уның тәбиғәтенә хас теләктәрен юҡ итергә кәрәк. Суфыйҙарҙы әҙерләүсе имамдар шәкерттәренә үҙҙәренә кәрәк саҡта ғына йоҡларға һәм ашарға, нәфсе өсөн хас булмаған ғәмәлдәр башҡарырға ҡушҡандар.

**46.** Нәфсе юҡ итеү. Нәфсе кешенең иң аҫҡы үҫеш баҫҡыс күренеше булараҡ, һәр саҡ тере. Шуға күрә суфыйҙар "нәфсеһеҙ кеше" тигән төшөнсәне "уның нәфсеһе ыңғай кеше сифаттарына үҙгәртелде" тип аңлай. "Ысын тормош нәфсене юҡ иткәс, йөрәк терелгәс башлана, нәфсене юҡ итмәйенсә, ысынбарлыҡ килмәй", - тигән Әбү Бәкер Сайдалани.

**47.** Суфыйҙың нәфсеһе Аллаһы Тәғәләгә буйһона.

**48.** Нәфсене таҙартыу өс өләштән тора:
- рәхмәт әйт, тик ошаҡлашма;
- иғтибарлы бул, битараф булма;
- айныҡ йәшә, эскелеккә бирелмә.

(Дауамы. Башы 12, 14, 17-18-се һандарҙа).

## ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЛӘМӘТЛЕК СЕРҘӘРЕ

■ Телевизорҙы күп ҡарау үлемесле сирҙәргә илтеүе бар. Телевизор алдында оҙаҡ ултырыусылар йыш ҡына үпкә эмболияһына, йәғни, үпкәнең ҡан тамырына эмбол тығылыуына дусар була, был турала Лондонда, кардиологтарҙың Европа йәмғиәте конференцияһында белдерҙеләр. Үпкә эмболияһы йөрәктән үпкәгә ҡан йөрөтөүсе артерияға эмбол тығылыуы сире, унан Бөйөк Британияла ғына йыл һайын 60 мең кеше үлә. Көнөнә 5 сәғәт төрлө телешоуҙар ҡарау менән мауыҡҡан кешеләргә мотлаҡ профилактика менән шөғөлләнергә кәрәк, ти белгестәр.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ Йоко милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнитив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл ҡеүәһенең һәм башҡа когнитив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса тукланыусыларға ҡарағанда һуңыраҡ осрашҡан. Диета 15 компонентты үҙ эсенә ала. 10 төркөм азыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы азыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәм-томдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға, бер бокал шарап эсергә тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәстән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙ аллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте булыуы араһында бәйләнеш булыуы йәки булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең унышын арттырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн алдашыуға бара һәм быны өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана. Быға тиклем окситоцин - "мөхәббәт гормоны" тураһында асыштар булғайны. Бактиһәң, алкоголь организмға окситоцин кеүек йоғонто яһай икән, шуға ла алкоголле эсемлектәрҙе һөйөүгә мохтаж булыусылар күберәк ҡуллана, тип раҫларға ла мөмкин.

## ХӘТЕРКИТАП

**Районыбыҙҙан һуғыш осоронда хеҙмәт армияһында булған 299 кеше араһында минең әсәйем яғынан олатайым - Йөҙйәшәров Мөхәмәдулла Өмөтҡужа улы ла бар. Билдәле булыуынса, хеҙмәт армияһына хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ оло йәштәге кешеләр, күбеһенсә 1900 йылға тиклем тыуғандар алына. Ваҡытлыса төҙөлгән хеҙмәт коллективтары хәрби заводтарҙа ҡорал етештерә, яу яланында ҡыйралып, эштән сыҡҡан ҡоралдарҙы, техникаларҙы ремонтлап, ҡайтанан фронтҡа оҙаталар.**

# ТОТОШ ИЛ...

## яу яланы булды



...Олатай-өләсәйле булып, уларҙың йылыһын тойоп, хәстәрен күреп үҫергә насип булды миңә. Ҙур кәүҙәле, аҡыллы-тәрән ҡарашлы, тыныс тәбиғәтле кеше ине олатайым. Ҙур ҡулдары менән башымдан һыйпап, арҡанан һөйөп ебәреүе бала сағымдың бәхетле хәтирәләренең береһеләр. Өләсәйем оҙон буйлы, күҙҙәренән яғымлылыҡ бөркөлөп торған ҡатын ине. Икеһе лә егәрле, тырыш булдылар, бай ҙа түгел, ярлы ла түгел, әммә етеш, ныҡлы, ҡотло донъя көттө, заманына күрә матур итеп йәшәне олатайым менән өләсәйем. Ә был ҡот, бәрәкәт, һис һүҙһеҙ, уларҙың динле булыуында ине. Икеһе лә биш ваҡыт намаҙҙарын, ураҙаларын ҡалдырманылар. Намаҙға олатайым урҙаға элеп ҡуйылған аҡ ҡына кулдәк-ыштанын, башына кәштәнең иң өҫкө ҡатында ятҡан сәлләһен (беҙҙә уны салма түгел, ә сәллә тиҙәр ине) кейеп баҫа ине. Йоморо башлы йәшел таяғы ла, ҡара-йәшел төҫтәге сапаны ла бар ине уның. Ауылда мәсет булмаһа ла, бабайҙар ҡалмашлап үҙҙәренең өйҙәрендә ғәйетте шулай шартына килтерергә тырышып үткәргәндәр. Хәтеремдә, бесән ваҡыты. Беҙ Фатима менән (өләсәйемдәрҙән минең менән тиҫтер кинйә балаһы) уларға эйәреп, Иҙел буйындағы сабынлыҡҡа барғанбыҙ. Бесән йыялар, күбәләйҙәр. Көн шундай эҫе. Беҙгә нимә, суптырлашып һыу инәбеҙ, еләк ашайбыҙ, ағас төбөндәге күләгәлә ултырып сәй эсәбеҙ. Ә олатай менән өләсәй ураҙала. Иҙелгә төшөп, икеһе ике урында һыу эсендә ятып алалар. Өләсәйемдең ваҡ ҡына биҙәкле аҡһыл күлдәге һыу өҫтөндә күпсеп ятҡанды күреп, беҙ сырҡылдыҡы сығып көләбеҙ. Бәләкәйбеҙ әле, уҡымайбыҙ ҙа... Һуғыштан һуң тыуған таңһыҡ балалар беҙ, яратылып ҡына йәшәйбеҙ. Артыҡ шашынмаһаҡ та, нишләптер, бик көләргә ярата инек. Нимәгә көләбеҙҙер, сәй эсеп ултырабыҙмы, ҡурсаҡ уйнайбыҙмы, бер-беребеҙгә ҡарайбыҙ ҙа тыйыла алмай көләбеҙ. Әммә олатай ҙа, өләсәй ҙә беҙҙе орошмай, беҙгә ҡарап йылмаялар ғына. Беҙ тыуырҙан алдағы ғына йылдарҙа олатай менән өләсәйҙең ниҙәр күргән-кисергәнен, беҙ, әлбиттә, белер, аңлар йәштә түгел инек әле. Беҙҙең моңһоҙ, бер ниндәй мәшәҡәтһеҙхәсрәтһеҙ сағыбыҙ, илленсе йылдар ине ул...

...1892 йылда Мәксүт ауылында тыуған һәм йәшәгән Йөҙйәшәров Мөхәмәдулла Өмөтҡужа улы 1941 йылдың 24 августында Бөрйән районы хәрби комиссариаты тарафынан хеҙмәт армияһына саҡырыла.

Фәрғизә апайымдың һөйләгәндәренән: "Оло йәштә булғас, атайымды фронтҡа алманылар, трудармияға ебәрҙеләр. Военкоматҡа Мәксүттән атайым, Мостафин Әхмәтша ағай, Ҡотандан Хәснитдинов Динислам ағайҙар бергә китте. Йәшерәк булғас, Әхмәтша ағайҙы фронтҡа ебәрәләр, атайым менән Динислам ағайҙы хеҙмәт армияһына алалар. Улар Белорет эргәһендәге Запрудовка станцияһында фронттан онталып килгән танкыларҙы, ауыр ҡоралдарҙы, уларҙы йөрөтөүсе техниканы ремонтлап, эшелон менән кире фронтҡа ебәреп торалар. Бер йыл тирәһенән атайым үпкәһе шешеп, ныҡ ауырып китә. Ауыр эш, аслыҡ та аяҡтан йыға инде. Уны шәбәйгәнсе тип ҡайтарып торалар. Тимер юл станцияһы тирәһендә ҡолап ятҡан еренән Белорет мәрйәһе табып алып ҡайтып, шәбәйтеп ҡайтара. Арыуланғас, ул Белоретҡа эшкә тағы китте. Һуғыш бөтмәгән ине әле, унан атайымды Өфө яғына, Черниковкаға ебәрәләр. Унда ла ҡыйрап килгән техниканы ремонтлайҙар. Һуғыш тамамланыуға инде трудармиялағы байтаҡ кешене Черниковканан Мораҡҡа ебәрәләр. Унда нимә эшләгәндәрен белмәйем. Аҙаҡ Ырғыҙлыла бүрәнә ҡырҡтылар. Унда ҡырҙан килгән оло йәштәге кешеләр күп булды. Ял бирәләр ине. Ял көндәре атайым бергә эшләгән иптәштәрен алып ҡайтып, әсәйем мунса индереп, өҫ-баштарын йыуып, ямаштырып биреп ебәрә ине. Ә Ырғыҙлыла эшләгән ваҡытта атайымды Антонов Алексей тигән кеше үҙҙәренә алып ҡайта торғайны. Ырғыҙлыла урыҫ белештәре күп булды атайымдың. Бер-береһенә ярҙам итешеп, булған нәмәләре менән алыш-биреш итешеп йәшәнеләр аҙаҡтан да. Һуғыш баҫылғас та ҡырҡтылар бүрәнәне. 1949 йылда трудармиянығыларҙы ҡайтарҙылар. Атайым колхозда эшләне. Һуғыштан һуң Хәсән ҡустыбыҙ менән Фатима һылыуыбыҙ тыуҙы. Әсәйемдәрҙең бөтәһе ун ике балаһы булып, дүртәүһе бала саҡта гүр эйәһе булып ҡалғайны. Аҙаҡ Хәсән ҡустыбыҙ 16 йәшендә ҡыҙылсанан, Йәғәфәр ҙә йәшләй генә фажиғәле вафат булдылар. Дин ҡушҡанса һынауҙарҙы сабырлыҡ менән үткәрергә тырышһалар ҙа ҡайғы уларҙы бөктө, икеһе лә бер-бер артлы ваҡытһыҙыраҡ китеп барҙылар.

Ауылдың динле кешеләре - Таһир ағай, Хәбир еҙнәләр менән бергә сәхәр эскәндә, ауыҙ асҡанда тәҙрәгә балаҫ ҡороп, алмашлап Ҡөрьән уҡып ултырғандары әле лә күҙ алдымда...

Һуғыш осоронда ауылда ла бик ауыр булды ул. Тотош ил яу яланы һымаҡ булды инде. Колхозда ике генә ат ҡалды, бүтәндәрен фронтҡа алып китеп бөттөләр. Колхоз һарыҡтарына, атҡа бесәнде ҡырҙан һөйрәп ташып ашаттыҡ. Беҙҙең, ярай, һыйырыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ булды. Һуғыш ваҡытының закондары ауыр булды. Тыл ул икенсе фронт тиерҙәр ине. Бер ҙә йәш тип, бала тип торманылар, беҙҙе тиҫтерҙәрем Сәлимә, Хәнифәләр менән Күркәтауға ебәрҙеләр. Ағас ағыҙыуҙа булдыҡ. Күркәтауҙан бүрәнәләрҙе Ҡанаға, унан Иҙелгә төшөрөп бирәбеҙ, трудовойҙар Иҙелдән артабан ағыҙып алып китә..."

Бына шуларҙы һөйләгәйне апайым миңә иҫән сағында. Шуны ла өҫтәйем әле, олатайым элек-электән урманда йәшәгән һәр башҡорт кешеһе кеүек, ағас эштәренә оҫта була, урман биргән бар хазинаны әрәм-шәрәм итмәй, самаһы менән генә файҙаланып, донъяны, ғаиләһе мәнфәғәтенә тотона. Күпләп солоҡ тота. Солоҡ ҡарарға беҙҙе лә эйәртеп алып барғаны хәтерҙә. Һуғышҡа тиклем батман-күнәсектәрен, септә-арҡандарын тейәп, Мораҡ баҙарына йөрөй, унан он, шәкәр, тауар, башҡа кәрәк-ярағын алып ҡайта. Дин бит мосолманға, ҡушҡандарын үтәү менән бергә, донъяһын да матур итеп көтөргә, ғаиләһен мохтажлыҡһыҙ, етеш йәшәтергә ҡуша. Олатайым тап шулай йәшәгән дә. Күп итеп картуф, ҡабаҡ сәсә, бер ваҡыт урыҫтарҙан кәбеҫтә алып ҡайтып ултырта башлай. Уныһы бик уңа. Кеше ҡыҙыҡ бит инде. Быларҙың баҡсаһына ҡарап, үҙе дин тота, харам нәмә сәсә, кафыр, тип төкөрөп киткән кешеләр ҙә була. Тик бер-ике йылдан үҙҙәре үк килеп орлоҡ һорап алып сәсә башлайҙар.

...Бер ниндәй наградаһы ла булманы олатайымдың. Һәм уларҙы, хеҙмәт армияһында булғандарҙы, әле лә телгә алып бармайҙар. Әммә уларҙың Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Улар етештергән ҡоралдар, ремонтлап ҡайтанан сафҡа ҡайтарылған ҡорал һәм техникалар окоптағы һалдаттар ҡулында дошманды ҡырған. Интернетҡа һалынған архив материалдарынан күренеүенсә, иҫ киткес ҡаты була хеҙмәт армияһындағы режим. Эшкә сыҡмауға бары тик үлем йәки һуғыш сиккә етеп аяҡтан йығылыу ғына сәбәп булыуы мөмкин. Ә яза - атыу. Оло йәштәге кешеләр булғас, күптәр ауыр эштән, ауырыуҙарҙан миңгән баштарын һала. Һауһаҡтар йәнтәслимгә эшләй, йәшерәктәре фронтҡа китергә тырыша. Бөйөк Ватан һуғышы йылъяҙмаһының ошондай бите лә хәтерҙәрҙән юйылмаһын ине. Үлемһеҙ полк сафтарында улар ҙа Еңеү парадтарында ҡатнашырға хаҡлы тип уйлайым.

**Зәйтүнә ШӘМИҒОЛОВА.**
**Бөрйән районы**
**Иҫке Собханғол ауылы.**

✓ *Әгәр һин бына хәҙер үк бер секундҡа үҙ күләгәңә күҙ һалырға теләһәң, уны күреүҙең берҙән-бер ысулы - арҡаң менән яҡтылыҡҡа боролоу икәнлегенә инанырһың.*



*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# ИҪӘП. ИҪӘП БЕЛМӘҺӘҢ - ИШӘК



**Булғанды әрәм-шәрәм итеү, иҫәпһеҙ тотоноу, барҙың ҡәҙерен белмәү, барҙы тәләф итеү, уңлы-һуллы таратыу, исраф итеү кеүек киҫәтеүҙәрҙе бала саҡтан ишетеп кенә түгел, шуларҙан ғәмәлдә тыйылып үҫкән быуын вәкиле беҙ.**

Сөнки атай-әсәйҙәребеҙ үткән быуаттың 20-се йылдарындағы йотлоҡ, 30-сы йылдарында колхозлашыу, 40-сы йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышы, 50-се йылдарҙа һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ осорҙарын туранан-тура үҙ елкәләрендә күтәргән кешеләр булды. Унан һуң инде 60-70-се йылдарҙағы торғонлоҡ, 80-90-сы йылдарҙағы түңкәрелеш осорҙарындағы етешһеҙлектәргә лә үҙебеҙ шаһит булдыҡ.

Әле бөтөнләй бала саҡта диндар Мәһибәҙәр ҡартинәйебеҙ икмәк киҫәген ашап бөтмәй ҡалдырыу ғына түгел, валсығын иҙәнгә төшөрөүҙең дә ярамаған эш икәнен ҡаңға һеңдерешә. Был дай гонаһ өсөн Аллаһ Тәғәлә башҡа һуға, тигән киҫәтеүен балалыҡ аҡылы менән, ысынлап шулай була икән, тип ҡабул иткәнмен дә, күңелдә шулай ғүмерлек һаҡлағанмын. Һәр эштә йыйнаҡ булыу, булғанды ҡәҙерләп һаҡлау, әйберҙе һаҡсыл тотоноу, аҡсала иҫәпсел булыу, юҡтан бар яһау - беҙгә тыумыштан инселәнгән бурыстар инде. Хатта Эстәрлелә ғүмер иткән осоромда, әсәйем ҡунаҡҡа килгәнендә, крандан һыуҙы шабырлатып ағыҙып тотоноуыбыҙҙы өнәмәй: "Ай, исраф итәһегеҙ һыуҙы, ауылдағыса туҫтаҡҡа ғына алып йыуығыҙсы, ағыҙмағыҙ бушҡа!" - тип кенә тороуы ла урынлы булып ҡала ине. Шул арала һыуҙы, газды, электр кеүәтен һаҡсыл тотоноурға хөкүмәт үҙе талап итә башланы бит! Тағы бала саҡта аштың бәрәкәте сеүәтәнең төбөндә, тип ялатып ҡуйыуҙарын ҡалаға уҡырға килгәс тә, тәрбиәһеҙлек, мәҙәниәлектә артта ҡалғанлыҡ, тип оноторға мәжбүр булғайныҡ бит инде заманында...

Ә 2007-2008 йылдарҙа Грецияла эшләгән осоромда, шул тиклем алға киткән мәҙәниәтле халыҡтың тавернарестарандарында тәрилкәләренең төбөндәген икмәк киҫәге менән һөртөп алып тороп ашап ҡуйыуҙарын күҙәтеп, эстән генә аптырашта ҡалыу онотолғанды кире иҫкә төшөрөргә мәжбүр итте. Үҙем йәшәгән Эллиндар ғаиләһендә ашағандан һуң икмәк киҫәктәре ҡалдырғанды рына иғтибар иткән инем тәүҙә. Миңә өҫтәл йыйыштырыу бурысы йөкмәтелгәнгә күрә, икмәк ҡалдыҡтарын ташларға ҡыймай, урамдағы эттәргә биреп ҡарайым. Улары иһә махсус аҙыҡҡа өйрәтелгән булараҡ, мин биргәнде еҫкәп тә ҡарамай булып сыҡты. Шунан инде "Икмәкте ашап бөтмәй ҡалдырыу - гонаһ" тигән һөйләмде, телде белмәгән килеш, һыҙлек аша тәҙәп, ятлап алып ҡуйҙым да, батырсылыҡ итеп әйттем бит тегеләргә! Киҫәтеүемде бер аҙ аптырашып, баштарын һелкә биреп тыңлаһалар ҙа, был ҡылыҡтарын шундуҡ тәҙәтте улар. Ҡул эшенә оҫталығымды белеп алғас, әле бер, әле икенсе әйберҙәрен яматып, тәҙәтеп тегеп биреүемде үтенәләр ине. Ни тиклем етеш, бай йәшәгән ғаилә булһа ла, көндәлек тормошта ошондай һаҡсыллыҡ талаптары үтәлә ине уларҙа.

Һуғыш ваҡытында Өфөләге 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһында фронт өсөн шинель-гимнастеркалар теккән әсәйемдән күскән тағы ла бер һәләтем - ҡорама ҡорау булды. Был шөғөл тормошта, көнкүрештә һаҡсыллыҡҡа иң сағыу өлгө тиһәң дә була. Донъя ҡорамаһан йыйыла, тип бушҡа әйтмәгән боронғолар. Уның тамырҙары боронғо дәүерҙәрҙән, тәрән тарих ерлегендә барса халыҡтарға ла берҙәй уртаҡ. Үҫтерелгән урынына ҡарап, тәбиғи ебәкме ул, кизе-мамыҡмы, етен йәки киндер туҡымамы, өр-яңымы, әллә ҡулланылышта булып иҫкергән сепрәк киҫәгеме - уны исраф итеү мөмкинлеге башына ла кереп сыҡмағандыр кешелектең! Оҙаҡ ваҡыт арауығы эсендә ҙур хеҙмәт көсө түгеп етештерелгән, шуға күрә ҡиммәтле һыналған туҡыманың һәр төрөн, бәләкәй генә киҫәгенә тиклем, файҙалы ҡулланыу зарурatынан барлыҡҡа килгән ҡорама ҡорау һөнәренә ҡатын-ҡыҙ затынан булған һәр кем эйә булырға тейештәр, тигәнгә иманым камил. Шуға күрә, ҡайҙа ғына барһам да, мөмкин булған бер ерҙә оҫталыҡ дәрестәре күрһәтеү ғәҙәтемә ингән. Аллаға шөкөр, барыбыҙ ҙа етеш тормошта, һәр кемдең үҙенеке үҙенә етерлек заманда ҡорама ҡорау элекке кеүек мохтажлыҡтан түгел, ә сәнғәт кимәлендәге ижад төрөнә күтәрелде. Иҫке өйҙә һүткәнсе, яңыһын һал; иҫке тимерҙе һаҡлаһаң, алтын булыр; яңы туным булды тип, иҫкеһен утҡа һалма; яңы булды тип, иҫкене хурлама, тигән мәҡәлдәрҙе барыбыҙға ла төбәп һаҡлаған бит боронғолар. Әле ҡулланырлыҡ әйберҙе иҫке тип ташлап, донъяны сүп-сарға баҫтырыуҙан дөйөм кешелек алдына ҙур хәүеф килеп баҫҡанын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Юҡҡамы ни исрафтан һаҡланыу диндә иң ҙур талаптарҙың береһе.

Шулай итеп, тормош һабаҡтарымы, халыҡ ижадымы, дин тарихымы - барыһы ла әҙәм балаһын алтын урталыҡты табып, һәр нәмәлә сама белеп, аҡыл менән йәшәргә өйрәтә.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

**(Аҙағы. Башы 19-сы һанда)**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**21-се идея Күләгә**

Малай саҡта иптәштәрем менән "Күләгә аша һикер" тигән уйын уйнай торғайныҡ - һәр кем күршеһенең күләгәһе аша һикерергә маташты. Ул саҡта беҙ үҙ күләгәбеҙҙе бик яҡшы күрә торғайныҡ. Ә һин ҡасан һуңғы тапҡыр үҙ күләгәңә ҡарағайның?

Мәҫәлән, уҡырға ултырғанда һин уны инстинкт буйынса һиҙәһең: дөрөҫ урынлашмаһаң, башыңдың күләгәһе яҡтылыҡты ҡаплауын күрәһең. Һин йә ултырыҫты шылдыраһың, йә күләгә китапҡа төшмәҫлек итеп лампаны күсерәһең. Күп ваҡытта беҙ үҙ күләгәбеҙҙе бөтөнләй һиҙмәйбеҙ. Әммә тормошобоҙҙа беҙ йышыраҡ уның күләгәле яғын һиҙәбеҙ, ә уның өҫтөндәге яҡтылыҡты түгел.

Әгәр һин бына хәҙер үк бер секундҡа үҙ күләгәңә күҙ һалырға теләһәң, уны күреүҙең берҙән-бер ысулы - арҡаң менән яҡтылыҡҡа боролоу икәнлегенә инаныр һың. Хәҙер үк күләгәңә ҡара әле - һин яҡтылыҡ сығанағына арҡаң менән боролдоң.

Тормошта ла һин тап шулай йәшәйһең. Үҙ тормошоңдоң күләгәле яҡтарын йәки үҙең күләгә тип иҫәпләгән күренештәрҙе генә һиҙәһең: был - сәләмәтлегең менән проблема, аҡса яғынан ҡыйынлыҡтар, ғаиләләге ыҙғыш-талаштар булыуы мөмкин.

Һин уларҙы тормошоңдағы яҡтылыҡ сығанағына арҡаң менән боролған саҡта һиҙәһең. Дөйөм Аҡыл яҡтылығы һинең тирәләй һәм һинең аша, тәнең, тормошоң һәм көндәлек эштәрең аша хәрәкәт итә - һине сәләмәтлеккә, бәхеткә һәм уйҙарыңдың камиллығына илтеү өсөн тоҡандырылған яҡтылыҡ ул. Әгәр ошо яҡтылыҡҡа арҡаң менән боролһаң, үҙ тормошоңдоң күләгәһен генә һиҙеп йәшәрһең.

Ошо турала уйлан. Үҙ тормошоңдоң күләгәле яҡтарына ғына иғтибар бир ҙә үҙеңдән: "Быларҙың барыһы ла тормошомдағы яҡшы нәмәләргә күҙ һала белмәүем арҡаһында килеп сыҡтымы икән ни?" - тип һора. Проблемаларҙы еңел күрәбеҙ ул, тик бына тормошобоҙҙоң күркәмлегә хаҡында етди уйланабыҙ һәм етерлек ваҡыт бүләбеҙ микән һуң? Ә күләгә бит яҡтылыҡта ғына күренә. Әгәр һин бөтә яҡтан да яҡтыртылһаң, бер ниндәй ҙә күләгәне күрә алмаған булыр инең.

Яҡтылыҡҡа боролоуҙан баш тартыу, тормошобоҙҙағы яҡшы нәмәләргә әйләнеп ҡарамау ғына беҙҙе тормоштоң күләгәле яғында йәшәргә мәжбүр итә. Тормошоңдоң яҡтылығына борол, һәм күләгә һинең өҫтөңдән хакимлыҡ итмәйәсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ТӘКӘББЕРЛЕК...

## йән ауырыуы ул

**Йән ауырыуҙарының береһе булып тәкәбберлек хисе тора. Шәриғәт законддары буйынса кешелә был ауырыу башҡалар менән иҫәпләшмәгән саҡта барлыҡҡа килә. Тәкәбберлек хисенең башланғысы үҙеңдә икенсе кешеләрҙән өҫтөн күреү тойғоһонда ята. Был хаҡта бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Йөрәгеңдә бәләкәй генә миҡдарҙа булһа ла тәкәбберлек, эрелек хисе булған кеше бер ҡасан да ожмахҡа эләкмәйәсәк".**
**Тәкәбберлек хисе менән ауырыған мосолман ожмахҡа бер ҡасан да эләкмәйәсәк, тигән һүҙ өмөттө өҙөргә кәрәк, тигәнде аңлатмай, был сифаттан арынырға, таҙарынырға бер ҡасан да һуң түгел.**

Тәкәбберлек хисе менән ауырыу бик ҡурҡыныс күренеш һәм кешелек донъяһына әллә күпме хәсрәт килтереүе ихтимал. Шуның иң сағыу миҫалы - фашизм әҙәмтәләре.

Тәкәбберлек кешенең нәфсеһенә йоғонто яһай. Ул Бәйғәмбәрҙең һүҙҙәрен, Ҡөрьән аяттарын дөрөҫ аңламай башлай. Аллаһ тәкәбберлек хисен яратмай һәм бындай йән ауырыуы булған кешене Хәҡиҡәттән ситтә йөрөтөрмөн, тигән. Бындай кешеләрҙең һәр саҡ хәл ителмәгән проблемалары күп була һәм улар үҙҙәрен тыныс һыҙ тота. Бындай кешеләр башҡаларҙан ихтирам көтә һәм көтөп тә моратына ирешә алмаһа, башҡаларға асыу менән ҡарай.

Тәкәббер кеше үҙенең кәмселектәрен күрмәй һәм улар турала ишетергә лә теләмәй. Хәҙистә әйтелгән: "Эштәре файҙаһыҙ кешеләр кем икәнлеген әйтәйемме? Тәкәбберлек ауырыуы йоҡҡан кешеләр". Бындай сир менән ауырыусылар Аллаһы Тәғәләнең ярҙамына өмөт итә алмай.

**Тәкәбберлек хисе барлыҡҡа килеүенең сәбәптәре төрлө:**

- Ата-әсәләре тәкәббер булған балалар шулай уҡ тәкәббер була.
- Урынһыҙ маҡтау ҙа кешегә бик насар тәьҫир итә һәм тәкәбберлек хисен уята.
- Тәкәббер кешеләр менән аралашыуҙан да был сифатты йоҡтороп була. Хәҙистә әйтелгән: "Һин аралашҡан кешеңә оҡшағанһың".
- Билдәле бер кимәлгә еткән кеше Кем арҡаһында был ниғмәттәргә эйә булыуын онотһа.
- Әле аҡылы өлгөрөп етмәгән кеше үҙен аҡыллы тип һанаһа.
- Әгәр ҙә кеше үҙенең был донъяға ниңә тыуғанлығын онотһа, йәки бөтөнләй белмәһә.
- Башҡа кешеләрҙән артыҡ иғтибарынан тәкәбберлек тойғоһо тыуа.
- Кеше башҡалар менән сағыштырғандан һуң үҙен бөйөк тип һанаһа.
- Кеше Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булмаһа.
- Тәкәбберлек хисенең ни сәбәптән барлыҡҡа килгәнен белмәһә.

Ҡөрьән Кәримдә бер хәҙис бар: бер ҡатын урамда китеп барған Ғүмәрҙе туҡтатҡан да былай тип әйткән: "Һин элек баҙарҙа балалар менән уйнаған Ғүмәр инең. Хәҙер һин - мосолмандарҙың идара итеүсеһе. Тәкәбберләнмә һәм маһайыуға юл ҡуйма!" Ғүмәрҙе уратып алыусыларҙың иҫе китә: "Ниңә тыңлайһың һин был ҡатынды?". Ғүмәр иһә ҡатынды аҙағына тиклем тыңлап бөтөп, былай тип әйтә: "Был ҡатынды Аллаһ үҙе тыңлай".

*✓ Ҡәҙер кисендә Аллаһы Тәғәләнең әмере менән ер йөҙөнә фәрештәләр инеп, бәндәләрҙең гонаһтарын ярлыҡауын теләп йөрөр. Ул кистә ер йөҙө Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән ҡапланыр, бәндәләрҙең гонаһтары юйылыр.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ БАШҠОРТТАР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**19-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Арҡайым. Непал. Таҡмаза. Хата. Ҡалпаҡ. Бумала. Еләк. Аланғы. Уҡа. Ҡабаҡ. Сигнал. Зиндан. Ницше. Ля. Яхин. Азия. Үлән. Депо. Лапы. Шура.

**Вертикаль буйынса:** Батырова. Хәмиҙуллин. Абзац. Тағара. Шәүәли. Ҡон. Ҡунаҡбаев. Ландыш. Арҡан. Нияз. Муллаҡаева. Суфиянова. Англия. Пекин. Ҡайғы. Лион.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Май (Рамаҙан - Шәүүәл) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (25) дүшәмбе | 3:06 | 4:36 | 5:06 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 19 (26) шишәмбе | 3:05 | 4:35 | 5:05 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 20 (27) шаршамбы | 3:03 | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 21 (28) кесе йома | 3:02 | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 22 (29) йома | 3:00 | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 23 (30) шәмбе | 2:59 | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 24 (1) йәкшәмбе | 2:57 | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАҠСА*

# КИШЕР ҮҪТЕРӘМ...

Нимәлер ултыртырға, сәсергә тиһәк, тигеҙ түтәлдәр һәм тигеҙ итеп ярылған юлдар күҙ алдына баҫа. Мин дә бәләкәйҙән кишерҙең рәт-рәт кенә булып ултырғанына өйрәнгәнмен. Былай утарға ла уңайлыраҡ һымаҡ. Әммә бына икенсе йыл инде үзбәк алымы менән ултыртам һәм былай нығыраҡ оҡшай ҙа. Үзбәктәр кишерҙе нисек сәсә һуң? Улар ниндәйҙер һауыт ала, мәҫәлән, тәрилкә, унда кишер орлоғон тупраҡ менән ҡушып болғай. Был процедураны орлоҡтарҙың тупраҡта тигеҙ бүленеүенә тиклем башҡара. Һуңынан ошо ҡатнашманы ергә һибеп сығалар ҙа, тырматалар һәм һыу һибәләр. Кишер тигеҙ булып үҫә, хатта сүп үләненә морон төртөргә урын да ҡалмай. Бигерәк тә кишер көс йыйғас, улар бөтөнләй үҫмәй. Сәсеп бөтөп һыу һипкәс, түтәлде пленка йәки арготекс менән ҡаплаһаң, пар аҫтында орлоҡтар тиҙерәк шыта. Ашлама өсөн тауыҡ тиҙәгенән эшләнгән ҡатнашманы ҡулланырға мөмкин.

**Артур ИҘЕЛБАЕВ,**
**агроблогер.**

*ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ*



# ҠӘҘЕР КИСЕ

**Ҡәҙер кисе - йылдың иң яҡшы кисе. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә был кис хаҡында: "Ҡәҙер кисе мең айҙан да хәйерлерәк", - ти ("Ҡәҙер кисе" сүрәһе, 97:3). Йәғни, Ҡәҙер кисендә намаҙ ҡылыу, Ҡөрьән уҡыу, Аллаһты зекер итеү һәм бүтән ғибәҙәттәрҙе үтәү башҡа мең айҙа (80 йыл) ҡылынған ғибәҙәттәрҙән дә өҫтөн.**

Хәҙис һәм риүәйәттәрҙә был кис рамаҙан айының һуңғы ун тәүлегенең таҡ төндәренә тура килеүе мөмкин, тип әйтелә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә шулай тигән: "Ҡәҙер кисен һуңғы ун төндә көтөгөҙ - йә туғыҙ, йә ете, йә биш көн ҡалғас". Тимәк, был юлы Ҡәҙер кисен 13 майҙан, йәғни рамаҙан айының 20-нсе кисәһенән эҙләргә кәрәк була. Ҡайһы бер хәҙистәрҙә әйтелгәнсә, уны рамаҙан айының 27-се кисендә тип иҫәпләйҙәр. Әммә был фараз ғына, сөнки кисә айҙың ҡайһы көнөнә тура килеүе аныҡ ҡына билдәле түгел. Йәнә бер хәҙистә Бәйғәмбәребеҙ: "Миңә Ҡәҙер кисе күрһәтелгән ине, ләкин аҙаҡ онотторолдо. Ул һуңғы ун төнгә тура килә. Асыҡ төн, һыуыҡ та, эҫе лә түгел. Ай йондоҙҙарҙы ҡаплаған кеүек. Шайтандар ул төндә таң атҡансы сыҡмай", - тигән. Ҡәҙер кисәһенең билдәләренә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ әйткәндәрҙән тыш, был кисә нурлы, тымыҡ, йылы, елһеҙ булыр, яуым-төшөм булмаҫ, тигән мәғлүмәттәр ҙә еткерелгән. Ул кистә һауанан йондоҙҙар атылмаҫ, һыуҙар татлы булыр тип тә яҙылған.

Ҡөрьән рамаҙан айының Ҡәҙер кисендә инә башлаған. "Әл-Бәҡара" сүрәһенең 185-се аятында был турала: "Рамаҙан айында кешеләргә ҡулланма өсөн һәм тура юлды аңлатыу һәм дөрөҫлөк менән ялғанды айырыу өсөн Ҡөрьән индерелде", - тиелә. Ҡәҙер кисе бер йыл эсендә байрамдарҙың иң олоһо һәм Аллаһы Тәғәләнең әмере менән ер йөҙөнә фәрештәләр инеп, бәндәләрҙең гонаһтарын ярлыҡауын теләп йөрөйәсәктәре тураһында Ҡөрьәндә "Әл-Ҡәдр" (Ҡөҙрәт) сүрәһендә зекер ителә. Ул кистә ер йөҙө Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән ҡапланыр, бәндәләрҙең гонаһтары юйылыр. "Иман һәм Аллаһтың әжеренә өмөт менән (төнгө намаҙҙа) тороусының быға тиклем ҡылынған хата-гонаһтары ярлыҡаныр", - тиелә хәҙистәрҙә. Аллаһ рәсүле Ғәйшәгә Ҡәҙер кисендә киләһе доғаны әйтергә кәңәш иткән: "Аллаһүммә, иннәкә ғәфүүн, түхиббүл ғәфүә, фәғфү ғәнни!" - "Аллаһым! Ысынында, Һин - Ғәфү Итеүсе, Һин ғәфү итергә яратаһың, мине ғәфү итсе!"

Мосолмандарға ҡәҙер кисендә тәүбәгә килеп, ҡазаға ҡалған намаҙҙарын үтәү фарыз. Ҡәҙер кисендә 4 рәҡәғәт намаҙ уҡыла: беренсе рәҡәғәттә - бер "Әл-Фатиха" (Фатиха), өс "Әл-Ҡәдр" (Ҡөҙрәт); икенсе рәҡәғәттә - бер "Әл-Фатиха", өс "Әл-Ихлас" (Ихласлыҡ); өсөнсө рәҡәғәттә - бер "Әл-Фатиха", өс "Әл-Ҡәдр"; дүртенсе рәҡәғәттә - бер "Әл-Фатиха", өс "Әл-Ихлас".

Намаҙҙан һуң бер тапҡыр "Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр. Лә иләһә илләллаһү уаллаһу әкбәр. Аллаһу әкбәр үә лилләһил-хәмде"; йөҙ тапҡыр "Әл-Ҡәдр"; йөҙ тапҡыр "Әш-Шәрх" (Ярып асыу); йөҙ тапҡыр "Аллаһүммә иннәкә ғәфүүн кәримүн түхиббүл-ғәфүә фәғфү ғәнни" сүрәләрен уҡырға.

Әммә Ҡөрьән аяттарын бик белмәгән кешеләр намаҙҙы ике рәҡәғәт кенә итеп һәр рәҡәғәттә бер "Әл-Фатиха" һәм бер "Әл-Ихлас" сүрәһен уҡыһа, намаҙҙан бушанғас етмеш мәртәбә "Әлхәмдү лилләһи" тип әйтһә, Аллаһы Тәғәлә ул кешенең гонаһтарын ярлыҡар һәм фәрештәләр икенсе йылға тиклем был кешенең изгелектәрен яҙыр.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# КҮҢЕЛЕҢ НИ ТЕЛӘЙ?



## Тыңлап ҡара, ишетергә өйрән

**Беҙ йыш ҡына ҡайҙалыр ашығабыҙ, йүгерәбеҙ, бөтәһенә лә өлгөрөргә тырышабыҙ, әйтерһең дә, кешеләр түгел, ә тәгәрмәстә әйләнеүсе тейендәр. Кемдер хатта был ашығыуҙарҙа ниндәйҙер уңыштарға ла ирешә, ләкин шул мәл күңелде бушлыҡ солғап ала, сөнки оҙаҡ ваҡыт буйы көрәшеп яуланған һөҙөмтә миҙгел эсендә әһәмиәтен юғалта. Ҡәҙерле кешеләребеҙҙе, һаулығыбыҙҙы, яҡты киләсәккә өмөт һәм ышанысыбыҙҙы юғалтабыҙ, үҙ-үҙебеҙгә ышанысыбыҙ бөтә... Бына шулай килеп сыҡмаһын өсөн үҙеңдең ысын МИНеңде - күңелең теләгәндө ишетә белергә өйрәнергә кәрәк. Тик күңелең генә һиңә дөрөҫөн һөйләйәсәк, ә уны ишетер өсөн бына ниҙәр эшләргә кәрәк.**

### Яңғыҙ йөрөргә сығығыҙ

Яңғыҙлыҡ ҡына кешене үҙ-үҙенә ҡөйләй һәм үҙенең уйҙарын, хис-тойғоларына һәм теләктәренә иғтибарҙы туплай ала. Иң һәйбәте - телефонығыҙҙы өйҙә ҡалдырып сығыу: бер кем һеҙҙе борсомаһын. Урманда йөрөргә лә була, ә инде һеҙ ҡалала икән, иртән йә кис ҡасандыр яҡын булған, ләкин хәҙер уның менән аралашмаған кешегеҙ менән тәүге таныштыр үбешкән йә осрашҡан иҫтәлекле урындар буйлап йөрөгөҙ - ҡалала ла хискә бирелер урындар бар. Шулай ҙа иң яҡшыһы - урман, әлбиттә, шау-шыулы тормоштан баш тартыусылар юҡҡа ғына урманға сығып китмәгән, тап шунда, тәбиғәт менән үҙенде бер бөтөн итеп тойған саҡта яңғыҙлыҡтан ләззәт алырға була. Ә инде эргәлә йылға йәки күл, быуа булһа, бигерәк тә яҡшы. Урман буйлап йөрөгәҙ, упҡәләрҙе тултырып, уның һауаһын һулағыҙ, ығы-зығынан китеп, үҙегеҙҙе иркенлектә тойоғоҙ, шул саҡта инде күңелегеҙҙе борсоған һорауҙарға үҙенән-үҙе яуаптар таба башларһығыҙ. Ҡалала үҙегеҙ өсөн ҡәҙерле иҫтәлектәр һаҡлаған урындарҙа булғанда ла һорауҙарығыҙға яуаптар ала башларһығыҙ. Кеше күңеле тынлыҡ, аулаҡ шарттарҙы, матур хәтирәләрҙе ярата.

### Йыбаныуға иғтибар итегеҙ

Ҡайһы саҡ беҙҙең ниҙер эшләргә ҡыныҡ ялҡауыбыҙ килә. Беҙ үҙебеҙҙе мәжбүр итергә маташабыҙ, тәрлөсә үҙебеҙҙе дәртләндереп тә ҡарайбыҙ, ләкин шул уҡ ваҡытта йыбаныу тойғоһо аша күңелебеҙҙең беҙгә был эштең беҙҙеке түгеллеген белдерергә теләүен генә аңлап етмәйбеҙ. Улай ғына ла түгел, йыбаныу беҙгә эшебеҙҙә ял кәрәклегенә генә күрһәтеп ҡалмай, ә ғөмүмән, башҡарырға теләмәгән был ғәмәлдең тәбиғәтебеҙгә ят булыуы хаҡында ла һөйләй. Был кешеләр менән мөнәсәбәттә лә шулай. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле: әгәр был һеҙҙең кеше һәм һеҙгә бер-берегеҙ менән яҡшы, ҡыҙыҡлы икән, һеҙ уның менән осрашырға, күрешергә һәр саҡ әҙер һәм шат, ә инде был юлығыҙға тап булған осраҡлы кеше икән, уның менән осрашырға атлығып тормайһығыҙ, йыбанаһығыҙ. Осрашыу өсөн бер ниндәй инициатива күрһәтмәйһегеҙ, килә алмауығыҙ өсөн ақланыу йә сәбәп эҙләйһегеҙ, йәнәһе лә, бесәйегеҙ көсөкләйме унда йәки башҡа берәй хәйләһе табыла. Инде тағы ла шундай осраҡта ҡалырға тура килһә, үҙегеҙҙе ғәйепле тойоп, сәбәп һәм аҡланыуҙар уйлап сығарып яфаланмағыҙ, белеп ҡуйығыҙ: йыбанаһығыҙ икән, тимәк, был һеҙҙең ғәмәл, һеҙҙең кеше, һеҙҙең хәстәр түгел - күңелегеҙ тауышына ҡолаҡ һалығыҙ, ул бит шулай тип ҡысҡыра...

### Бәйлелектән ҡотолоғоҙ

Беҙ ирекле һәм азат булып тыуабыҙ, ә донъянан китер мәлгә ҡырҡ йыллыҡ эш стажы, түләнеп бөтмәгән кредиттар һәм дошмандар йыйылып китеүен күрәбеҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙ үҙ-үҙебеҙҙе ирекле булыуҙан, үҙебеҙ булып йәшәүҙән, ситтән мәжбүр ителеп түгел, ә үҙ иркебеҙ менән мәхрүм итәбеҙ. Былар бөтәһе лә беҙҙең көстө, энергияны һурыусы бәйлелектән килә: эш, аҡса артынан ҡыуыу, кәрәкмәгән әйберҙәр һатып алыу, теләмәгән балаларҙың тыуыуы, тәмәке тартыу, эскелеккә бирелеү һәм башҡалар. Йәмғиәт тә, дәүләт тә һәм беҙ ҙә үҙебеҙҙе ҡоллоҡҡа төшөрәбеҙ, ә йән азатлыҡ һорап асырғаныуын, уның тауышын ишетеү өсөн кешегә ирек - йәнендең стихияһына эйә булыу кәрәк. Тап бына ошо мәлдә ҡәтғи һәм аяуһыҙ аҡыл ғына һеҙҙең тоғро теләктәшегеҙ була ала. Уның ярҙамында һеҙ үҙегеҙҙән бойондороҡһоҙ кеше һәм һаҡ, йәнегеҙгә ирек бүләк итә алаһығыҙ. Тап ул ғына һеҙгә кәрәге булмаған әйберҙәр өсөн кредиттар алыуҙан туҡтата ала, тап ул ғына һеҙҙе анһа начальниктарҙан башҡа ла аҡса эшләргә өйрәтә ала һәм яңы хыялдарығыҙға ирекле юл аса. Шул арҡала һеҙ бер урынға бәйләнеп ултырыуҙан азат булып, бәхетегеҙ артынан йәнегеҙ теләгән яҡҡа сығып китә алаһаҡһығыҙ, шул арҡала ғына һеҙ теләп алынған, яратҡан балалар тыуҙыраһаҡһығыҙ. Быларҙы һеҙҙән йәмғиәт һәм дәүләт талап иткән өсөн түгел, ә үҙегеҙ теләгән өсөн. Дәүләткә бит күберәк эшсе ҡулдар, һалым түләүселәр кәрәк. Фәҡәт хәйләкәр һәм аяуһыҙ аҡыл ғына бәйлелектән ҡотҡарыусы ирек бүләк итә, мәгәр был мөмкинлектән бары тик саф һәм асыҡ күңелләр генә файҙалана ала.

### Күңелең ҡушҡанды эшлә

Ҡайһы саҡтарҙа эшлекле кәңәш, икенсе төрләрәк, аҡыллы һәм һәр төрлө бәйлелектән азат фекер ишетке килә. Тик бына әйләнә-тирәбеҙҙә күпселектең башҡаларға үҙ фекерен тағырға маташыусылар булыуы, ә фекеренең иһә үҙ башынан үткән ыңғай йә кире тәжрибә һөҙөмтәһе генә икәнлеге яҡшы мәғлүм. Үкенескә, быңдайҙар араһында ҡайһы саҡ яҡын кешеләребеҙ ҙә булып сыға. Рәссам булырға теләгән кешене ата-әсәһе юрист һөнәренә уҡырға мәжбүр итә, сөнки рәссам - ул аңлайышһыҙ һәм өҫтөнлөклө булмаған һөнәр тип ҡарала. Йәки шундай миҫал. Берәйһе үҙ эшен башларға, үҙе өсөн эшләргә йыйынһа, әргәһендәгеләр бер тауыштан был ниәттең барыһын кире ҡағып, кешегә киләсәктә пенсия өсөн иң тәүҙә стаж кәрәклеге тураһында аҡыл өйрәтә башлай. Йә булмаһа был ниәт бергә эшләгән коллегалар тарафынан көлкөгә һабыштырыла. Уларға башҡа таныштар, хатта туғандар ҙа ҡушыла... Күптәребеҙгә ваҡытында ана шундайҙар фекеренә бәйлелек арҡаһында үҙенең маҡсатынан, азатлығынан, хыялынан баш тартырға тура килгәндер. Аҙаҡ инде ул сер бирергә теләмәйенсә, башҡа юл ҡалмауына һылтанып, аҡланыу эҙләп маташҡандыр. Ә ҡартлыҡ көнө килеп еткәс, башҡаларҙы тыңлап һәм ҡурҡып ҡалыуына, үҙ көсөн һынап ҡарамауына әрней, үкенә. Был ошо кеше өсөн бик әрнеткес һәм ауыр. Шуны бер тапҡыр һәм мәңгелеккә иҫтә ҡалдырығыҙ: һеҙҙең өсөн нимә яҡшы йә насар булыуын үҙегеҙҙән һәм күңелегеҙ тауышынан башҡа бер кем белә һәм әйтә алмай. Шуға ла кеше әйткәнен түгел, һәр ваҡыт күңелегеҙ ҡушҡанды эшләгеҙ.

### Хыялыңдан ысынбарлыҡ яһа

Хыял беҙҙең тормошобоҙға мәғәнә бирә, тап шул хыял, илаһи көс булараҡ, аңыбыҙҙы йәнебеҙ, күңел торошо менән бәйләй. Хыял - ул күңел теләге, үҙең өсөн генә лә түгел, донъя өсөн дә хатта. Хыял даирәһе ифрат киң һәм ҙур, йыш ҡына ул тормошҡа ашмаҫтай алыҫ булып тойола. Ләкин уның бөтөн матурлығы тап шунда ла: мөмкин булмағанды эшләү мөмкинлеге. Тарихты иҫкә төшөрөгөҙ: бөйөк аҡыл эйәләре нисек фәнни асыштар эшләгән, шул арҡала донъя үҙгәргән, алға киткән. Ә нисек итеп кешеләрҙең ҡараштары үҙгәргән һәм ҡаты бәгерле, наҙан әҙәмдәрҙән әкренләп беҙ Аллаһ балаларына өҡшай барғанбыҙ. Ләкин үҫеш өсөн сиктәр юҡ. Шәхес булараҡ үҫешеү, камиллашыу, үҙ алдына белем эстәү - был үҙе үк алға табан аҙым. Шәхес булараҡ үҫешегеҙ, был һеҙгә хыялдарығыҙҙан ысынды яһарға ярҙам итер, сөнки хыялдарығыҙ аша ғына йәнебеҙ беҙҙең менән һөйләшә ала.

**Интернеттан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОШМАНЫҢА ТУРА ӘЙТҺӘҢ,

## дуҫыңа өлгө булыр

Наҙан әйтер: "Мин еңдем", аҡыллы әйтер: "Юл бирҙем".

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин иртәгәнән ҡурҡмайым, сөнки мин кисәгене күрҙем һәм бөгөнгөнө яратам.

**(Уильям Уайт).**

Ҡайһы ваҡытта бәхетһеҙлекте кисереүе еңелерәк? Һинең дошмандарыңдың тағы ла бәхетһеҙерәк икәнен күргән саҡта.

**(Фалес).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Будда үҙенең шәкерттәре менән буддасыларға ҡаршы булған ауыл эргәһенән үҙып барған. Ауыл кешеләре уларҙың юлына ҡаршы сыҡҡан һәм төрлө һүҙҙәр менән әрләй, хурлай башлаған. Шәкерттәр ҙә үҙҙәрен әрләүселәргә ҡаршы һүҙ әйтергә уҡталған да Будданың тыныс йөҙөн күреп, һүрелгән. Шул саҡ Будда үҙенең шәкерттәренә табан әйләнгән дә былай тигән: "Һеҙ мине төңөлдөрә яҙҙығыҙ. Был кешеләр бит үҙ эшен эшләй. Улар асыулы. Улар мине үҙҙәренең диненең дошманы тип уйлай. Шуға ла улар мине мыҫҡылларға тырыша, был тәбиғи. Ләкин ни өсөн һеҙ асыуланаһығыҙ? Уларға асыуланып, һеҙ үҙегеҙҙе уларға бойондороҡло итәһегеҙ. Һеҙ ирекле кешеләр түгелме ни?" Ауыл кешеләре бындай реакцияға аптырап, тынып ҡалған. Ошо тынлыҡтан файҙаланып, Будда халыҡҡа боролған да, былай тигән: "Һеҙ барыһын да әйтеп бөттөгөҙмө? Әйтеп бөтмәһәгеҙ, беҙ сәйәхәтебеҙҙән ҡайтышлай тағы һеҙҙең ауыл аша үтербеҙ, шунда барыһын да әйтеп бөтөп ҡуйырһығыҙ". Ауыл кешеләре аптырашып: "Һуң беҙ һине мыҫҡыл иттек бит, ни өсөн һин беҙгә асыуланмайһың?"- тип һораған. "Һеҙ ирекле кешеләр һәм һеҙ ҡылған ҡылыҡ - ул һеҙҙең хоҡуғығыҙ, - тигән уларға Будда. - Ләкин мин һеҙҙең мыҫҡыллауҙарға асыуланмайым, сөнки мин дә ирекле кеше. Мине берәү ҙә асыуланырға, шуның менән үҙенә бойондороҡло булырға мәжбүр итә алмай. Мин үҙ ҡылыҡтарымдың һәм тойғоларымдың хужаһы. Ә хәҙер мин һеҙгә шундай һорау бирергә теләйем. Һеҙҙең күрше ауылда йәшәүселәр мине матур итеп сәләмләне, миңә еләк-емеш, сәскәләр килтерҙе. Ә мин уларға:**

**"Бүләктәрегеҙ өсөн рәхмәт, тик беҙ уларҙы үҙебеҙ менән бергә алып йөрөй алмайбыҙ, шуға ла уларҙы үҙ фатихам менән үҙегеҙгә кире ҡайтарам", - тинем. Шул саҡ ауыл кешеләренең береһе: "Улар, моғайын, был күстәнәстәрҙе өйҙәренә алып ҡайтып, балаларына өләшкәндер..." - тип һүҙ ҡыҫтыра. Будда йылмая һәм шулай ти: "Эйе, шулайҙыр. Бына мин һеҙҙең мыҫҡыллау һәм ҡарғауҙарҙы ла алмайым, үҙегеҙгә кире ҡайтарам. Һеҙ ул йөктө ни эшләтерһегеҙ икән?"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирләт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3600
Заказ - 383/05

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.